# Зәйнәп Бишева

2

# ЗАЙНАБ БИИШЕВА

## ПОВЕСТИ
## РАССКАЗЫ
## ТОМ 2

# ИЗБРАННЫЕ ПРОИЗВЕДЕНИЯ

## В ДВУХ ТОМАХ

БАШКИРСКОЕ КНИЖНОЕ ИЗДАТЕЛЬСТВО
УФА —1969 г.

Б-43

# ЗӘЙНӘП БИИШЕВА

## ПОВЕСТӘР ХИКӘЙӘЛӘР

## 2 ТОМ

# ҺАЙЛАНМА ӘҪӘРҘӘР

ИКЕ ТОМДА

27423

БИБЛИОТЕКА
объединенного профкома
Учалинского ГОК

БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
ӨФӨ — 1969 г.

# ХИКӘЙӘТТӘР



# Һөнәрсе һәм Өйрәнсек

## I

— Һи-и, ҡомартҡылармы? Беҙҙең ауылда инде уның иң кәттәләре! — тип ғәйәт ҙур ышаныс менән хәбәр иттеләр бында миңә.

— Беҙҙең Хасбулат апа (был яҡта олатайҙы шулай атайҙар икән) үҙе генә ни тора?! Боронғононоң тере шаһите бит ул! Ышанмаһаң, бар, һөйләшеп ҡара. Унан үҙең дә юлыңдың был яҡҡа төшөүенә шөкөр итеп бөтә алмаçһың! — тип маҡтанды берәүҙәре. Икенселәре:

— Бар, туған. Күреп ҡал. Юҡһа, Хасбулат апа ошо арала бөтә ҡомартҡыларын мәктәпкә бирергә тора. Мәктәптә ил өйрәнеү музейе төҙөп ебәрәм, ти. Төҙөр. Булдыра торған ҡарт ул. Белмәгәне юҡ уның. Торғаны менән йәнле ҡомартҡы инде үҙе, — тип ҡыҙыҡтырҙы. Өсөнсөләре миңә Хасбулат ҡарттың тотош муйыл сәскәһе эсендә ултырған тимер түбәле ыҡсым ғына өйөн күрһәтергә ашыҡты.

— Ана, йорт-ерен ҡара һин уның. Булдыҡлы кешенеке икәне әллә ҡайҙан күренеп тора.

Мин, урамды тотош япҡан ҡабарынҡы ҡаҙ үләндәренә кинәнеп баçа-баçа, ашыҡмай ғына шул яҡҡа табан атланым.

— Бар. Ҡурҡмай бар, — тип ҡалдылар минең яңы таныштарым. — Ҡомартҡыларын һанларҙай кеше килһә, йәшәй ҙә китә ул Хасбулат апам...

## II

Хасбулат олатай, үҙ һүҙе менән әйткәндә, әллә ҡасан етмеште аша атлап уҙған кеше. Ләкин күҙенең, һүҙенең ирәбелегенә, ҡаҡса, еңел кәүҙәһенә, йәштәрсә баҙыҡ, тигеҙ тештәренә ҡараһаң, уға хатта алты тиҫтәне биреүе лә ҡыйын. Етмәһә, ҡартың һөлөк кеүек мыйыҡтарын йәштәрсә мөгөҙләндереп, бороп та ебәргән. Тик тауышта ғына ҡартлыҡ бер аҙ һиҙелә. Тауыш бала әтәс тауышына оҡшап, сыйылдап, хәлһеҙләнеберәк ҡалған һымаҡ.

— Бына!— ти Хасбулат олатай, өлкән ағас һандыҡҡа дөпөлдәтә һуғып.— Ете быуындан алып ҡулдан-ҡулға күсеп килгән һандыҡ был. Ата-бабанан ҡалған ҡомартҡы...

Мин мөйөш-һәйештәрен сыҫҡан кимереп, таҡталарын ҡорт йырып бөткән, тутыҡҡан ҡалай ҡоршаулы ҙур ағас һандыҡҡа ҡыҙыҡһынып ҡарайым. Хасбулат олатай һандыҡтың бик күптән бикле тороп тутыҡҡан йоҙағына кәрәсин тамыҙа-тамыҙа көскә асты ла, уның эсенән ҡәҙерле ҡомартҡыларҙы берәм-берәм алып, минең алға теҙә башланы.

Иң элек өҫтәлгә йылдар уҙыу менән һарғайып, йылтырап, һөйәк төҫөнә ингән, әллә ниндәй фантастик һөйрәлгес йәнлектең башына оҡшатып эшләнгән ағас ижау сығып ятты. Уның артынса мөгөҙ борғо күренде.

— Салауат батыр, үҙенең ғәскәрҙәрен һуғышҡа саҡырған саҡта, ошо борғоно ҡысҡырттыра торған булған,— тип аңлата Хасбулат олатай.— Беҙҙең тоҡомдоң иң оло аҡһаҡалы Самат Салауаттың борғо ҡысҡыртыусыһы булған. Шул Саматтан ҡалған ҡомартҡы була был...

Хасбулат олатай, үҙенең аңлатмаһына ышаныу-ышанмауымды төшөнөргә теләп булһа кәрәк, миңә бик иғтибарлы ҡарап тора бирҙе лә тағы һандығына эйелде. Быныһында ул һандыҡтан көмөш өҙәңгеле, көмөш ҡашлы ҙур эйәр тартып алды. Эйәр артынса, шундай уҡ көмөшләп, ысын аҡыҡтар менән биҙәп эшләнгән ҡайыш югән, ҡойошҡан, ҡомолдороҡ, унан ҡынына арыҫлан һәм күгәрсен башы төшөрөлгән ауыр яҫы ҡылыс өҫтәлгә сығып ятты.

Хасбулат олатай тантаналы тауыш менән:

— Был ҡылыстың ҡынына ниңә арыҫлан менән күк күгәрсен төшөрөлгән, ә? — тип ирәбе күҙҙәрен миңә төбәне. Үҙе, минең яуабымды ла көтмәй:

— Беләһең килһә, ошо ҡылыстың эйәһе — арыҫлан кеүек батыр йөрәкле, күк күгәрсен шикелле саф, изге күңелле кеше тигән һүҙ был,— тип һөйләп алып китте. — Ә эйәһе кем булған, тиһеңме? Ҡаһым түрә. Ҡылыс та, эйәр менән юғән дә Ҡаһым түрәнеке. Ул бит беҙҙең ошо яҡтың батыры. Наполеонды туҡмап, Парижгә барып ингән саҡта, уның ҡулында ошо булат ҡылыс булған. Ә ул булат ҡылысты Урал ҡоросонан үҙебеҙҙең эшсе егеттәр эшләгән. Аңланыңмы инде?

Мин халыҡтың, бигерәк тә Хасбулат олатай кеүек ҡарттарҙың, һәр бер батырҙы үҙ тоҡомо, һис юғында үҙ яҡташы итеп иҫәпләү ғәҙәтен яҡшы беләм. Хатта тап ошондай уҡ юғән, ҡылыстарҙың Ҡаһым түрә йәки Салауат батыр кеүек легендар шәхестәрҙән ҡалған ҡомартҡы булып башҡа районлардағы ҡарттарҙа ла һаҡланыуын күргәнем бар. Ғөмүмән, халыҡтың ямандьц ялғанды, ҡурҡаҡты түгел, ә яҡшыны, хаҡлыҡты һәм батырлыҡты данлау ғәҙәтенә мин тәрән хөрмәт менән ҡарайым. Шуға, ахыры, Хасбулат олатайҙың аңлатмаларын да ихлас күңел менән тынлап ултырам. Ҡарт, уның һайын ихласланып, һандығына эйелә. Бына ул иплэп кенә кескәйерәк бер төргәк күтәреп алды. Төргәктән ялбыр папаха алып, башына кейеп үк ҡуйҙы. Папаханың маңлайында замандар уҙыу менән тутыға төшкән ҡыҙыл йондоҙ йымылдап тора ине.

— Йә, нисек? — ти Хасбулат олатай, мут йылмайып.

— Шәп. Бик шәп! — тим мин.

— Быныһы инде апаңдың ҡыҙылгвардеец сағынан ҡалған ҡомартҡыһы, — ти ул, тамаҡ ҡыра бирәп. Уның ҡыҫығыраҡ ирәбе күҙҙәрендә йәшенә хас булмаған сая ут балҡып китте. Һәм ул, ярһып: — Һай-й!.. — тип ҡуйҙы. — Бар ине бит йәш саҡтар!.. Шәп саҡтар!.. Ышанмаһаң, бына, ҡара. Бындайҙы шәп булмаған егеттәр ала аламы ни?! — Хасбулат

олатай баяғы түргәктән йомшаҡ сепрәккә төрөп һалынған Георгий кресы менән Ҡыҙыл Байраҡ ордене алып, өҫтәлдең тап уртаһына һалып ҡуйҙы.— Күрәһеңме, Хасбулат апаң һалдат булып та һынатмаған. Совет өсөн һуғышта ла арттан ҡарап тормаған!

Хасбулат олатай, бер аҙ тынып, һөлөк һымаҡ мыйыҡтарын борғолап, миңә тағы оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Унан, ҡапыл боролоп, елтелдәтә баҫып, ҡаршы стена яғына китте. Ә ул стенала быялалы рамда бик иҫке фотолар эленеп тора ине.

— Бына, ҡара, — тине ул, арыҡ, тарамыш бармаҡтары менән бер төркөм һалдаттар төшкән фотоға төртөп.— Был Петроградты Юденичтән таҙартҡас алдырған һүрәт.

Мин дә, урынымдан тороп, фото алдына барып баҫам. Данлы көрәш йылдарының онотолмаҫ сәхифәләрен ниндәйҙер моңһоу тулҡынланыу менән ҡарарға керешәм. Бер ситтәрәк, бөйөргә таяна биреп, күкрәкте киреп торған, осҡор күҙле, йәш, матур һалдатың элек минең иғтибарымды үҙенә тарта. Уның башында тап бынауы, Хасбулат олатайҙың башындағы кеүек, йондоҙло, ялбыр папаха. Папаха ҙур. Бит тар, ҡаҡса ғына. Атаһының бүреген кейгән шаян малай кеүек күренә был һалдат миңә. Улай тиһәң, уның күкрәгендә шинель өҫтөнә үк беркетелгән орден балҡый. Ҡыҙыл Байраҡ ордене!

— Был, олатай, һин! — тим мин, шатланып. Күңелемде ғорур ҡыуаныс солғап ала. — Әйе, һин бит был, Хасбулат олатай!

— Мин булмайса...— тип тыйнаҡ ҡына йылмайып тора Хасбулат олатай. Унан айырата бер йәнлелек менән икенсе бер фотоға төртә:

— Ә был бер үҙе генә баҫып төшкән кем? Бәлки, таныйһың?!

— Танымайса, — тип уныңсалап яуап ҡайтарам мин. — Шәһит Хоҙайбирҙин дәбаһа!

— Тап үҙе. Ул да беҙҙең яҡ батыры, — ти Хасбулат олатай ғорур тауыш менән. — Беҙҙең, аңһыҙ башҡорт һалдаттарының, тәүләп күҙен асыусы шул инде. Һай-й, ир ине мәрхүмең, ир ине. Әгәр һин уның

Кронштадт өсөн булған һуғыштарҙағы батырлыҡтарын күрһәң ине!..

Хасбулат олатай, күрәһең, алыҫ үткәндәрҙе күҙ алдынан үткәреп, оҙаҡ ҡына тынып торҙо. Унан:

— Йә, әйҙә, дауам иттек, — тип бошонҡо ғына төҫ менән һандыҡ янына килде. Данлы йылдар иҫтәлегенән һуң башҡа комартҡылар ҡыҙыҡһыҙыраҡ, төҫһөҙөрәк булып ҡалдымы, ул башҡорттарҙың борон, йәйләүҙә йәшәгәндә, ҡымыҙ ҡойоп, эйәргә элеп йөрөтә торған тире һауыттарынан ботса, ҡулса, турһыҡ кеүек нәмәләрҙе һүҙһеҙ-нинеҙ генә өҫтәлгә алып һалды.

«Ошолар ғынамы икән ни ҡыҙыҡлы ҡомартҡылар?!» тип, мин дә күңелһеҙләнә биреп ҡуйҙым, сөнки мин ни өсөндөр Хасбулат олатайҙан нимдәйҙер айырыуса ҡыҙыҡлы ҡомартҡы табырға йыйынғайным.

Бәхеткә ҡаршы, оҙаҡламай Хасбулат олатайҙың йөҙө тағы ла асылып, күҙҙәре ирәбеләнеп китте. Ул миңә, тап бая һалдат папахаһын алып кейгәндәге кеүек, тантаналы, теремек ҡараш ташлап алды. Унан ашыҡмай ғына һандыҡтың иң төбөнән иҫке ҡыҙыл бәрхәткә төрөлгән бер нәмә күтәреп сығарҙы. Айырыуса ҙур ғорурлыҡ менән, тамаҡты ҡыра биреп:

— Быныһы инде алыҫ илдән, бик борон замандан килгән ҡомартҡы, — тип ҡуйҙы, — бик ҡәҙерле ҡомартҡы. Уның үҙенә күрә бик хикмәтле тарихе лә бар...

Мин, түҙемһеҙләнеп, Хасбулат олатайҙың ҡулындағы төргәккә тын да алмай текләп ҡалдым. Ә ул ҡарышҡан шикелле төргәкте бик һаҡ, үтә яй аҡтара. Ахыры, минең түҙемде һынамаҡ була. Мин өндәшмәйем. Көтәм. Бына бер саҡ олатай төргәк эсенән аҡҡош муйынлы, ғәжәп матур бер көршәк сығарып ала ла тантаналы рәүештә миңә һона:

— Мә, ҡара. Тау ҡыҙҙарының һыу ташый торған көршәге, — тип ябай ғына итеп аңлатма бирә. — Яҡшылап күр, теләгәнсә һоҡлан. Тик күҙ генә тейгеҙмә, — тип кеткелдәп көлөп ҡуя. — Күрәһең бит, күҙҙең яуын алып тора. Ундай матур нәмәгә күҙ тейеп ҡуйыуы ла бер ҙә ғәжәп түгел.

Яңы ғына тумалған томбойокто хәтерләткән был ғәжәп көршәкте мин бик оҙаҡ әйләндереп-әйләндереп ҡарап ултырам. Уның нәфислеген, матурлығын, сәскә һәм семәрҙәренең гүзәллеген маҡтау түгел, ябай ғына итеп аңлатып бирергә лә һүҙ таба алмаҫымды тойоп, бөтөнләй юғалып ҡалам. Сөнки ғәҙәти көршәк түгел, ә бөйөк сәнғәт өлгөһө, кеше аҡылы тыуҙырған ҡабатланмаҫ ижад емеше ине минең ҡулымда!

«Ҡайҙан килгән был?! Кем яһаған? — тип аптырайым мин. — Бындай матур көршәкте мин бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла күргәнем юҡ табаһа!..»

Хасбулат олатай, бик ябай ғына итеп:

— Уның хикмәтле тарихен мин һиңә кис һөйләрмен. Һин минең яныма умарталыҡҡа барырһың. Тегендә, урманда, боронғо йәйләү урынында, хәҙер беҙҙең колхоздың бик шәп умарталығы бар. Беҙҙең бал Башҡортостанда ғына түгел, бөтә Союзда маҡтала бит. Быны беләһеңдер?.. Ана шул данлы умарталыҡта ҡарауылсымын мин, — тип һөйләй. — Көршәкте һин хәҙер яҡшылап ҡара, күр. Әйтәм бит, теләгәнсә һоҡлан. Шунан мин уны, тағы ошо йомшаҡ юрғанына урап, һандыҡ төбөнә һалып ҡуйырмын, — ти. — Йә, нисек? Һоҡланмаҫлыҡ түгел бит, ә? — тип һорай. — Күҙҙең яуын алып тора бит, ә? Вәт, ҡандай оҫталар булған борон заманда ла!.. Эй-й, аптырар сағың алда әле... Әйе, аптырарһың да, көйөнөрһөң дә, ҡыуанырһың да... ысын әйтәм...

Хасбулат олатай баяғыса бик йәтешләп, ашыҡмай, ҡабаланмай ҡомартҡыларын һандыҡҡа кире һала башланы. Ә мин һаман теге көршәктән һоҡланыулы күҙҙәремде ала алмайым.

...Бына, юғарыға табан оҙонсаланып, аҡҡош муйынына барып тоташҡан йомороораҡ ҡорһағына ҡойроҡто уралта терәп, туҙбаш йылан көршәктән һыу эсергә ынтылған. Уның йыланса нәфис, бормас тәне лә, айырса теле лә ҡыбырҙап, йымылдап тора һымаҡ... Был — көршәктең тотҡаһы. Тау ҡыҙҙары көршәкте ошо туҙбаш йыландан тотоп, яурындарына күтәреп ултыртҡандар... Көршәктең эсе аҡһыл зәңгәргә буялған. Ә тышы иртәнге аҡ томан баҫҡан,

мен төрлө сәскәгә күмелгән яҙғы туғайҙы хәтерләтә. Аһ, ниндәй генә сәскә юҡ был туғайҙа!.. Иң ғәжәпбе — уларҙың береһе лә төшөрөлгән түгел, ә үҙ стихияларында наҙланып ултырған тере сәскәләр!.. Бына әле генә йәшенле ямғыр уҙған. Уның артынса ҡояш балҡып сыҡҡан. Сәскәләр шуға һөйөнөп көлөп ебәргән!.. Мөғжизәле сәскәләр!..

Ә бына бында, теге туҙбаш йылан үрелеп сыҡҡан ерҙә, тау ландышы яңы ғына сәскә атҡан. Ынйы кеүек нәфис, кескәй ҡыңғырау сәскәләр. Улар шул хәтле тереләр, хатта уларҙың хуш еҫтәре танауға бәрелеп торған һымаҡ...

Туҡта... Тау ландышының йәм-йәшел ҡыяҡтарының береһендә ниндәйҙер яҙыу ҙа бар түгелме һуң?! Эйе, яҙыу. Һәр бер хәрефе ҡан ҡыҙыл кизе менән сигелгән кеүек ниндәйҙер бер һүҙ!..

«Һөнәрсе», — тип уҡыйым мин. — Һөнәрсе?! Хасбулат олатай, был ни ғәләмәт?! Ысын булһа, бында «һөнәрсе» тип яҙылған?.. Кем яҙған уны? Кемдең ҡултамғаһы был, олатай? — тип ҡысҡырып уҡ ебәрәм мин. Серле көршәк минең тауышымды яңғыратып ҡабатлай.

— ...ол-а-тай!..

— Көршәктең ауыҙ тәңгәлендә һөйләнең. Ишеттеңме, ҡалай мәҙәк яңғырап тора. Һинең тауышыңды йырға әйләндереп, уйнап ебәрәме ни?.. Сафлығын әйт әле һин ул яңғырауҙың!.. — ти Хасбулат олатай ҙа, тәү ишеткән кеүек һоҡланып. Күрәһең, ул минең тура һорауыма яуап бирергә ашыҡмай.

— Иҫ киткес саф яңғырау... — тип ҡабатлай. Унан баяғыса ғәйәт ҙур һаҡлыҡ менән көршәкте минең ҡулымдан ала бирел ҡарап тора ла тағы миңә тоттора.

— Еңеллеген, нәфислеген ҡара һин уның! Кем уны ҡомдан, балсыҡтан эшләнгән көршәк тип әйтә алыр, ә? — тип аптырап, тел тасылдатып ҡуя.

Мин көршәкте тағы әйләндереп-тулғандырып, һәлмәкләп ҡарайым. Уның матурлығы, нәфислеге, иҫ киткес еңел һәм нескәлеге генә түгел, һөйләшкән тауышты ниндәйҙер ғәжәп яғымлы, серле яңғырауға әйләндереп ҡабатлап тороуы ла мине таң ҡалдыра. Мин, үтә ҡыҙыҡһынып, тағы:

— Хасбулат олатай! — тип ҡысҡырам. — Был ни ғәләмәт?.. Ниндәй мөғжизә был, олатай?.. Йә, һөйләй һал инде!..

Хасбулат олатай, көршәкте минең ҡулдан алып, ҙур һаҡлыҡ менән ҡайтанан юрғанына төрә. Әйелеп, һандыҡтың иң төбөнә һала. Унан, минең яҡҡа мут ҡараш ташлап, һөлөк мыйығының ҡойроғон тағы баяғыса борғолап ала.

— Хикәйәтте беҙҙә кис, ай яҡтыһында, эшһеҙ саҡта ғына һөйләйҙәр... — ти.

Миңә йәйге оҙон көндөң айлы кисен көтөүҙән башҡа сара ҡалмай.

## III

Хасбулат олатай, хикмәтле хикәйәтен һөйләп бөткәс, оҙаҡ ҡына тынып ултырҙы. Тик уның аҡыллы, һынаусан күҙҙәре генә, яҡшылыҡ менән яманлыҡ араһында барған оло тартыш хаҡындағы тәрән мәғәнәле тарихтең ниндәй тәьҫир ҡалдырыуын белергә ашҡынған һымаҡ, миңә табан хәрәкәтһеҙ төбәлгәйнеләр. Мин дә, күрәһең, шул хикәйәт тәьҫиренән сыға алмай, телһеҙ ултырам. Ахыр ул түҙмәне, ниңәлер ауыр ғына көрһөнөп:

— Бына, «Һөнәрсе һәм Өйрәнсек» хаҡындағы хикәйәт ошо була инде, ҡустым, — тип ҡуйҙы.

— Эй-йе... — тип кенә әйтә алдым мин дә. Хасбулат олатай бүтән бер һүҙ ҙә өҫтәмәне. Төтөнлөк янына түшәп ултырған ҡара кейеҙ өҫтөнә салҡан төшөп ятты ла күҙҙәрен йомдо. Хатта шунда уҡ йоҡлап та китте һымаҡ. Хәйер, кем белә, мут ҡарт бит. «Әйҙә, уйланһын. Хикәйәттең серле кинәйәһенә төшөнһөн әле был!..» — тип йоҡлағанға һалышып та яталыр әле ул. Ысынлап та, уйланмаҫлыҡ та түгел бит. Ҡисе лә, хикәйәте лә һине ирекһеҙҙән тәрән уйланырға, йәшәүҙең матурлығы, кеше рухының гүзәллеге, яманлыҡ, яҡшылыҡ кеүек мәңгелек төшөнсәләр хаҡында ҡайта-ҡайта уйларға мәжбүр итә. Шул уйҙар тәьҫиренән күкрәк, берсә ҡыуаныс, берсә ғорурлыҡ менән тулышып, ҡанатланып күккә оса; берсә күҙҙәргә ысыҡ тамсыһындай саф, яҡты йәштәр эркелә, берсә күңелде әсе һағыш, моң солғап ала... Ә тирә-яҡта

урманлы бейек тауҙар, тып-тын ҡалып, аптырағандай һинә теклəп торалар. Умарталыҡтан алыҫ түгел, бөҙрə тирəктəр араһында, бəрҙе, бағры балыҡтарының төйəге — ташҡын йылға бер өҙлөкһөҙ үҙенең мəңгелек йырын йырлай:

— Шылтыр-шылтыр... сылт-сылт-сылтыр! Йəштер... шат-тыр... саф-тыр-р-р!..

Бына үҙəн буйына əкрен генə күк томан һарыла. Офоҡта наҙланып, иркəлəнеп кенə ал таң ҡағына. Елбəҙəк ел, сəскəлəрҙе һөйə-үбə, иркəлəй-тирбəтə уятып, тыуасаҡ таң юлына хушбуй бөркөп сыға. Һандуғастар был яҡҡа ғына хас ярһыу дəрт менəн урманды наҙлы йырға күмə. Ошо илаһи моң эсендə тирбəлгəн күкһел урман өҫтөндə ара-тирə кəкүк, тартай, бүҙəнə тағы əллə ниндəй билдəһеҙ ҡоштар тауышы яңғырап китə. Алыҫ төпкөлдə ҡайсаҡ шатыр-шотор ағастар һынғаны ла ишетелə. Күрəһең, урман хужаһы — һоро айыу ҙа ошо илаһи матурлыҡ эсендə үҙенең дə йəшəүен, уны ла оноторға ярамауын донъяға белдерергə ашыға...

Быйыл йəй ямғырлы, үлəн үтə һутлы булыу арҡаһында, шашып үрсегəн серəкəйҙəн ҡотолоу өсөн, бында берҙəн-бер сара булған төтөнлөккə утындар өҫтəй-өҫтəй, мин һаман уйланып ултырам. Хасбулат олатайҙың хикəйəтен баштан-аяҡ бер нисə ҡат уйлап сығам. Уны тап ул һөйлəгəнсə итеп хəтерҙə ҡалдырырға тырышам. Əлбиттə, минең өсөн был ауыр эш. Бəлки, нисек кенə тырышһам да, хикəйəтте мин уныңса оҫта, халыҡсан итеп һөйлəй алмам. Шулай ҙа мин, һыҙылып килгəн йəйге таң нурҙарының сихри бейеүенə ҡарай-ҡарай, хикəйəтте тағы бер ҡат уйымдан үҙғарам.

— Герман һуғышы ваҡытында, йəғни мəҫəлəн, беренсе донъя һуғышы мəлендə, фронтта осраштыҡ беҙ уның менəн, — тип башлап китте Хасбулат олатай үҙенең хикмəтле хикəйəтен. — Был əҙəм Кавказдан, тау халыҡтарынан берəү ине. Ҡаҡса кəүҙəле, ҡылыс танаулы, ҡарсыға күҙле, һылыу бер егет. Сəстəре муйыл кеүек сөм-ҡара, бөҙрə, мыйыҡтар күркə ҡойроғо һымаҡ ҡабарып тора. Əйтеп тораһы ла юҡ. Ҡыҙҙарҙан һөйөлөп туймаҫ сағы. Əммə ни эшлəмəк

кәрәк? Һуғыш. Дүрт йыл буйы минең менән бер рәттән окопта серене, бахыр...

Исеме Аҡбулат ине уның. Мин — Хасбулат. Беҙҙең танышлыҡ та башта ошо исемдәр оҡшашлығынан башланып китте шикелле. Аҙаҡ, үҙең беләһең инде, фронтта кеше кем менән генә осрашмай ҙа, кем менән дуҫлашмай?! Бик дуҫ булдыҡ беҙ Аҡбулат менән. Батыр, ҡыйыу һалдат, харап һәйбәт, ирмәк кеше ине, бахыр. Үҙе бер ҡасан да бошонмаҫ, мәҙәк һүҙҙәр һөйләп дуҫтар күңелен дә күтәрер ине. Бәлки, шуғалыр ҙа беҙ уның менән айырата яҡын дуҫ булдыҡ. Хатта ул бер саҡ, граждандар һуғышы туҡталғас, мине эҙләп, Ҡавказ хәтле ерҙән был яҡҡа килеп тә сыҡты. Шунда ул иҫтәлек өсөн миңә ошо көршәкте лә алып килгәйне...

Башта миңә бындай бүләк ҡыҙыҡ ҡына тойолдо. «Ир кешегә эйәрле ат бүләк иткәнде күреп үҫкәнмен. Беләм. Аңлайым. Әммә көршәк бүләк иткәнде?! Валлаһи тип әйтәм, ишеткәнем дә юҡ. Ни хәтле генә матур эшләнгән булмаһын, исеме барыбер көршәк бит инде уның!» Аҙаҡ көршәктең хикмәтле тарихен белеп алғанға хәтле, мин шулай уйланым.

— Беҙҙә ҡыҙҙар һыуҙы көршәк менән ташымай, — тинем мин уға, дуҫтарса ғәжәпләнеүемде белдереп. — Көйәнтәләп, күнәкләп алып килә...

— Был ҡиммәтле ҡомартҡы. Мин һиңә, йән дуҫыма, үҙ еремдән бүләк итеп алып килер өсөн ошонан да ҡәҙерлерәк нәмә тапманым, — тине Аҡбулат һәм миңә «Һөнәрсе һәм Өйрәнсек» тигән хикәйәтте һөйләп бирҙе.

Бөгөн ул хикәйәтте мин һиңә һөйләйем. Әгәр иғтибарға лайыҡ тапһаң, бәлки, бер саҡ уны һин дә берәйһенә һөйләрһең... Бына шулай йәшәй бит инде ул арыу хикәйәттәр... Үҙҙәрен тыуҙырған кеше ғүмеренән оҙонораҡ та, бәхетлерәк тә була уларҙың ғүмерҙәре...

Әйткәндәй, Аҡбулат шул килеүендә мине лә үҙе менән алып китергә, Ҡавказды күрһәтергә бик тә теләгәйне. Әммә насип булманы. Фронттан ҡайтыу менән, мине сельсовет председателе итеп һайлап ҡуйғайнылар. Ауылда тәүбашлап иҫкене емерәһе, яңы-

ның игеҙен һалаһы бар. «Ҡунаҡлашып йөрөр саҡмы ни», — тип уйлайһың. Шулай, эште ташлап китә алманым. Аҙаҡ, донъялар бер аҙ юлға һалынғас, барып, дуҫты күреп ҡайтырмын тигәйнем дә, Аҡбулаттан хат өҙөлдө. Бер аҙҙан мин уның һәләк булыуын ишеттем. Ул миңә ҡарағанда уҡымышлы ла, аңлы ла кеше ине. Фронттан ҡайтҡас, ул Ҡавказда яңы тормош ҡороу эшендә бик актив эшләгән. Алдынғы коммунист булған. Аҙаҡ уҡыған. Мәскәүҙә ниндәйҙер академияны уҡып тамамлап ҡына килгәндә, анауы утыҙ етенсе йылғы афәткә эләгеп киткән...

Хасбулат олатай һүҙенең ошо урынында оҙаҡ ҡына туҡтап, урман өҫтөнән ҡып-ҡыҙыл, йоморо ут булып ҡалҡып килгән тулы айға ҡарап, уйланып ултырҙы. Унан ҡапыл, йоҡонан уянып киткән һымаҡ булып, ирәбе тауыш менән:

— Бына, ай ҙа ҡалҡты. Хикәйәтте һөйләр саҡ етте, — тип моңһоу ғына йылмайып ҡуйҙы. Мин, тыңларға ашҡынып:

— Ваҡыт. Күптән ваҡыт, олатай! — тип ҡабатланым.

Хасбулат олатай, төтөнлөккә сыбыҡ-сабыҡ ырғыта-ырғыта, һалмаҡ, уйсан ғына тауыш менән һөйләп китте.

## IV

... — Борон заманда, Ҡавказда, ҡаялы тау өҫтөндәге киң яйлала, кескәй генә бер ауыл булған. Ауылдың янында ғына күк йөҙө шикелле икһеҙ-сикһеҙ, осһоҙ-ҡырыйһыҙ киң зәңгәр күл ялтырап ятҡан. Ҡая өҫтөндәге иҫ киткес гүзәл күл. Тик ул күлдән кешеләр бер тамсы ла һыу эсә алмаған. Үтә татырлы булған уның һыуы. Ауыл кешеләре һыуҙы аҫта, бик тәрәндә, ҡая таш итәгендәге йыраҡанан сығып ятҡан кескәй генә шишмәнән ташып эскән. Боҙҙан һалҡын, көмөштән саф был шишмәгә ҡая битләп һығыла-бөгөлә һуҡмаҡ һуҙылған. «Ҡыҙҙар һуҡмағы» тип йөрөткәндәр уны. Сөнки ҡыҙҙар ошо һуҡмаҡтан бер өҙлөкһөҙ шишмәгә йөрөп торған...



27423
БИБЛИОТЕКА
...ского ... фкома

Әйткәндәй, ул яҡта ҡыҙҙар һыуҙы тар үңәсле көршәк һауыттар менән ташый икән. Боҙ шикелле һалҡын, саф шишмә һыуы тултырылған көршәкте яурындарына ултырталар ҙа, һаҡ, һалмаҡ ҡына баҫып, нескә билле ҡымырҫҡалар шикелле, баяғы һуҡмаҡ менән юрмәләйҙәр ҙә юрмәләйҙәр, ти... Мәҙәк бит, ә?.. Беҙгә мәҙәк. Ә уларға түгел. Тау текә, юл ҡырын... Төрлө хәл була. Аяҡ саҡ ҡына яҙа баҫһа, көршәк ялп итеп ергә осоп төшә. Ватыла. Етмәһә, ябай балсыҡтан әрле-бирле һупалап яһалған был көршәктәрҙә һыу тиҙ ҙә боҙола, үҙенең шишмәләге сафлығын, татлылығын да юғалта икән...

Һыу ташый торған көршәктәрҙең тупаҫ һәм ауыр булыуы ла ҡыҙҙар өсөн бик үк уңайлы булмаған, әлбиттә. Ә бит кешегә күпме һыу кәрәк?! Быны үҙ елкәләрендә татығас, баяғы һыу ташыусы ҡыҙҙар яҡшы белгәндәр инде...

Көршәктәрҙең шундай килбәтһеҙ һәм бик тиҙ ватылыусан булыуы өсөн ауылда бары тик бер генә кеше көйөнмәгән. Киреһенсә, һөйөнгән генә. Сөнки көршәктәр ни хәтле тиҙерәк, йышыраҡ ватылһа, уға шул хәтле күберәк табыш килгән. Был кеше ошо ауылдың көршәк яһаусыһы Өйрәнсек булған. Ғүмер буйы шул эш менән көн күреп тә, бер ҡасан да ысын оҫта була алмаған өсөн, ауыл халҡы, көлөп, уға «Өйрәнсек» тип исем ҡушҡан.

Был ауылда Өйрәнсек менән йәнәш тағы бер оҫта йәшәгән. Уныһы ла шулай уҡ, балсыҡтан, ҡомдан әүәләп, сәй эсә торған касалар яһай икән. Ауылдаштары был оҫтаны бик яратҡан, хөрмәт иткән. Сөнки ул үҙенең эшенә бөтә йәнен, йөрәген һалып эшләй, ул яһаған касалар шундай нәфис, йоҡа һәм еңел булып сыға. Уның эсендә сәй айырыуса тәмле, татлы була икән. Шуға күрә халыҡ уны хөрмәтләп «Һөнәрсе» тигән ҡушамат биргән. Был яҡта, ул заманда, күрәһең, ошонан да ҙурыраҡ һөнәр булмағанға, «Һөнәрсе» һүҙе иң оло һәм хөрмәтле һүҙ булған.

Шулай итеп, был ике күрше бик оҙаҡ ғүмер иткән. Бара-тора, ауылдаштары ғына түгел, хатта улар үҙҙәре лә мулла ҡушҡан төп исемдәрен онотҡан.

«Өйрәнсек» һәм «Һөнәрсе» булып йәшәй биргән. Өйрәнсек һаман шул үҙенең тупаҫ һәм йәмһеҙ балсыҡ көршәктәрен эшләгән. Уларҙы матурлау хаҡында уйлап та ҡарамаған. Үҙ эшенән сикһеҙ риза һәм шат булып йәшәй биргән. Һөнәрсе, киреһенсә, бер ҡасан да тынғы белмәгән, эшенән бер ҡасан да ҡәнәғәт булмаған. Һәр ваҡыт эҙләнгән, өйрәнгән. Шуға, ахыры, ул үҙ һөнәрендә көндән-көн үҫкән, камилләшкән. Һәр бер каса уның өсөн яңы асыш, яңы уңыш булған.

Эштән ҡалған ваҡытында Һөнәрсе тауҙар, урмандар гиҙгән. Әйләнә-тирәне, ағас-ташты ентекләп өйрәнгән. Үҙен өҙлөкһөҙ борсоп торған һорауҙарға тәбиғәт ҡуйынынан яуаптар эҙләгән. Алыҫ ҡалаға барып, үҙенә хәтле йәшәгән бөйөк һөнәрселәрҙең эштәре менән дә танышып ҡайтҡан.

Һөнәрсене иң бошондорған нәмә — Өйрәнсектең теге тупаҫ балсыҡ көршәктәре булған.

«Ниңә үҙ һөнәрен камилләштермәй был Өйрәнсек? Әллә һәләте юҡмы? Улай икән, ниңә булаша? Ниңә ауылды тупаҫ, йәмһеҙ көршәктәр менән тултыра? Үҙ тамағың туҡ булһын өсөн генә, кешеләрҙең күңелен йәмһеҙлеккә, тупаҫлыҡҡа күнектерергә яраймы ни?!» — тип көйөнгән Һөнәрсе. Өйрәнсектең күңелендә лә ошондай көйөнөс уятырға тырышҡан: — Беҙҙең эш ауылдаштарҙы һөйөндөрөргә тейеш. Ә беҙ көйөндөрәбеҙ түгелме һуң?! Әйҙә, бергәләп эҙләнәйек, бәлки, бығаса бер кем дә эшләй белмәгән көршәктәр яһарбыҙ, — тигән.

Өйрәнсек көлгән генә.

— Һай, ахмаҡ! — тигән. — Һәр ватылған көршәк — яңы табыш бит ул!..

— Улай булһа, күрше, үпкәләштән булмаһын — мин дә көршәктәр эшләй башлаясаҡмын, — тигән бер саҡ Һөнәрсе. — Тик һинеңсә түгел, ә үҙемсә. Үҙ йөрәгем теләгәнсә итеп эшләрмен...

— Өйрәнсек тағы ла мыҫҡыллыраҡ итеп, ҡысҡырып көлгән.

— Рәхим ит, эшлә! Һай, ахмаҡ, көршәкте ни төҫлө генә итеп яһаһаң да, көршәк булыр инде ул!.. — тигән.

Һөнәрсе эҙләнеүен дауам иткән. Һаман шулай тауҙар, далалар гиҙгән. Ер ҡаҙыған, таш аҡтарған, текә ҡаялар аҫтына, мәмерйәләргә төшкән. Һәр осраған ташты, ҡомдо һынап ҡараған. Арып, йонсоп, ялангасланып бөткән. Әммә эҙләнеүҙән туҡталмаған. Ахыр сиктә теләгенә ирешкән. Тәбиғәт уға үҙенең йәшерен серҙәрен асҡан. Берҙән-бер көндө Һөнәрсе тап бая көндөҙ мин һиңә күрһәткән кеүек мөғжизәле көршәкте эшләү бәхетенә ирешкән. Ысынлап та, уға хәтле бындай көршәкте эшләй белгән дә, ундай мәңге уңмаҫ буяуҙарҙы ҡулланған да кеше булмаған. Күрҙең бит, ниндәй нәфис көршәк!.. Яңы ғына бөрөләнгән томбойоҡ сәскәһеме ни?! Ниндәй ҡомдан эшләнгәндер ҙә, ниндәй илаһи буяуҙар менән буялғандыр инде ул. Анауы теп-тере сәскәләрен, еңеллеген, нәфислеген мин әйтәм. Иҫ киткес оҫта булған инде ул Һөнәрсе!..

Аҡбулат мәрхүм миңә:

— Был көршәк яһаған ҡомдо ла, уның юйылмаҫ буяуҙарының серен дә ошоғаса белгән кеше юҡ әле, — тип һөйләгәйне. Эйе, ысын, шулай тине шул. Һай, әттәгенәһе, анауы Өйрәнсекте әйтәм әле, бигерәк тә моңһоҙ нәмә булған икән. Өйрәнеп ҡалырға теләмәгән бит, яуызын. Ә бит Һөнәрсе уға:

— Мин иҫән саҡта белеп ҡал,— тип күпме ялынған. — Ә ул — Өйрәнсек һаман тәкәбберләнеп көлгән генә.

— Юҡ өсөн баш ватып, ғүмер ҡыҫҡартырға мин алйотмо ни? — тигән. Улай ғына ла түгел, Һөнәрсене кешеләргә алйот, дәрүиш итеп күрһәтергә лә тырышҡан хатта.

— Ҡарағыҙ инде анауы алйотто! Һыу көршәге яһау өсөн шул тиклем күҙ нурын түгеп ултыра бит, дәрүиш! Һыуҙы ни уны матур һауытҡа һалдың ни ҙә насар һауытҡа һалдың ни. Һыуҙан барыбер алтын сыҡмаҫ, — тип үҙенсә фәлсәфә һатҡан.

Һөнәрсе уның, өйрәнергә теләмәүенән бигерәк, тупаҫ һәм насар эшенән үҙе шул тиклем ҡәнәғәт булып йәшәүе өсөн айырата әсенгән.

«Юҡ. Мин һине яҡшы менән яманды айырырға өйрәтермен. Ауылдаштарҙың йорттарын эшкинмәгән

көршәктәр менән сүпләүҙән туҡтатырмын!» — тип ҡә-һет иткән. Һәм шулай булып сыҡҡан да. Көршәктәр-ҙе көндән-көн һәйбәтерәк һәм нәфисерәк итеп эшләй башлаған. Көндө-төндө, алды-ялды белмәй эшләгән был көршәктәрен ауылдаштарына күп ваҡыт бушлата биреп ебәрә торған булған. Бара-тора Өйрәнсектең тупаҫ балсыҡ көршәктәренә көн бөткән. Инде уларҙы һатып алыусы түгел, буш алыусы ла булмаған. Бына шунда инде Өйрәнсек Һөнәрсе янына үҙе үк боролоп ингән. Түбәнселекле, мөләйем тауыш менән сәләм биргән. Түргә уҙған. Һөнәрсенең бөтә өйө тулып, йон-доҙ кеүек йымылдашып ултырған ғәжәп зифа, ысынъ-яһау көршәктәрҙең әле береһен, әле икенсеһен алып, баш сайҡап, тел тасылдатып торған.

— Өйрәнергә килдеңме? Минең менән бергәләп эшләргә булдыңмы? — тип ҡыуанған Һөнәрсе. — Әгәр теләгең ихлас булһа, әйҙә, ултыр. Хәҙер үк бө-тә серҙе асып һалам!..

Был тиклем саф күңеллелек һәм бер ҡатлылыҡҡа күңеле йомшарып киткән Өйрәнсек ең остары менән күҙҙәрен һөртөп алған. Ялыныслы һәм меҫкен ҡиә-фәт менән Һөнәрсегә тилмереп ҡараған. Ысынлап уҡ иламһыраған тауыш менән:

— Дуҫ!.. Ҡорҙаш!.. — тип өндәшкән. — Һинең ка-мил аҡылың, алтын ҡулдарың алдында мин баш эйәм. Теләһәң, һиңә алла итеп табынырға ла әҙер-мен. Тик һинең изге кәңәшеңде мин, нисек кенә те-ләһәм дә, ҡабул итә алмайым. Ни өсөн тиһәң, хоҙай мине ундай һәләттән мәхрүм иткән. Эйе, өйрәнә ал-майым мин бындай гүзәл һөнәргә!.. Инде миңә астан үлеүҙән башҡа сара ҡалманы... Сөнки хәҙер кешеләр минең көршәктәргә әйләнеп ҡарарға ла теләмәйҙәр...

Өйрәнсек шул һүҙҙәрҙе әйткән дә, Һөнәрсе янына келәмгә ултырып, бала шикелле үкһеп илай башла-ған:

— Эй аллам, ниңә һин мине ошондай илаһи та-ланттан мәхрүм иттең!

«Ысынлап та, уның хәле мөшкөл дәбаһа!? Уға нисек ярҙам итергә һуң?! Өйрәнсектең тамағы туҡ булһын өсөн генә теге тупаҫ балсыҡ көршәктәр ме-нән ауылды сүпләргә юл ҡуйып та булмай ҙаба-

һа?!» — тип аптыраған хәҙер Һөнәрсе. «Ә күршегә ярҙам итергә кәрәк бит. Тик ҡалай итеп?!»

Ахыр ул Өйрәнсеккә тағы өмөтлө ҡараш ташлаған:

. — Бәлки, өйрәнеп ҡарарһың? Айыу балаһы ла өйрәнә, һин кеше бит әле...

Өйрәнсек, бер ҡатлы Һөнәрсенең күңеле тамам йомшарып етеүенә, үҙен ихлас йәлләй башлауына тамам төшөнөп алғас, күптән уйлап килгән хәйләһен тормошҡа ашырырға керешкән.

— Һөнәрсе, ҡорҙаш!— тигән Өйрәнсек, тауышына тағы ла нығыраҡ меҫкенлек сығарып.— Әгәр һин мине, ысынлап та, йәлләһәң, хәлемә инергә теләһәң, әлбиттә, булдыра алаһың. Эйе, минән көсөмдән килмәгән эште талап итмәйенсә үк, мине аслыҡтан ҡотҡара алаһың...

— Нисек?! Йә әйтә һал!.. Ҡалай итеп мин һиңә ярҙам итә алам?! — тип аптырап та, ҡыуанып та киткән Һөнәрсе. — Әгәр ундай эш ҡулымдан килһә, һинең өсөн йәнем фиҙа!..

— Бар. Ундай мөмкинлегең бар, ҡорҙаш!— тигән Өйрәнсек, инде тамам баҙнатланып,— әйтәйек, бына был мөғжизәле көршәктәрҙе һин эшләй беләһең. Ә эшеңдең емешен ашай белмәйһең... Йә, үҙ эшенең баһаһын белгән ниндәй кеше ошо хәтле ауыр хеҙмәт емешен кешеләргә буш бирер? Йә, ҡара инде, хәҙер ауылдың аяҡтан баҫҡан бөтә ҡыҙы һинең ошо гүзәл көршәктәреңде күтәреп шишмәгә йөрөй. Ә һин, шул мөғжизәле көршәктәрҙе тыуҙырыусы кеше, ас-яланғас, көн-төн күҙ бөтөрөп, үҙеңдең ҡараңғы өйөңдә төңкәйеп ултыраһың... һинең урыныңда башҡа берәү был һөнәр менән әллә ҡасан байып бөтөр, хатта батша һарайында йәшәп ятыр ине. Бындай көршәктәр хатта батша кәнизәктәрендә лә юҡ бит! Беләһеңме?! Ә һин шуларҙы былай, бушлай...

Һөнәрсенең әле генә өмөтләнеп, яҡтырып киткән йөҙөнә ҡайтанан һөрөм югерә.

— Нимә һөйләйһең? Нимәгә өйрәтмәксе булаһың һин мине? — тип ҡысҡырып бүлдерә ул Өйрәнсекте. — Халыҡтың ҡыуанысы, рәхмәте минең хеҙмәтемдең иң оло баһаһы икәнен аңламайһыңмы ни һин?!

Минең өсөн ауылдаштарымдың кинәнеүенән дә ҙур баһа юҡ.

— Рәхмәт менән тамаҡ туямы? — тип һорай Өйрәнсек, инде ғәҙәтенсә мыҫҡыллы көлөп. — Өҫ бөтәйәме?!

— Тамаҡ нимә ул? — тип күңелһеҙ генә ҡарыулаша тамам кәйефе боҙолған Һөнәрсе. — Тамаҡ ни ул үҙем менән бергә китер, бөтөр. Ә көршәктәр һаман йәшәп ҡалыр. Һаман хеҙмәт итер...

— Һай, сабый!.. — тип хатта ҡысҡырып уҡ көлә хәҙер Өйрәнсек. — Күрше, ҡорҙаш!.. — тип Һөнәрсенең арҡаһынан дуҫтарса ҡаҡҡылап ала. — Валлаһи тип әйтәм, һин төптө сабый икәнһең!.. Улай ғына ла түгел, дәрүиш!.. Диуана!..

— Шулай ҙа булһын, — ти Һөнәрсе, тамам күңелһеҙләнеп. — Миңә үҙемдең холҡом оҡшай. Ә башҡаларҙа минең эшем юҡ.

Һөнәрсе, шуның менән һүҙ бөткәнлекте аңлатып, иҙәнгә ҡуйған көршәкте ҡулына ала, тау ландышының ҡыяҡтары өсөн буяу һайларға керешә. Ләкин Өйрәнсек тә тиҙ генә бирешергә теләмәй. Мәкерле хәйләһен тормошҡа ашырыу өсөн тағы меҫкен тауышҡа күсә. Ялынып, Һөнәрсенең алдына теҙләнә.

— Һин бит үҙең, ҡорҙаш, миңә ярҙам итергә теләйем тинең! Ысын күңелдән әйткәнһеңдер бит инде һин был һүҙҙе?! — тип ныҡыша.

— Мин ысын күңелдән булмағанды һөйләй белмәйем,— ти Һөнәрсе.

— Улай булһа, бына нимә, — тип елкенеп китә тағы Өйрәнсек. — Һин мине үҙеңә ярҙамсы итеп алаһың. Йәғни һин ғәҙәттәгесә көршәктәр эшләйһең. Ә мин уларҙы аҙыҡҡа, кейемгә әйләндерәм. Һине аслыҡтан, яланғаслыҡтан ҡотҡарам. Шунан ҡалғанбоҫҡанынан үҙемә лә аҙ-маҙ өлөш сығарырмын. Ә бүтәнсә һин миңә бер төрлө лә ярҙам итә алмайһың, ҡорҙаш, — ти. — Дөрөҫөн әйткәндә, был уй минең башта, үҙ турамда ҡайғыртыуҙан бигерәк, һинең хаҡта уйлау арҡаһында килеп тыуҙы, — тип тә өҫтәй.

Сикһеҙ ныҡ ғәжәпләнеүҙән Һөнәрсенең ҡулындағы көршәге төшөп китә яҙа. Ул, ғүмерендә тәү күргән кеүек итеп, аптырап, Өйрәнсеккә ҡарай.

«Күрәһең, уның хәле, ысынлап та, бик мөшкөлдөр?! Юкһа, үҙ теләге менән бындай эшкә барыр инеме ни ул?! — тип уйлай. — Тимәк, уға ошондай түбәнлеккә барыуҙан башка сара калмаған!» — тип Өйрәнсекте ысын күңелдән йәлләп куя. Сөнки уның үҙе өсөн ауыр хеҙмәт емешен кешеләргә бүләк итеүҙән дә ләззәтле, һатып биреүҙән дә ғазаплы эш булмай.

— Өйрәнсек, һин дөрөҫ әйтәһең. Минең һиңә башкаса ярҙам итергә һис бер мөмкинлегем юк. Ләкин был эш һиңә ауыр булмаҫмы һуң? — тип уңайһыҙланып һорай ул Өйрәнсектән.

— Ауыр булһа — нисек итәһең?— тип меҫкенләнә Өйрәнсек.— «Якшылыкты эшлә лә диңгеҙгә ырғыт. Халык белер. Халык белмәһә — балык белер», тип юкка ғына әйтеп калдырмағандыр бит боронғолар, — тип, ғәҙәтенсә, һүҙенә оҫталык, үҙенә олпатлык бирергә тырышып, халык мәкәленә тотоноп ала. — Күршең ошо хәтле хикмәтле эш эшләй белһен, көнөн-төнөн бил бөксәйтеп эшләп ултырһын. Үҙе ас-яланғас тигәндәй йәшәһен. Ә һин, йәнең-тәнең иҫән-һау көйө, шуны тыныс кына карап ят. Уға кулындан килгән якшылыкты эшләмә?.. Йә, шул буламы күршелек?! — тип һүҙҙе бөтөнләй икенсе якка бороп алып китә. — Һиңә, хөрмәтле күршемә, кулымдан килгән якшылыкты эшләгем бик килә минең!..— ти.

Инде Һөнәрсе, Өйрәнсектең был тиклем якшылығына хайран калып, ғәйәт ҙур түбәнселек менән тыңлап ултыра.

«Бына бит, донъяла ниндәй изге күңелле кешеләр була!.. Ә һин улар менән йәнәшәлә йәшәйһең, хатта уларҙың шундай икәнен белмәй ҙә үлеп китәһең... Һай, был иғтибарһыҙлык!..» — тип, эстән генә аптыранып, әсенеп тә ала.

## V

Ошо һөйләшеүҙән һуң күп тә үтмәй, Өйрәнсек, Һөнәрсенең ер иҙәнле, ярым караңғы өйөндә көҙгө йондоҙҙар шикелле сағыу балкып ултырған был мөғжизәле көршәктәрҙең барыһын йыйып алып, ауылдан

сығып уҡ китә. Ә һөнәрсе, ғәҙәтенсә, алды-ялды белмәй, эшләүен дауам итә. Шулай күпмелер ваҡыт үткәс, һөнәрсе тағы байтаҡ көршәктәр яһағас, бик ныҡ байып, алтын-ебәккә мансылып, Өйрәнсек ҡайтып төшә. һөнәрсегә ебәк сапан, аҡ сәллә, ситеккәүеш кейҙерә. Он, сәй, шәкәр кеүек нәмәнән дә өлөш сығара.

— Бына, хеҙмәтеңә күрә хөрмәте. Әйҙә, быға са төшөңә лә инмәгән һыйҙы Өйрәнсек дуҫыңдан күреп йәшә, — ти.

Был хәтле йомартлыҡҡа, хәстәрлелеккә һөнәрсенең күңелендә тыуған рәхмәттең иге-сиге булмай.

— Ысын дуҫ икәнһең һин, Өйрәнсек! — ти һөнәрсе. — һинең был тиклем яҡшылығыңды ни менән генә ҡайтара алырмын икән һуң мин? — тип аптырай. Тик Өйрәнсек кенә аптырамай.

— «Күрше хаҡы — тәңре хаҡы» тигәндәр. һине бер ҡыуандырыу үҙе бер ғүмер бит ул миңә, — тип яуап бирә һәм, устарын ыуа-ыуа, һөнәрсенең яңы көршәктәре янында өйөрөлә, кәйефенең күтәрелеүен йәшерә алмай, хатта ирендәрен тасылдатып ҡуя.

— һәйбәт!.. Бик шәп!.. Илла, ысынлап та, һөнәрсе лә инде һин, күрше!.. — ти.

һөнәрсе изгелекле күршеһе алдында уңайһыҙланып ҡул ҡаушырып тора. Өйрәнсектең хәйләкәр күҙҙәрендә ниндәй шайтан бейегәнен күрмәй ҙә, абайламай ҙа.

— Йә, ярар,— тип уғата ҡәнәғәт тауыш менән үҙенсә һығымта яһап ҡуя Өйрәнсек. — Мин иртәгә үк тағы юлға сығам. Был көршәктәрҙе лә шәп кенә итеп оҙата һалырға кәрәк...

Шулай тағы күпмелер йыл үтә. Ике күрше дуҫ татыу ғүмер итә. һөнәрсе, ғәҙәттәгесә, яныпярһып көршәктәр яһай. Өйрәнсек уларҙы төрлө яҡҡа йөрөтөп һата. Өйрәнсек был эштә, ысынлап та, сикһеҙ ҙур оҫталыҡ, йылғырлыҡ күрһәтә. һөнәрсенең төшөнә лә инмәҫлек мең төрлө мутлыҡтар эшләй. һәр көршәктән биш хаҡ һығып сығарыуға өлгәшә. Бара-тора ауылдың иң ҙур байы булып ала. һөнәрсе лә, шул уҡ балсыҡ өйөнән ҡотола алмаһа ла, туҡ, бөтөн йәшәй. Хәҙер уға тамаҡ, өҫ-баш хаҡында уйламай,

үҙенең йәне-йөрәге менән һөйгән эшенә тотошлай бирелергә мөмкин. Ул хәҙер теләгәнсә тауҙар, далалар гиҙә, тәбиғәттең яңынан-яңы серҙәрен өйрәнә. Көршәктәрҙе тағы ла матурыраҡ, тағы ла нәфисерәк итер өсөн, яңынан-яңы буяуҙар, төҫтәр таба. Көршәккә төшөрөлгән сәскәләр төрөн тағы ла күбәйтә, уларҙы ысын сәскәләргә тағы ла ныҡ оҡшатырға тырыша. Уның хәҙер был эштәр менән иркенләп шөғөлләнергә, баштан-аяҡ сумып эшләргә мөмкинлеге бар. Дөрөҫ, Өйрәнсектең һатыу-алыуҙа артыҡ тырыш булып сығыуы, уны көршәктәрен элеккесә, кешеләргә буш биреп, ҙур ҡәнәғәтлек, бөйөк ләззәт татыу кеүек ысын кешегә хас тойғоларҙан бөтөнләй мәхрүм итеүе йыш ҡына бошондора ла. Бигерәк тә Өйрәнсектең эшләнеп бөткән бер көршәкте ҡулдан тартып тигәндәй алып китеп тороуын, шул арҡала хәҙер, үҙенең ҡул емешенә ҡат-ҡат ҡарап, һоҡланып, ҡыуанып, хатта серле генә итеп улар менән һөйләшеп-серләшеп ултырыу бәхетенән мәхрүм булыуҙы кисереүе лә ауыр уға. Ләкин Һөнәрсе мөмкин тиклем бындай кисереш тәрҙе үҙенән алыҫыраҡ ҡыуырға, нужанан ҡотҡарған кешенең хәтерен ҡалдырмаҫ өсөн, быны Өйрәнсеккә белдермәҫкә, көршәктәрҙе тағы ла йәһәтерәк һәм матурыраҡ итеп эшләү менән йәнен тынысландырырға тырыша.

«Өйрәнсек тегеләрен һатып ҡайтҡансы, исмаһам, быларын оҙағыраҡ янымда торор, — тип ашҡынып эшләй. — Бәлки, берәй ауылдаш килеп инһә, бүләк итеп бирергә лә өлгөрөрмөн», — тип өмөтләнә. Ләкин уның был өмөтө лә аҡланмай. Өйрәнсек үҙ эшен сәғәт теүәллегендә башҡара.

## VI

Тиҫтәләгән йылдар һиҙелмәй уҙып киткән. Ҙур, көмөрө танаулы, супай күҙле, бәләкәс кенә шәрә башлы Өйрәнсек беҙҙең Уралдағы таҙғара тигән бөркөткә оҡшап ҡалған. Ҡорһағын май, битен йөн баҫҡан. Ә оҙон буйлы, ҡаҡса яңаҡлы Һөнәрсе тағы ла нәҙегәйеп, дуға кеүек бөгөлөп төшкән. Уның ғәжәп аҡыллы ҡарашлы уйсан күҙҙәрендә лә инде

элекке ҡанатлы дәрт, бәйһеҙ сәм түгел, ә тәрән моң, әйтелмәгән зар сағылған. Һөйгән эшенең емешен татыу бәхетенән мәхрүм булып йәшәү ҡайғыһы унын бөтә йөрөш-торошона үҙенең тамғаһын һалған. Әйе, юкҡа ғына ул үҙен бығаса:

«Ниңә бошонорға? Ҡөршәктәрҙе һин халыҡ өсөн эшләйһең, Өйрәнсек уларҙы халыҡҡа еткерә. Һиңә тағы нимә етмәй?!» — тип тынысландырырға, халыҡҡа еткереү юлының үҙенсә барып сыҡмауын танымаҫҡа тырышты. Ләкин күңел төбөнән выждан тауышы һәр саҡ уның был уйын кире ҡаға килде: «Үҙ-үҙенде алдама, Һөнәрсе! Был эш һиненсә барып сыҡманы... Әйе, нимәһелер һиненсә, һин теләгәнсә булманы бының...» тип эсенән һөрәнләне бит выждан!..

Ғүмер үткән һайын, был тынғыһыҙ уй ҡуйырған. Бара-тора ул хатта түҙгеһеҙгә әйләнгән. Һөнәрсе күҙгә күренеп шиңә, һүнә башлаған. Ә Өйрәнсек уға тын да алырға ирек бирмәгән. Һөнәрсе ни хәтле йонсоһа, ҡартайһа, ул шул хәтле уны ашыҡтырған. Һаман күберәк, етеҙерәк, матурыраҡ эшләүҙе талап иткән.

— Ҡөршәктәр хәҙер арзанайҙы. Күберәк эшләмәһәң, икмәклек тә аҡса табып булмаясаҡ! Һин яңғыҙ. Ашамай ҙа түҙерһең. Ә минең бит итәк тулы бала. Мин уларҙы нисек аҫырармын?! — тип зарланып, ҡамсылап ҡына торған.

Яҡшы атҡа ҡамсы кәрәкме ни? Һөнәрсе, әлбиттә, Өйрәнсек ҡыуған өсөн генә түгел, ә эш яратҡаны өсөн, эшһеҙ бер генә минут та тик ултыра алмағаны өсөн, арыуын да, ауырыуын да иҫәпкә алмай, эшләүен дауам иткән. Һәр таңды яңы эш, яңы көршәк менән ҡаршылаған. Ғүмерҙең һуңы етеп килеү ҙә уны ашығырға мәжбүр иткән.

Бер саҡ Һөнәрсе нәүбәттәге көршәкте таң алдында ғына эшләп бөткән. Еҙ башлы йылан булып үрелеп сыҡҡан нәфис тотҡа төбөндә үҫкән тау ландышының йәшел ҡыяғына, ғәҙәттәгесә, «Һөнәрсе» тип матурлап яҙып ҡуйған. Унан, сабый бала шикелле, эскерһеҙ һәм ғәжәп һөйкөмлө йылмайып, ҡәҙерләйһөйә уны үҙенең ҡаршыһына, башҡа көршәктәр янына ҡуйған.

Тау артынан сағыу ҡояш балҡып сыҡҡан. Ул һөнәрсенең тәпәш өйөнә мул итеп алтын нур шәлкеме һирпкән. Әле генә энәнән-ептән сығып, келәм өҫтөндә наҙланып ултырған көршәктең тере сәскәләре мең төрлө нур бөркөп бейергә, ынйы бөртөктәре шикелле, емелдәргә, ҡыуаныл-кинәнеп көлөргә керешкән. Уларҙан хатта тирә-яҡҡа хуш-еҫ тә бөркөлгән һымаҡ булған... Тәпәш, ҡараңғы өй эсе үтә сағыу нур һәм хуш еҫ менән тулған. Һөнәрсе, үҙ ҡулдары тыуҙырған был мөғжизәле матурлыҡҡа тәүтапҡыр ҡәнәғәт һәм ысын һоҡланыу менән ҡарай-ҡарай, әкрен генә янтайып, келәмгә ятҡан...

Һәр ваҡыттағыса, ҡояш сығыу менән ҡайтанан эшкә тотондороу һәм әҙер көршәктәрҙе алып сығыу ниәте менән ашығып килеп ингән Өйрәнсек, һөнәрсегә ғәйәт шелтәле ҡараш ташлап, бик оҙаҡ баш сайҡап торған:

— Ай-й-яй-й-яй!.. Иә, эштең самай ҡыҙған ғына сағында... Нимә эшләп ҡуйған бит, ә?!

— Һай, байғош!.. Йәшәү өсөн эшләй белеү генә етмәүен так и белмәй китте бит, ә!.. Дәрүиш булып йәшәне, дәрүиш булып үлде бит, байғош, ә... тип үҙенсә фәлсәфә һатҡан.

## VII

Ауылдаштары оҫта ҡуллы, изге күңелле һөнәрсеһен юғалтыу ҡайғыһынан арынып та етмәҫтән, Өйрәнсек тағы көршәктәр менән һатыу итә башлаған.

— Өйрәнсек был көршәктәрҙе ҡайҙан ала икән тағы?

— Ҡарасы үҙҙәрен. Ике тамсы һыу кеүек һөнәрсенең көршәктәренә оҡшап торалар ҙабаһа!— тип ғәжәпләнгән кешеләр. Өйрәнсек һис тә аптырамаған:

— Мин был мөғжизәле көршәктәрҙе яһауҙың серен күптән белә инем инде. Тик һөнәрсе йәшәһен тип, уның икмәген тартып алмайым тип кенә бығаса уларҙы яһамай торҙом, — тигән. — Ышанмаһағыҙ, бына ҡарағыҙ!— тип ғәҙәттәге «Һөнәрсе» тигән яҙыу урынына төртөп күрһәткән. Ысынлап та, бында, тау

ландышының сөм-йәшел ҡыяғына ҡып-ҡыҙыл буяу менән яҙылған «Һөнәрсе» һүҙе урынында хәҙер күк ҡыяҡҡа ҡара буяу менән яҙылған «Өйрәнсек» тигән тамға тора икән.

— Йә, күрҙегеҙме? — тигән Өйрәнсек һауалы тауыш менән. — Аңланығыҙмы инде?

Ҡешеләр аптырауҙан аһ иткәндәр. Яманлыҡты нисек тә тиҙерәк онотorға, ысын, яҡшы эш алдында баш эйергә әҙер булған бер ҡатлы ябай халыҡ Өйрәнсеккә шунда уҡ ышанған. Уның насарлыҡтарын онотҡан, ғәфү иткән. Хатта оҙаҡламай Өйрәнсекте маҡтарға, уның менән ғорурланырға ла керешкән.

— Ҡара һин уны, ҡандай оҫта ҡуллы икән дәбаһа беҙҙең Өйрәнсек! Һөнәрсенән бер ҙә кәм яһамай ҙабаһа ул көршәктәрҙе! — тип һоҡланған.

Һәр саҡ тере һәм кәрәкле кеше алдында баш эйергә, «бәлки, берәй файҙаһы тейер тип», уға ярап ҡалырға яратыусы ҡайһы берәүҙәр хатта:

— Валлаһи тип әйтәм, Өйрәнсектең көршәктәре Һөнәрсенекенән шәберәк! — тип тә ебәргән. — Былай булғас, Һөнәрсенең дан ҡояшы байыны! — тип лаф орған.

Ҡемгә, нимәгә булһа ла табынмаһа, үҙен бөтөнләй көҙгө арыш ҡамылы кеүек ҡыу тоя башлай торған меҫкен йәндәр шунда уҡ Өйрәнсектең тыйнаҡлығы һәм намыҫлылығы алдында баш эйергә, уны данларға, маҡтарға тотонған.

— Я хоҙа!.. Донъяла шул хәтле лә тыйнаҡ, шул хәтле лә изге йәнле кешеләр була икән дәбаһа!.. Ҡара һин уны, Һөнәрсенән дә шәберәк оҫта булған көйө, ул йәшәһен тип, был һөнәргә тотонмай торған бит!..

— Бөйөк оҫта!.. Тиңһеҙ һөнәрсе! Ә үҙе көршәктәренә ҡул тамғаны «Өйрәнсек» тип кенә ҡуйған. Ниндәй кеселеклелек!.. Тиңһеҙ баҫалҡылыҡ!.. Тиңдәшһеҙ намыҫлылыҡ!.. — тип Өйрәнсек исеменә мең төрлө маҡтау яуҙырған улар.

Шулай итеп, Өйрәнсектең даны бик тиҙ арала бөтә илгә таралған. Бара-тора хатта батшаның үҙенә лә барып еткән.

Бер саҡ батша Өйрәнсекте үҙ һарайына саҡыр-

тып алған. Уның тормошо, эше менән үҙе ентекләп танышҡан. Өйрәнсектең көршәктәре батшаға ла бик нык оҡшаған. Ысын сәнғәт хазинаһын яһалма, ялған сәнғәт әйберенән яҡшы айыра белә торған, уҡымышлы кеше булған был батша.

— Һин, ысынлап та, үҙ эшендең бөйөк оҫтаһы икәнһең! — тигән ул Өйрәнсеккә.— Бынауы тау ландышының ҡыяғын күк төҫкә буяуыңды, йәки бынауы ҡултамғаңды ҡара буяу менән яҙыуыңды ғына алмағанда, был көршәк ысын талант емеше, — тип раҫлаған.

Ошо һөйләшеүҙән һуң батша Өйрәнсекте үҙ янында ҡалдырған. Уға айырым һарай һалдырып биргән.

— Әйҙә, шунда үҙ һөнәрең менән кинәнеп шөғөлләнә. Әгәр теләһәң, ярҙамсылар ҙа бирәсәкмен, — тигән.

Өйрәнсек батшаның бөтә хөрмәтен, ихтирамын ҙур ихласлыҡ һәм түбәнселек менән ҡабул иткән. Тик ярҙамсы алыуҙан ғына баш тартҡан.

— О, хөрмәтле падишаһ ғали йәнәптәре! — тигән ул, тәхет алдында теҙләнеп. — Миңә ярҙамсы кәрәкмәй. Әгәр мин был эштә кеше ярҙамынан файҙаланһам, минең күңелемдән илаһи нур ҡасыр, ул саҡта мин һеҙҙең өсөн был мөғжизәле көршәктәрҙе эшләй алмам тип ҡурҡам. Рөхсәт итегеҙ миңә, падишаһ ғали йәнәптәре, күкрәгемдә йәнем бар саҡта, һеҙгә үҙ ҡулдарым менән эшләп хеҙмәт итергә!..— тип ялынған. Хатта әҫәрләнеүҙең сигенә етеп, батшаның ҡатаһын да үбеп алған.

Өйрәнсектең был тиклем кеселекле булыуы батшаға тағы ла нығыраҡ оҡшаған.

«Ғәжәп изге кеше икән дәбаһа был Өйрәнсек! Халыҡ белмәй маҡтамай икән үҙен», тип уйлаған батша. Һәм Өйрәнсеккә һарайында үҙе теләгәнсә йәшәргә, эшләргә рөхсәт иткән.

Өйрәнсек батша һарайында ла үҙен һыуҙағы балыҡ шикелле ыҡсым, йылғыр тотҡан. Көндәрен һәм кистәрен батшаның башҡа ярандары менән һунарҙа, ҡунаҡта, кәйеф-сафала уҙғарған. Тик таң алдында ғына ул, бөтә кешенән айырылып, үҙ һарайына ҡайтҡан, эш бүлмәһенә бикләнгән...

— Таң алдында һәм япа-яңғыҙ сақта ғына килә миңә был илаһи оҫталыҡ, — тигән ул. — Ябай кешеләр татлы йоҡола сақта тыуа был мөғжизәле көршәктәр!

Өйрәнсектең табындаштары уның ғәжәп кеше булыуы, һәр таңда алланың үҙе менән серләшеп алыуы, шул илаһи осрашыуҙың шаһите булып ошо көршәктәр барлыҡҡа килеүе хаҡында яңынан-яңы уйҙырмалар таратҡандар. Батшаның кәнизәктәре лә инде һыуҙы алтын һауыттарҙа түгел, ә Өйрәнсектең мөғжизәле көршәктәре менән генә ташый башлағандар. Хатта батшаның үҙенә лә шарапты, элеккесә алтын кубоктарҙа түгел, ә ошо көршәктәрҙә биргәндәр. Сөнки көршәктәге һыу саф, шарап татлы көйө тора икән.

## VIII

Өйрәнсек ҡалған ғүмерен шулай батша һарайында йәшәп, ҡәҙер-хөрмәттә, кәйеф-сафала уҙғарған. Ә аҙаҡ инде, бик ныҡ һуңлап булһа ла, Өйрәнсекте лә ғазраил иҫенә төшөргәс, уны — донъяла иң бөйөк, баҫалҡы кешене һәм батшаның иң яҡын ярандарынан берәүҙе — былғаса күрелмәгән ҡәҙер-хөрмәт менән ололап күмгәндәр. Ҡәберен аҡ мәрмәр менән ябып, уға:

«Иң бөйөк баҫалҡы кеше — «Өйрәнсек» тип, алтын хәрефтәр менән яҙып ҡуйғандар. Өйрәнсектең тиңһеҙ оҫталығына тәрән ихтирам йөҙөнән шунда уҡ аҡ мәрмәр өҫтөнә теге көршәктәрҙең береһен һис тә ҡупмаҫлыҡ итеп беркетеп ултыртҡандар. Һәм был ҡәбер оҙаҡ йылдар буйы изге урын булып һаналған. Ҡәбер янынан кеше юлы өҙөлмәгән. Ә һөнәрсенең ҡәберен иҫкә алыусы ла, белеүсе лә булмаған. Үҙе лә тамам онотолған.

Йылдарҙы ҡыуып йылдар уҙа торған. Өйрәнсекте бөйөк һөнәрсе тип ололап, ҡәҙер-хөрмәт күрһәткән яҡшы күңелле батша ла бер саҡ донъяны ҡалдырған. Бара-тора ил дә, кешеләр ҙә танымаҫлыҡ булып үҙгәргән. Тик теге мөғжизәле көршәктәр генә һаман иҫкереүҙе лә, ватылыуҙы ла, төҫ үҙгәртеүҙе лә белмәй йәшәй биргәндәр. Уларҙы яурын баштарына ултыр-

тып, йәш ҡыҙҙар һаман элеккесә, һығыла-бөгө-лә, ҡая битләүе буйлап һуҙылған һуҡмаҡтан тау шишмәһенә һыуға йөрөгән. Ҡөмөштәй саф, балдай татлы шишмә һыуы һаман элеккесә һыуһағандың һыуһынын ҡандырған, арығанға хәл индергән, сырхағанға шифалы дауа булған. Ҡешеләр һаман элеккесә был көршәктәрҙең матурлығына, нәфислегенә һоҡланып, сәскәле биҙәктәренең күҙҙең яуын алып тороуына ҡыуанып йөрәктәренә ял алған.

Өйрәнсектең ҡәбере өҫтөндәге көршәк тә, шулай уҡ һаман элеккесә йәйғор шикелле бөтә төҫтәрҙә йымылдап, үҙгәреү, төҫ һалыуҙы белмәй ултыра биргән.

Шулай тағы күпмелер ваҡыт үткән. Һәм бына бер саҡ иң бөйөк, баҫалҡы кешене иҫкә алырға тип йыйылып килгән халыҡ, уйламағанда, көршәктә ниндәйҙер үҙгәреш булыуын абайлап алған. Көршәк бөгөн нисектер айырата матур һәм көләс булып, меңтөрлө нур сәсрәтеп балҡып ултыра икән.

— Был ни хикмәт!!! — тип аптырап ҡалған халыҡ. — Ниндәй ғәләмәт?.. Көршәк үҙгәргән дәбаһа!.. Бында һөнәрсе яһаған көршәк ултыра лабаһа! М... ғайын, берәйһе алмаштырып киткәндер!

— Ләкин юҡ, улай түгел. Көршәк ҡымшанмаған да. Шул, тәү нығытылған көйө ултыра!.. Тик ҡу...тамғаһы ғына бүтән!..

Ысынлап та, көршәктә көтөлмәгән үҙгәреш барлыҡҡа килгән: унда тау ландышының ҡыяғынан «Өйрәнсек» тигән яҙыу менән күк буяу эҙһеҙ юйылған. Уның урынына хәҙер шатлыҡ йәше һымаҡ теремек һәм саф йылмылдап, йәшел ҡыяҡҡа ҡан ҡыҙыл буяу менән яҙылған «Һөнәрсе» һүҙе балҡып сыҡҡан.

Ҡешеләрҙең аптырау һәм шомланыуының иге-сиге булмаған. Улар ашығы-югерә өйҙәренә таралғандар. Ләкин унда ла шундай уҡ хәлгә осрағандар. Көршәктәрҙең бөтәһендә лә хәҙер «Өйрәнсек» түгел, ә «Һөнәрсе» һүҙе бөтә матурлығы менән нурланып, көләп тора икән.

«Ялғандың боҫо ҡыҫҡа» ти бит халыҡ. Шулай итеп, Өйрәнсектең мәкерле хәйләһе, йөҙ йылдан һуң булһа ла, асылған. Теге ваҡытта ул, бәхтиһәң, һө-

нәрсенең гүзәл көршәктәрен һатыуҙан да бигерәк, йәшереп йыя барған икән. Шунан аҙаҡ, Һөнәрсе үлгәс, уның ҡултамғаһы өҫтөнә үҙ тамғаһын баҫҡан да данлы һөнәрсе булып та алған. Үҙенсә бик аңһат ҡына исемен «мәңгеләштереп» ҡалдырған.

— Вәт мәлғүн, кеше йөҙө менән йөҙлө булып йәшәгән бит, ләғнәт төшкөрө! Ҡәбере йыландар, әрмәнделәр ояһына әйләнгере! — тип ҡарғаған халыҡ уны хәҙер. — Ҡара һин уны, йөрәк ҡаны менән яҙғанды ялған буяу менән ҡаплап тотмаҡ булған бит, шаҡшы! — тип нәфрәтләнгән. — Һөнәрсе, ысынлап та, үҙенең ҡултамғаһын йөрәк ҡаны менән яҙа торған булған, ти бит. Эйе, эйе, ул бөтә буяуҙарына ла үҙенең йөрәк ҡанын ҡушҡан, ти. Шуға улар мәңге шиңмәйҙәр ҙә, юйылмайҙар ҙа, ти, — тип раҫлаған.

— Бына шул. Халыҡтың «Ҡырын эш — ҡырҡ йылдан һуң да беленә» тигәне ошо булалыр инде, ә? Һин нисек уйлайһың?!

«Һөнәрсе һәм Өйрәнсек» хаҡындағы хикәйәтен Хасбулат олатай шундай һорау менән тамамлап ҡуйҙы: — Ысынлап та, хикмәтле хикәйәт бит, ә?! — тип оҙаҡ ҡына миңә текләп ултырҙы...

*Июль, 1964*

27423

БИБЛИОТЕКА
объединенного гр фонда
Учалинского ГОК

2 Заказ 555

# Мөхәббәт һәм нәфрәт

## I

Күптән, бик күптән булған ваҡиға был. Ул саҡта әле беҙҙең ата-бабалар күсмә тормошта йәшәгән. Йәйләп йөрөп, хатта оло диңгеҙ ярҙарына хәтле барып сыға торған булған улар. Дөрөҫ, өйөр-өйөр йылҡы көтөп, иҡһеҙ-сикһеҙ урмандар, далалар гиҙеп, йәйләп йәшәү бәхете һәр кемгә лә тигеҙ теймәгән. Ярлыға, әлбиттә, өйөрләп йылҡы ла, турһыҡлап ҡымыҙ ҙа, аҡ тирмәләр ҙә эләкмәгән. Ғүмерҙе ул йәйләүгә күсеп, ҡымыҙ эсеп, ҡурай тыңлап уҙғара алмаған. Нисек тура килде, шулай көн күргән. Әйтәйек, бына мин һөйләйәсәк ваҡиғала ҡатнашҡан кешеләр балыҡсылар ғына булғандар. Уралдан бик алыҫта, күк диңгеҙ буйында йәшәгән улар. Диңгеҙҙең тымыҡ бер ҡултығында, ҡарлуғас оялары шикелле балсыҡтан һылап, яланғас ҡая таштарға йәбештереп эшләнгән ер өйҙәрҙә ғүмер иткәндәр. Әйе, бик бейектә, ҡарағоштар ғына оя ҡорған осло ҡаялар араһында, кескәй генә балыҡсылар ауылында...

Ә аҫта, бик тәрәндә, иҡһеҙ-сикһеҙ оло диңгеҙ күгәреп ятҡан. Диңгеҙ берсә йәшен сатҡылары менән үрелеп, утлы өйөрмә булып күккә үрелгән, берсә ирегән ҡурғашҡа әйләнеп, тамуҡ утындай урғылған, берсә, имеп туйған сабый шикелле иҙерәп, тәрән йоҡоға талған. Бындай саҡта диңгеҙ өҫтөндә иҫ киткес ғорур һәм мөһабәт тынлыҡ, ҡабатланмаҫ наҙлылыҡ хөкөм һөргән. Тап ошондай саҡта Диңгеҙгә Ҡояш ғашиҡ булған. Ҡыуана-көлә, уның өҫтөнә, алтын суҡтарҙан туҡып, аҫыл таштар менән биҙәп эшләнгән нәфис селтәрҙәр япҡан.

— Диңгеҙбикә, мин һинән күҙҙәремде ала алмайым. Мин һиңә йөрәгемдең иң ҡайнар нурҙарын биреп бөтөп, хатта үҙем һыуынып ҡалырға ла әҙер. Тик һин генә үҙгәрмә. Гел-гел шулай наҙлы тынлыҡҡа сумып, зәңгәр сәңгелдәктә ят! — тип ялынған.

Диңгеҙҙең төнгө сихри тынлығына Ай ғашиҡ булған. Уға, һөйә-маҡтай, көмөш тәңкәле, уҡалы еләндәр кейҙергән.

— Диңгеҙ һылыу, һиңә ошонан да килешле кейем юҡ. Ниндәй нәфис иркәлек, ниндәй серле матурлыҡ өҫтәй ул һиңә. Ниндәй ғали тынлыҡҡа сумып йоҡлайһың һин был кейемдә. Һәр саҡ ошо кейемде генә кейеп, мең төрлө нур сәсрәтеп, йылтылдап йоҡла. Мин һине тик ошо төҫөңдә генә яратам. Аңла!.. — тигән Ай.

— Ярар, ярар... Тып-тын, иркә, наҙлы ғына булырмын, — тип толомдарын ҡағып йымылдаған Диңгеҙ. Ғәжәп баҫалҡы, саф, нәфис булып татлы йоҡоһон дауам иткән. Ай менән Ҡояш алмаш-тилмәш уның баш осонда баҫып торған. Ике ғашиҡ моңлана-уфтана уның тыныс йоҡоһон һаҡлаған.

— Аһ, ниндәй тынлыҡ, ниндәй наҙлылыҡ! Нәфис тыйнаҡлылыҡ! — тип ҡабатлағандар улар. — Кем ҡыйып был мөһабәт тынлыҡты боҙор?! Кем ҡаҡшатыр уның ғорур тынıслығын!.. Юҡ, был сихри гүзәллек беҙгә мәңгелеккә бүләк ителгән...

Бына бер саҡ ҡайҙандыр бик алыҫтан, күк тауҙар артынан, ҡара болот ҡалҡып сыҡҡан. Уның артынса уҡ, ҡанатлы аргымағына атланып, Ел-Дауыл килеп еткән. Ер һелкетеп, йөрәк елкетеп һыҙғырып ебәргән. Диңгеҙ тәрән йоҡоһонан уянып, күҙен асҡан. Икенсе тапҡыр һыҙғырған Ел-Дауыл. Быныһында инде Диңгеҙ дәртләнеп, сайҡалып ҡуйған. Өсөнсө тапҡыр ҡолаҡ ярғыс саялыҡ менән һөрәнләп ебәргән Ел-Дауыл:

— Уян!.. Шатлан, шаш, Диңгеҙ-йән!.. Беләһең бит, мин һине сая сағыңда ғына яратам. Аңлайһың бит, мең йыл тынып, тонсоғоп йәшәгәнсе, бер көн янып-ярһып йәшәүҙең ләззәтлелеген! — тигән. — Әйҙә, йәһәт бул, ярһы, ел, ярыш минең менән!

Шул ваҡыт Диңгеҙ, йоҡоһонан тамам уянып, һикереп торған. Ел-Дауылға ҡушылып, ҡырағай ҡыуа-

ныс менән ер һелкетеп шарҡылдап көлөп ебәргән:

— Дөрөҫ әйтәһең, Ел-Дауыл!.. Мең йыл тыныптонсоғоп йәшәгәнсе, бер көн янып-ярһып, урғып-ҡайнап йәшәү артыҡ!..

Диңгеҙ бер тулауҙа Ҡояш япҡан алтын суҡлы, аҫыл ташлы селтәрҙәрҙе өҙгөләп ырғытҡан. Ай кейҙергән көмөш тәңкәле, уҡалы еләндәрҙе сисеп ташлаған. Унан сыйыйырҙан ысҡынған ҡырағай януарҙай ажғырырға, сеңләргә, Ел-Дауыл менән ҡыуышып елергә тотонған. Көмөш суҡтар тағылған зәңгәр толомдарынан тау-тау тулҡындар яһап үкерә-һыҙғыра, өнһөҙ ҡаяларҙы тоҙло һыу менән ҡойондорған, елкәнле караптарҙы ҡауырһындай осороп уйнатҡан-уйнатҡан да, ахыр килеп, таштарға бәреп сайратҡан, ярҙарынан артылып, далаларҙы баҫып киткән...

Шулай йәшәгән Диңгеҙ. Ел-Дауыл менән бергәләп донъяның аҫтын-өҫкә айҡаған.

Ләкин тынлыҡ мәңгелек булмаған кеүек, ярһыуҙың да сиге була икән шул. Бына әкренләп Ел-Дауыл уҙған. Диңгеҙ тағы тынған. Тағы, йәш бала кеүек иҙерәп, ярҙарына һыйынып, татлы йоҡоға талған. Тағы Ай менән Ҡояш яғына ара-тирә иркә ҡараштар оҙатҡан...

— Аh, ҡандай мөһабәт тынлыҡ!.. Ҡандай наҙлы тыйнаҡлыҡ, баҫалҡылыҡ!.. — тип һоҡланған Ҡояш тағы. Уның күкрәген тағы алтын суҡтарҙан эшләнгән аҫыл селтәрҙәр менән биҙәргә керешкән.

— О сихри матурлыҡ!.. О бөтмәҫ-төкәнмәҫ тылсымлы дәрт, илһам шишмәһе! — тип тағы маҡтарға керешкән Ай. Уға тағы уҡа суҡлы, көмөш тәңкәле еләндәр бүләк иткән...

Ни әйтмәк кәрәк? Ғашиҡтәр бит! Мөхәббәт бөтәһен дә онотторған. Бөтәһен дә ғәфү иттергән.

Ошо мәкерле һәм наҙлы Диңгеҙгә мәңгелек ғашиҡтәр араһында баяғы балыҡсылар ауылының иң уҙамандарынан береһе — Юламан ҡарт та булған. Тик уның мөхәббәте Ай, Ҡояш, Ел-Дауыл мөхәббәтенән башҡасараҡ булған: Юламан ҡарт Диңгеҙҙе бөтә ҡиәфәтендә лә берҙәй үк яратҡан. Йәшен саткылары менән ҡосаҡлашып, мең башлы аждаһаға әй-

ләнеп үкергән сағында ла, аҫыл ташлы, алтын суҡлы селтәрҙәр тағып, көмөш тәңкәле, уҡалы еләндәр кейеп, Ай, Ҡояш менән күҙ ҡыҫышып ятҡан ваҡыттарында ла, гонаһһыҙ сабыйға әйләнеп, татлы йоҡоға талған мәлендә лә берҙәй үк өҙөлөп һөйгән ул Дингеҙҙе. Уның өсөн диңгеҙҙең йәмһеҙ ҙә, йәнһеҙ ҙә сағы булмаған. Әйе, ысын ғашиҡ булған ул Юламан ҡарт. Шуға күрә бөтә ғүмерен диңгеҙ ярында уҙғарған. Ул һәр көн таңдан алып төнгә хәтле уның янынан бер аҙым да ситкә китмәгән. Әлбиттә, Диңгеҙ-көйһөҙ ҡыҙ ҡартты төрлөсә ҡаршылаған. Берсә зөбәржәт нур бөркөп, күҙҙең яуын алып йымылдап ятҡан. Берсә ҡойон булып өйөрөлгән, берсә аждаһаға әйләнеп ажғырған. Ә Юламан ҡарт барыбер уның янына барған. Ҡарағастан соҡоп, һыу ҡошона оҡшатып эшләнгән, үҙе менән йәштәш кәмәһенә ултырып, диңгеҙ эсенә балыҡ һунарына сығып киткән. Ә аҙаҡ, ҡартайғас, ҡулдары ишкәк тотоуҙан баш тарта башлағас, һәр көн ҡармаҡ алып, Диңгеҙгә башын һуҙып, аяҡ бөкләп, рәхәт кенә көйшәп ятҡан һыйырға оҡшағаны өсөн «Ташһыйыр» тип йөрөтөлгән аласа ҡая өҫтөнә менеп, аяҡ һалындырып ултырған. Йышылып, һарғайып бөткән аҡ ҡыуалға беркетелгән оҙон баулы ҡармағын, ҡабаланмай ғына емләп, диңгеҙгә ырғытҡан. Саҡ ҡына ҡыҫылып, һәр саҡ йылмайған һымаҡ булып торған изге ҡарашлы сөм-ҡара күҙҙәрен Диңгеҙгә төбәгән...

«Йә, бөгөн ниндәй ризыҡ бирер уға һөйгән Диңгеҙе?.. Ниндәй һәйбәт балыҡ бүләк итер? Әллә бер балыҡ та бирмәҫме?.. Ул саҡта Юламан ҡарт үҙенең берҙән-беренә, кескәй ейәнсәренә, нимә ашатыр?.. Шулай уҡ Зөлхизәһе ризыҡһыҙ ҡалырмы ни бөгөн? Юҡ, быны булыуы мөмкин түгел. Уның ҡырыҫ, ләкин йомарт ҡылыҡлы Диңгеҙе бындай ҡаты бәғерле булманы. Юламан ҡарттың ейәнсәрен — Зөлхизә һылыуҙы бер ҡасан да ризыҡтан мәхрүм итмәне. Был юлы ла буш итмәҫ, ҡоро ҡул менән ҡайтармаҫ уны рәхимле Диңгеҙе...»

Һәр көн, һәр ай, һәр йыл шундай өмөт менән килгән Юламан ҡарт диңгеҙ буйына. Уның яҡты өмөтө бер ҡасан да ерҙә ятып ҡалмаған... Бер көндө Юла-

ман ҡарт, ғәҙәтенсә, таңдан тороп диңгеҙ ярына кил-
гән, Ташһыйырҙың мөгөҙ араһына, үҙенең яратҡан
урынына, менеп ултырған. Ҡармағын ҡәҙерләп, һы-
лап-һыйпап, диңгеҙгә ырғытҡан. Тик уның аҡыллы
ҡарашлы талған күҙҙәре, элеккесә балыҡ сирткәнен
түҙемһеҙлек менән көтөп, ҡалҡыуысҡа төбәлмәгән
был көндө. Күҙҙәр ҡармаҡҡа ҡабасаҡ балыҡты тү-
гел, ә ҡайҙандыр, билдәһеҙ яҡтан, диңгеҙ төпкөлө-
нән килеп сығасаҡ кемделер түҙемһеҙлек менән көт-
кәндәр, нимәнелер йотлоғоп эҙләгәндәр. Эйе, уның
күҙҙәре генә түгел, хатта ҡуйы ялбыр күк ҡаштары
ла, аҡ яллы тулҡындарға оҡшаған кәзә һаҡалы ла,
тотош тарамышҡа әйләнеп, кипкән төпһә кеүек бу-
лып ҡалған бәләкәс кәүҙәһе лә ниндәйҙер бошоноу-
лы ынтылышта ҡатып ҡалған. Бер ҡараһаң, ҡа
башынан осоп күтәрелергә йыйынған сал бөркөтт
лә хәтерләтеп ҡуйған уның был ултырышы. Ә Диңгеҙ
гә барыбер. Ул һалмаҡ ҡына тулҡына, көмөш ҡанат
тары менән Ташһыйырҙың тояҡтарын йыуа, ҡалҡы
уысты әкрен генә ҡаҡҡылап-һуҡҡылап ҡарай, й
уны бөтөнләй төпкә тартып алып инеп китә.

«Ҡалҡыуыс батты!.. Балыҡ ҡапты!..»

Аһ, ниндәй ярһыу ҡыуаныс, әйтеп бөткөһөҙ лә
зәтле сәм уяна ине Юламан ҡарттың күңелендә бы
уйҙан! Бәлки, ул әле лә шулай ҡыуаныр? Әле лә м
лайҙарға ғына хас сабырһыҙлыҡ менән ҡармағы
һыуҙан тартып алыр. Ҡояш яҡтыһында аҡ ҡала
шикелле йылтылдап осҡан балыҡты тейен етеҙле
менән эләктереп алыр ҙа, үтә ҡәнәғәт булып, йы
лай-мөңрәй, уны һыулы күнәккә ырғытыр... унан т
ғы ихлас күңел, шат йөҙ менән ҡармағын емлә
диңгеҙгә ташлар... Тағы ҡалҡыуысына текләп, тын
ҡына йылмайып ултырыр?..

Юҡ. Ғүмерендә тәүтапҡыр Юламан ҡарт был кө
дө быларҙың бөтәһен дә оноткан. Ваҡыт-ваҡыт ха
та үҙен дә онота һымаҡ, быны-быны диңгеҙгә ҡол
төшөр ҙә, бер ҡасан да йәшәмәгән кеүек, юҡ та б
лыр һымаҡ... Нимә булған уға, Юламан ҡартҡа? Б
лыҡ ҡармаҡларғамы, әллә уй уйларға килгәнме у
яр буйына? Диңгеҙ кеүек икһеҙ-сикһеҙ, упҡынл
уйҙар төпкөлөнән ниндәй һәлмәк ҡатламдарҙы а

тара, кемдәр менән серләшә уның күпте кисергән, тынғыһыҙ күңеле?! Бик алыҫта, сал Уралда ҡалған данлы тоҡом-ырыуы хаҡында уйлаймы ул? Диңгеҙ ярҙарын үҙенә йәшәү төйәге итеп һайлаған батыр ата-бабаларын хөрмәтләп иҫкә аламы? Әллә диңгеҙ-ҙә балыҡ кеүек йөҙгән, елкәнле кәмәләрҙә балыҡ аулап, яҡын-араны арҡыры-буй айҡап сыҡҡан ҡы-йыу, көләмәс егет Юламанды һағынып хәтерләйме ул?.. Һай, шәп ине бит ул, Юламан. Уның аҡҡош муйынлы, елкәнле йылғыр кәмәһе ауыуҙы ла, батыу-ҙы ла белмәне. Эйе, ҡайҙа ғына барһа ла, диңгеҙ өҫтөндә юл таҡыр, ел ыңғай ине уның өсөн. Ә ба-лыҡтан кәмәнең биле һығылыр ине... Һай, ир ине шул ул, Юламан, ысын ир ине...

Ул ғынамы һуң?! Ә байрамдарҙа ҡойон уйнатып бейегән, тау яңғыратып йырлаған егет кем ине тиһе-геҙ? Шул, Юламан түгел инеме ни!..

Ә һуң мөхәббәт?!. Эйе, яҙмыш уға мөхәббәттең диңгеҙҙәй тәрәнен, тау йылғаһындай ташҡынын, яҙғы күктәй сафын бүләк итте. Аһ бисәкәй, бисә-кәй!..

Ҡыр кәзәһе шикелле теремек, ай кеүек көләс, ҡарлуғас һымаҡ эшсән ҡыҙ ине бит ул уның бисә-кәйе... Көлгәндә, уның көмөштәй саф тауышының йөрәк ярһытып, шыңғырап китеүен, югергәндә, сул-пы суҡтарының нисек һөйөнөп сылтырауҙарын онот-торорлоҡ көс бармы ни донъяла?! Аһ бисәкәй... Ниңә һин үҙеңде йәнеңнән артыҡ күреп һөйгән, һинең өсөн генә янған-көйгән Юламанды шулай япа-яңғыҙ ҡал-дырып киттең?.. Ниңә бөтә уй-хәсрәтте уның бер үҙе-нә ауҙарҙың?.. Аҙ ғына ла йәлләмәнеңме ни һин үҙеңдең Юламаныңды, бисәкәй?!

Эйе, үтә ныҡ яратышып ҡауыштылар, яратышып ғүмер иттеләр шул улар. Ике һөйгән йөрәктең ама-наты итеп Буранша исемле ул үҫтерҙеләр. Матурлыҡ-ты, ирәбелекте Буранша әсәһенән, батырлыҡты, кеше һөйөүсәнлекте атаһынан алғайны шикелле. Эйе, ма-тур ҙа, батыр ҙа, гәҙел дә егет булып үҫте Буранша. Ун алты йәшендә, атаһы кеүек, диңгеҙҙә балыҡтай йөҙә, ерҙә боландай югерә, алыҫтан ыласындай ос-ҡор күрә торған егет булып етеште. Балыҡсылар

уны ла ошо ҡылыҡтары өсөн яраттылар. Юламан ҡарт ауырып-һыҙланып китһә, балыҡ һунарына Буранша менән бергә барырға ашҡынып торҙолар. Эйе, бик иртә ир-егет булып етте Буранша. Ун һигеҙҙә кәләш алды. Йыл да уҙманы, кәләше уға бал ҡорто кеүек теремек, тубырсыҡтай ныҡ ҡыҙ табып бирҙе. Уға Зөлхизә тип исем ҡуштылар...

Шулай, телдән һөйләп, йырҙа йырлап биргеһеҙ ҡыуанысла булды Юламандың тормошо. Һай, һис кенә лә үтмәҫ, үҙгәрмәҫ кеүек ине ләбаһа ул көндәр... Ә күҙ асып йомған арала бөтәһе лә юҡҡа сыҡҡанын тоймай ҙа ҡалынды. Әллә, ысынлап та, төш кенә булдымы икән ул саҡтар?! Эйе, үтә татлы ла, үтә фажиғәле лә төш кенә түгелме һуң былар бөтәһе лә?!

Ун алты йыл?! Тап ун алты йыл. Зөлхизәгә ул саҡта бары ике генә йәш ине. Хәҙер — ун һигеҙ!.. Күпме ваҡыт үтеп киткән! Ә йөрәктең яраһы һис кенә лә уңалмаған... Эй-й, әгәр йөрәкте ҡулға алып ҡарарға мөмкин булһа ине... Унда нисәмә яранан ошо көндә лә ҡан һауып тороуын күреп булыр ине... Ярай әле йөрәкте ҡулға алып ҡарап булмай. Ярай әле берәүҙең йөрәк яраһы икенселәргә күренеп тормай. Юҡһа, был донъяла кеше йөҙөнән ҡыуаныс-йыуаныс тигәнден эҙен дә күреп булмаҫ ине... Бер ҡасан да йылмая алмаҫ ине әҙәм балаһы... Һай, ҡот осҡос булыр ине ул саҡта йәшәүе.

Юламан ҡарттың бөгөнгөләй хәтерендә: ул көндә лә тап ошондай тымыҡ, томороҡ көн ине. Диңгеҙ өҫтө, ҡараһыу күк төҫкә инеп, ҡыҙҙырылған таба шикелле, ипкен бәреп ята. Тоҙло эҫе пар, һауаға күтәрелеп, тамаҡҡа һыҡый. Алыҫта, офоҡ һыҙығында сигелгән бәйге һөлгөләре шикелле, ҡыҙғылт һары болоттар хәрәкәтһеҙ аҫылынып тора... Ҡапыл ауыр күтәреүҙән биле биртенеп ҡуҙғала алмай ятҡан Юламан ҡарттың күңеленә хафалы уйҙар килә.

— Әллә, улым, бөгөн диңгеҙгә сыҡмайһығыҙмы? — ти Юламан, — Ел-Дауыл ҡуҙғалып китмәгәйе. Үтә ныҡ ҡыҙҙыра бит, балам!..

Буранша йәштәргә хас ғәмһеҙлек менән көлә.

— Атай, әлдә өйҙә һин ҡалаһың әле. Ары-бире булып, беҙ ваҡытында ҡайта алмаһаҡ, ҡатын, бала-

сағаны йыуатырға кеше бар, — тип уйынлы-ысынлы мәрәкәләй.

— Ысын дабаһа, — тип күтәрмәләй балыҡсы Ғилман. — Минең биш бала. Бишеһе лә кескәй. Аҡыл өйрәтер кеше юҡ. Һин, Юламан ағай, минең балаларға ла күҙ-колаҡ булырһың инде.

— Буранша менән, кәрәк икән, дауылды ла ауыҙлыҡлап була, — тип ҡыйыу раҫлай Ирьегет. — Сыҡмаған дауылды көтөп ятып булмаҫ.

Юламан ҡарт ни өсөндөр Ирьегетте артыҡ ярата. Хөрмәт итә. Бығаса уның менән бергәләп ауыр һынау үтеп ҡарамаһа ла, уға үҙенә ышанған кеүек ышана. Шуға күрә, Ирьегет тә китеү яғында булғас, ҡаршы килмәй.

«Ирьегет Бураншаны яңғыҙ итмәҫ. Бәлә-ҡазаға юлыҡҡанда ташламаҫ. Улар бит йән дуҫтар...» тип уйлай. Ысынлап та, Ирьегет менән Бураншаны ун йәш айырып ятһа ла, улар, йәштәштәр кеүек, яҡындар. Уларҙың ҡатындары әхирәттәр ине шул. Байрам да, кәсеп тә бергә ине уларҙың. Ирьегеттең ҡатыны баланан ҡапыл ғына үлеп киткәс, уларҙың ғаилә яҡынлығы тағы ла артҡан һымаҡ ине. Ирьегеттең ун йәшлек улы Аҙнағол хәҙер бөтөнләй тип әйтерлек Бураншаларҙа була. Бураншаның ҡатыны уны Зөлхизәһендәй яҡын күрә. Бергә ашата, бергә йоҡлата, бергә йыуындыра тигәндәй. Ирьегет менән Буранша уйынлы-ысынлы бер-береһен «ҡоҙа» тип йөрөйҙәр. Хатта Зөлхизәнең ҡолағын Аҙнағолға тешләтеп тә ҡуйғандар. Тимәк, ысынлап уҡ ҡоҙа ла булышҡандар. Ғүмерҙәре булып, балалары ир етһә, йола буйынса Зөлхизә мотлаҡ Аҙнағолдоҡо булырға тейеш... Эйе, ғүмер булһа, балалар ир етһә...

Бына Бураншалар китергә йыйынып бөтә.

— Ярай, һеҙҙенсә булһын, — тип килешә Юламан ҡарт. — Юлығыҙ уң булһын.

— Амин! — ти Буранша. Балыҡсылар ашығып диңгеҙ ярына юнәләләр.

Бураншаны ул көндө яр буйына хәтле әсәһе, кәләше, ҡыҙы оҙатып бара. Юламан ҡарт, биленән ҡуҙғала алмағанлыҡтан, түшәктә ятып ҡала. Аһ, әгәр ул Бураншаһын ошо көндө мәңгелеккә оҙата-

һын алдан белһә ине... Имгәкләп булһа ла диңгеҙ буйына төшөр, күҙе талғансы, улының артынан ҡарап ҡалыр ине... Юҡ, оҙатмаç, улын диңгеҙгә яҡын да ебәрмәç, уны хатта диңгеҙ буйынан бөтөнләй алыçҡа, Уралына — диңгеҙһеҙ-упҡынһыҙ ерҙәргә алып китер ине... Аһ, ниңә кешегә шундай бәлә-ҡаза, ҡайғы-хәсрәт килерен алдан тойоу һәләте бирелмәгән?!. Ниңә кеше үҙенең һәләкәтен алдан белеп, ҡасып ҡотола алмай икән?..

Бына шулай, көтмәгәндә, тауҙай ауыр ҡайғы емерелеп төштө Юламан өçтөнә. Буранша шул китеүҙән ҡайтманы. Диңгеҙ упҡыны эсендә йотолоп ҡалды бала... Аһ Буранша, Буранша... Бөркөт күҙле, арыçлан йөрәкле Буранша!.. Йәшәү өсөн, бәхет, шатлыҡ өсөн тыуғайның дабаһа һин, Буранша! Йә, уға, икһеҙ-сикһеҙ оло диңгеҙгә, нимә етмәй? Ниңә ул Юламан ҡарттың бәләкәс кенә бәхетен дә күпһенде?! Рәхимһеҙ ҡулдары менән йолҡоп, өҙөп алды? Ҡоласы ни хәтле киң булһа ла, күкрәге тар күрәһең был диңгеҙҙең?! Эйе, тарһынды, күпһенде... Ә ул, Юламан ҡарт, табыныу дәрәжәһенә етеп яратты лабаһа ошо оло диңгеҙҙе. Эйе, яратты. Бөтә ғүмерен, ҡанын, йәнен — бөтәһен дә түкте ул ошо диңгеҙгә. Бер ниҙе лә йәлләмәне... Ләкин диңгеҙҙең ҡомһоҙлоғоноң сиге күренмәне...

Буранша ҡайтманы. Бер аҙҙан уның кәләше Ирьегет менән ҡасып китте... Шунан... әсәһе донъяны ҡуйҙы. Эйе, әҙәм балаһы күтәрерлек ҡайғы инеме ни был?! Күтәрә алманы бисәкәй, күтәрә алманы...

Юламан ҡарттың ҡара ҡурғаш кеүек һәлмәк, көҙгө таш кеүек һалҡын уйҙарын бүлеп, аçта, ҡырсын өçтөндә, үҙәк өҙгөс йыр һыҙыла... Эйе, ҡайғы менән шатлыҡ һымаҡ мәңгелек, яҙ кеүек дәртле, умырзая шикелле йәш, саф йыр.

Толпар атҡа менеп, заяға елеп,
Уҙып бара зауыҡлы йәшлегем.
Күкрәгемдә һөйөү һағыштары,
Күҙҙәремдә тоҙло йәш минең.
Эй-й,
Бүтән йәрҙәр миңә һис кәрәкмәй,
Килерһең бит? Килсе, йәш егет.

Зөлхизә йырлай. Уның ейәнсәре — берҙән-бере йырлай бит был йырҙы!.. Уның йыры. Юламан ҡарттың япа-яңғыҙ, илай-көлә, йырлай-бейей үҫтергән Зөлхизәһе, ҡартатаһының йөрәген телемдәргә телгеләй торған шундай йыр уйлап сығарған хәҙер. Ана, аҫта, Ташһыйырҙың итәгендә, ҡырсын өҫтөндә ултыра ул. Уның балауыҙҙан ҡойоп эшләнгән һын шикелле һығылма зифа аяҡтарын диңгеҙ тулҡындары һаҡ ҡына һыйпап йыуа, сәс толомдарына тағылған көмөш сулпыларҙың елбәҙәк суҡтарын еләҫ елдәр сыңлатып уйнай, ҡояш нурҙары уның ҡуйы, оҙон керпектәренә ҡунып, наҙланып тирбәлә... Ә Зөлхизә, әйтерһең, быларҙың береһен дә күрмәй, бер ни ҙә тоймай. Әйе, бер ни ҙә ҡыуандыра, бер кем дә йыуата алмай хәҙер уны. Бөтә уйы, теләге уның тик бер кешегә генә төбәлгән. Донъяла хәҙер уның өсөн бер генә шатлыҡ бар. Ул — Аҙнағол!.. Ниңә һаман килмәй уның Аҙнағоло?.. Ниңә аҡ елкәндәрен елберҙәтеп, аҡ карап һаман яр ситенә килеп туҡталмай?! Уның йән һөйгәне, айҙан, көндән күркәм Аҙнағоло, сулпан йондоҙҙай балҡып, ниңә һаман уның ҡаршыһына килеп баҫмай?.. Шулай уҡ бер ҡасан да килмәҫме ни инде ул? Ҡилмәһә, Зөлхизә ни эшләр? Бөтә ғүмере шулай зая уҙырмы ни уның?!

Бына шулай уйлап зарыға Юламан ҡарттың ейәнсәре. Әйткәндәй, ысынлап та, зая уҙа лабаһа Зөлхизәнең йәш ғүмере. Уға бит инде ун һигеҙ йәш. Ҡейәүгә сығыр мәле еткән. Буранша үлгәндә, уға бары ике генә йәш ине. Ике йәшлек тәтелдәк ҡыҙ ине ул Зөлхизә. Хәҙер ун һигеҙ... Һай, уҙған ғүмер... Үҫте шул ҡыҙ, үҫте... Эйәле-башлы булырға ваҡыт етте... Ҡескәйҙән ҡолағын тешләткән егете менән яратышалар. Яратыу ғына тип атау Зөлхизәнең йөрәк тойғоһон әйтеп тә бирә алмай һымаҡ. Әйе, ярата бала, өҙөлөп-үлеп ярата. Ғәҙәттә, ҡыҙ, ҡескәй саҡта үҙенең ҡолағын тешләгән егетте түгел, ә икенсе егетте ратһа, ҙур ҡайғы, ауыр фажиғә була торғайны. Атаинәһе йоланы һаҡлап ҡалырға тырыша. Ҡыҙ, был йола тырнағынан ҡотолор өсөн, хатта ҡайһы саҡтарҙа үлемгә барып етә... Ауыр хәл... Әйе, шулай ҙа булған. Була торған хәл. Ә бында бит эш бөтөнләй

киреһенсә. Аҙнағол да, Зөлхизә лә бер-береһен ярата. Ә бына ата-әсә урынына ҡалған Юламан ҡарт был никахты хупһынмай. Улай ғына ла түгел, бөтөнләй ризалыҡ бирә алмай... Һай, Зөлхизә, быныҡ сәбәбен аңлаһа ине... Юҡ шул... Йә, Зөлхизә өсөң йәнен-йөрәген йәлләмәҫ бына тигән егеттәр тулып йөрөй ҙәбаһа!.. Бына тигән балыҡсы егеттәр... Бураншa менән бергә һәләк булған Ғилман мәрхүмдең өлкән улы уның өсөн ете диңгеҙ кисергә әҙер тора бит! Зөлхизә уларҙы күрмәй ҙә, белмәй ҙә, тиерһең. Аҙнағолдан башҡа донъяла егет юҡ уның өсөн. Ике йыл һуҙыла бит инде был тартыш. Ике йыл... Аҙнағолдо тәүтапҡыр күргәндә, Зөлхизәгә ун алты йәш кенә ине. Эйе, тап йырҙа әйтелгәнсә, ун алты йәшендә, бер күреүҙә ғашиҡ булды ла ҡуйҙы шул бала... Ә Юламан ҡарт бала Аҙнағолдо, элек, ун йәшенә хәтле, бында йәшәгән Аҙнағолдо, ярата ине. Гонаһһыҙ сабый итеп ярата, йәлләй ине. Ә хәҙер бына егет Аҙнағолдо тәүтапҡыр күреүҙә үк йәне һөймәне. Улай ғына ла түгел, бөтөнләй күралманы. Ни өсөн? Бәлки, теге ваҡытта, бынан ун алты йыл элек, Ирьегет кескәй Зөлхизәнең әсәһен урлап ҡасып киткән өсөндөр? Һай, оноторлоҡ эш инеме ни был?! Дуҫын һәләкәткә еткергән ҡурҡаҡлыҡтан башлап, инде уның ҡатынын урлап-китеүгә барып еткән боҙоҡ кешегә нисек ләғнәт яуҙырмаҫҡа?! Ошонан һуң Бураншаның батып үлеүенә Ирьегет үҙе үк сәбәпсе булғандыр, бәлки, тип, нисек шикләнмәҫкә?! Инде килеп иренең ҡәбер тупрағы ла һыуынмаҫ элек, балаһын ташлап, сит ир менән ҡасып киткән әсә хаҡында сабыйға ни тип әйтергә?! Нисек итеп уны телгә алырға?.. Һай, ауыр һынауҙар төштө шул Юламан ҡарттың сал башына... Һай, Зөлхизә, быларҙы белһә ине... Белмәй шул. Юламан ҡарт, кескәй баланың йөрәген яраламаҫ өсөн, теге ваҡытта унан әсәһе хаҡындағы дөрөҫлөктө йәшергәйне шул.

— Атайымдың ҡайғыһынан әсәйем дә үлеп киткән, — тип белеп үҫте Зөлхизә. Күршеләр ҙә Юламандың изге ниәтле был серен ҡаты һаҡланы. Инде Аҙнағол бында килеп сығыу менән, был фажиғәле сер ҙә асылыр. Зөлхизәгә инде Юламан ҡарт ни тип

яуап бирер? Үҙенең был хәлде йәшерергә мәжбүр булыуын нисек аңлатыр ул Зөлхизәгә?!

Эйе, башта ул шулай хафаланды. Аҙаҡ, Аҙнағол был хаҡта бер ни ҙә уйламағас, Зөлхизәгә уның үҙ әсәһенә, сабый балаһын ташлап ҡасҡан әсәгә, килен булып барасағын әйтмәгәс, Юламан ҡарттың күңелендә тәүгеһенән дә хафалыраҡ икенсе төрлө шик уянды.

— Тимәк, Аҙнағол ошо хәтле ҙур эште йәшерә ала? Тимәк, ул алдарға, хатта үҙенең йән һөйгәнен алдарға ла һәләтле? Бер алдаған кешенең икенсе тапҡыр ҙа алдамауына ышанып буламы?!

Быйың өҫтәүенә Аҙнағолдоң буйы-һыны, төҫө-башы бөтөнләй тип әйтерлек Ирьегеттең йәш сағына оҡшап тороуы ла Юламан ҡарттың күңелендә уға ҡарата һалҡынлыҡ уятты, күрәһең.

Ирьегет тә тап бына ошо, хәҙерге Аҙнағол кеүек утә һөйкөмлө, мөләйем кеше ине бит. Йомшаҡ, сабыр холоҡло, иғтибарлы, инсафлы... Бер ҡасан да тауыш күтәрмәҫ, кеше һүҙен бүлдермәҫ... Оло һүҙен йыҡмаҫ, кесене рәнйетмәҫ... Йөҙөндә һәр саҡ шундай яҡшы күңелле, тыйнаҡ йылмайыу балҡып торор. Уға бер ҡарауҙа күңелең ireп төшә. Әле уның кешенән арттырып бер ниндәй ҙә яҡшы эштәр күрһәтеүен белмәҫ-күрмәҫ борон уҡ, һин уны башҡаларҙан өҫтөн, айырым күрә башлайһың. Эйе, Ирьегет шундай кеше ине шул... Йә инде, уның йөрәгендә иң яуыз иблес яталыр, кешегә хас яҡтар урғылып тышҡа бәреп сығырға, кешене, хайуандан айырып, яҡтыға, иң ғорур юғарылыҡҡа күтәреп күрһәтергә тейешле ҡаты һынау мәлендә ошо иблес унда өҫтөнлөк алыр ҙа был егет иң бахыр, иң түбән йән булып ҡалыр тигән шик кемдең башына килер ине ул саҡта? Күҙгә күренеп торған бер эш, бер дәлил булмай тороп уҡ, бөтә кеше, хатта күпте күргән Юламан ҡарт та уға батырлыҡ, матурлыҡ өлгөһө итеп ҡарай ине бит. Ғәжәп... Хәҙер уйлаһаң, уға ҡарата бындай ҡарашты уятҡан сәбәпте эҙләп табыуы ла ҡыйын. Шулай уҡ тыйнаҡ, изге күңелле бер йылмайыу менән генә лә баштарын әйләндерергә мөмкинме икән ни кешеләрҙең?! Күрәһең, йылмая белеү ҙә үҙенә күрә бер

һөнәр?! Ләкин кешемен тигән кеше бындай яһалма йылмайыуға мохтажмы ни?! Ә ҡайҙа һуң ул кешемен тигән кеше?! Иң ябай тормошта ла, иң ауыр һынау мәлендә лә үҙенән бигерәк кеше хаҡында уйлай, ә кәрәк икән, һис тә икеләнмәй кеше өсөн баш һала торған ҙур йөрәкле кешеләр ҡайҙа?! Бармы, күпме һуң ундайҙар был фани донъяла?! Аҙ ундайҙар, шулай ҙа бар. Эйе, бар ундай ысын кешеләр! Кеше өсөн йәшәй, кеше өсөн үлә белгән һәйбәт кешеләр бар. Шуныһы ҡыуаныслы...

Юламан ҡарт, кәзә һаҡалын семеткеләп, йөҙө һағыш ҡатыш бәхет менән яҡтырып, уйының ошо нөктәһендә оҙаҡ ҡына туҡтап ултырҙы. Ялбыр ҡаш аҫтынан тәгәрәп сыҡҡан теремек ике бөртөк йәш ергә ағып төшә алмай, тәпегә эләккән сысҡан балалары шикелле, уның битендәге тәрән йыйырсыҡтар араһында аҙашып йөрөнө-йөрөнө лә, парға әйләнеп, юҡҡа сыҡты. Юламан ҡарт, эйелеп төшкән башын юғары күтәреп, ҡояшҡа ҡараны.

— Бына, исмаһам, минең Бураншам шундай һирәк осрай торғандарҙың береһе ине. Кеше булып йәшәне. Кеше булып үлде... Ә Ирьегет?.. Тфү!.. Бөтә ышанысты, бөтә хөрмәтте, ихтирамды аяҡ аҫтына һалып тапаны. Ҡурҡаҡлыҡтан хыянатсылыҡҡа, мәкерлелеккә хәтле тәгәрәп төштө. Эйе, уның теге ваҡытта Бураншаға ярҙам итмәүе, үҙ йәне өсөн ҡурҡыуҙан ғына булғандыр, бәлки... Аҙаҡ?! Бер аҙым... Эйе, ҡурҡаҡлыҡтан хыянатҡа ла, енәйәткә лә бер генә аҙым шул... Ә бит шул кешегә ышана инем. Нисек ышана инем! Инде бөттө. Хәҙер беләм мин, танйым мин хәҙер ундайҙарҙы. Күҙгә кеүек ялтырап үтә күренеп торалар улар хәҙер миңә. Уйлап ҡына ҡара, ысын кешенең йөҙөнә һис кенә лә болот сыҡмаҫ, дауыл ҡупмаҫ булырмы?! Кеше һис кенә лә ҡыҙмаҫ, янмаҫ, көймәҫ булырмы?.. Юҡ инде, мине, йөҙгә етеп килгән Юламан ҡартты түгел, сабыйҙарҙы алдаһын был мәңге көләс фәрештә йөҙҙәр...

Аҙнаголо ла тап Ирьегеттең үҙе бит. Эс-бауырыңа инеп килә. Бер ҡарауҙа һине тамам иретеп, ҡамырҙан йомшаҡ яһап, ҡул ҡаушыртып ҡуя. Йә, ошо кешегә Юламан ҡарт ҡалай итеп ышанып, бирҙән-

бер ейәнсәрен — Зөлхизәһен биреп ебәрергә риза булһын?! Алма ағасынан алыç төшәме ни?

Эйе, яҡшылыҡ булмаç был никахтан, булмаç... Тик нисек һуң Зөлхизәгә быны аңлатырға?.. Ҡире ҡаҡҡыһыҙ ниндәй дәлилдәр менән раçларға күңелдең был ауыр шиген?.. Һай, Зөлхизә, Зөлхизә... Өнһөҙ-һүҙһеҙ генә аңлай алһаң ине һин ҡартатайыңдың күңелен. Ҡайҙа инде?!

Донъяла берҙән-берендең күҙендә йәш, күңелендә һағыш күреү ҙә еңел түгел икән шул... Нимә эшләргә, нисек Зөлхизәне бәхетһеҙлектән ҡотҡарып алып ҡалырға?.. Ә бит ул бәхеттең иң олоһонан олоһона лайыҡлы бала!..

Юламан ҡарт, ҡаты тәьçирләнеп, баш сайҡап ҡуйҙы.

— Һай, килмәгән ере юҡ бит, сабыйҙың. Ул буй... Ул һын. Ул һиҙгер, изге йөрәк... Ғорур, ҡыйыу холоҡ... Бөтәһе лә, бөтәһе лә үҙ урынында... Бер ҡараһаң, ҡартәсәһенең күҙ ҡамаштырғыс һылыу йәшлеген, бер ҡараһаң — баһадир атаһын хәтерләтеп ҡыуандыра бит ул мине... Төптө атаһына оҡшаған. Ике уйлау, ике һөйләү тигәнде белмәç ҡыйыулығы бар шул уның. Үҙе кәрәк тапҡан эш өсөн үҙен һәләк итер, әммә сигенмәç...

Туҡта, ҡасандыр үҙемә лә хас булған ошо мөҡәддәс ҡылыҡты хәҙер Зөлхизәлә күреү мине ҡыуандырыуҙан бигерәк, ҡурҡыта ла түгелме һуң әле?.. Ҡартлыҡ!.. Эйе, Зөлхизәнең тап ошо холҡонан ҡурҡам мин хәҙер. Күпмегә хәтле мин уны тотоп, тыйып тора алырмын?! Оҙаҡҡа хәтлеме ул минең фатихамды көтөп ултырыр?.. Тоям, тиҙҙән был кәртәне ул емереп үтер... үҙенең һәләкәтенә табан туп-тура атлап китер... Юҡ, туҡтата алмам мин Зөлхизәне ул саҡта... Дауыл айҡаған диңгеҙ кеүек ташыр. Бөтәһен дә өҙөп, йолҡоп ырғытыр... Ни эшләй, ниндәй сара күрә алам мин был ҡотороңҡо ярһыуға ҡаршы?!

Юламан ҡарт һуңғы ваҡыттарҙа күңеленә айырыуса тынғы бирмәгән был ауыр һорауға яуап эҙләгәндәй, диңгеҙ өçтөнә оҙаҡ-оҙаҡ йотлоғоп теклəп ултырҙы. Шул саҡ алыçта, бик алыçта, ҡараһыу зәңгәр тулҡындар өçтөндә, аҡсарлаҡ кеүек кенә ел-

пелдәп, елкәнле карап күренде. Күҙ менән күреүҙән бигерәк, күңеле менән тойоп, Юламан ҡарт:

— Аһ! — тип ҡуйҙы. — Аҙнағол... Эйе, был Аҙнағол!..

Юламан ҡарттың арыҡ, тарамыш ҡулдары ҡапыл үтә хәлһеҙләнеп, һалынып төштө. Ҡармаҡ тағылған оҙон аҡ ҡыуал ашыҡмай ғына диңгеҙгә табан шыуышты...

— Ярай, ал инде, ал. Аҡтыҡҡы дуҫым — ҡармағым да һиңә булһын әйҙә, мәкерле диңгеҙ! Һин минең баһадир Буранпамды ла йотҡан диңгеҙ бит. Ҡармаҡ нимә ул! Йәлләмәйем... Бер уйлаһаң, хәҙер миңә кәрәге лә юҡ инде уның... — тип бышылдап һөйләнде Юламан ҡарт. — Йәлләмәйем... Йәлләү ҙә, теләү ҙә бөттө... Аҡтыҡҡы өмөтөм, һуңғы ҡыуанысым — Зөлхизәм менән бергә бөтәһе лә юғалды...

## II

Аҡҡош кеүек ғорур күкрәген киреп, аҡ елкәнле диңгеҙ карабы, һалмаҡ ҡына сайҡалып, ярға яҡынлашты. Тымыҡ, зәңгәр ҡултыҡҡа инеп, Зөлхизә ултырған ҡырсын таңгәленә килеп туҡтаны. Күбәләк кеүек осоп-һикереп торҙо Зөлхизә. Йәш бала шикелле, ҡулдарын сәбәкәйләп, түҙемһеҙләнеп, яр буйлап йүгереп йөрөнө. Бына һыуға кәмә төшөрҙөләр. Үҙе кеүек үк мыҡты кәүҙәле, ҡояш аҫтында янып, баҡыр төҫөнә ингән бер-ике егет менән Аҙнағол кәмәгә төшөп баҫты. Бына кәмә айҡалып-сайҡалып ярға яҡынлашты. Тотош аҡтан кейенеп, билен көмөшлө ҡәмәр менән быуып ебәргән Аҙнағол, ҡоласын киң йәйеп, кәмәлә аяғүрә баҫып килә. Ә Зөлхизә, йүгереп йөрөй торғас, ҡалҡыу бер ташҡа барып менгән. Шунан, бейектән, йән атып ҡарап тора. Эйе, ҡанат ҡына етешмәй уға. Әгәр ҡанаты ла булһа, ул хәҙер осоп барып Аҙнағолоноң яурынына ҡуныр, улай ғына ла түгел, Аҙнағоло артынан ер сигенә лә осоп китер ине. Һай, мөхәббәт, мөхәббәт... Юламандың йөрәге ташмы ни? Аңламаймы ни ул ейәнсәренең хәлен... Нисек итеп артабан да ҡаршы тора алһын ул Зөлхизәнең был шашҡын мөхәббәтенә?!

Юламан ҡарт, күҙҙәрен сырт йомоп, ҡаҡ тау башындағы сал ҡылған шикелле, бәүелеп ултырҙы. Өҙөлөп һағынышҡан йәштәр, ҡыуаныша-көлөшә, ҡая өҫтөндәге өйҙәргә табан юнәлде. Юламан ҡарттың үҙен дә, ялбыр ҡаштары аҫтынан баяғыса мул булып сығып та ергә тама алмай биттәге йыйырсыҡтар араһында аҙашып йөрөгән күҙ йәштәрен дә күреүсе булманы. Һай, йәшлек, һай, «хәтерһеҙ» йәшлек... Аҙнағол менән Зөлхизәнең башынан ғына уҙғанмы ни инде бындай хәлдәр...

Шулай ҙа Юламан көттө. Өмөт итте. Зөлхизәһе Ташһыйыр өҫтөнә күҙ ташлар ҙа:

— Ҡарттай, әйҙә, ҡайтайыҡ! — тип ҡысҡырыр,— тине. Йә инде... быны ише генә өмөттәре ерҙә ятып ҡалғанмы ни уның, Юламандың...

Юламан ҡарт, ташҡа әйләнгән һымаҡ булып, тынып ҡалды. Күптән бире йөҙәтеп килгән бил ауыртыуы ҡуҙғып киткәндәй булды. Аяҡтары ла, арҡалары ла сәнсештерә башланы. Шулай күпмелер ваҡыт үтте. Бына иҫ киткес ҙур ут шарына әйләнгән ҡояшты ашыҡмай ғына диңгеҙ йотто. Уның артынса офоҡҡа хәрәкәтһеҙ болоттарҙан юлаҡ-юлаҡ булып ҡара таҫма тартылды. Тирә-яҡты серле моң баҫты. Ә түбә өҫтөндә күк һаман аяҙ әле. Оҙаҡламай унда кәкере мөгөҙ ай сығып баҫты. Ҡуштан ҡыҙ Зөһрә йондоҙ ҙа, йоҡоһонан һикереп тороп, ай артынса уҡ йымылдап күккә күтәрелде. Ҡарлы тауҙар артынан һалҡынса ел елеп үтте. Тулҡындар ни өсөндөр ҡыуанышып, шарҡылдап көлөшөргә тотондо. Ҡыйғас ҡанатлы аҡсарлаҡтар:

— Ҡайт! Ҡай-т! — тип, әсе ҡысҡырып, Юламан ҡарттың баш осонда әйләнде. Аҙаҡ, ҡартты ҡуҙғатыуҙан өмөт өҙөп, ҡайҙалыр китеп юғалды. Күрәһең, улар ҙа төнгөлөккә ояларына ҡайтты... Эйе, уларҙың да, хатта аҡсарлаҡтарҙың да, ҡайтыр ере, һағынып, яратып, көтөп торған балалары бар. Аҡсарлаҡтарға һис шикһеҙ ҡайтырға кәрәк. Уға, Юламан ҡартҡа, ни өсөн, кем өсөн ҡайтырға хәҙер?! Ә бит ҡасандыр уның да, эйе, Юламан ҡарттың да йондоҙҙай сағыу ҡарашлы бисәкәйе, арыҫлан кеүек көслө, әүлиә шикелле изге күңелле улы — Бураншаһы бар ине! Эйе,

яратыусылары, көтөүселәре бар ине уның да, һай... ҡалай бәхетле булған Юламан ҡарт ул саҡта... Эйе, булған, үткән, бөткән...

Юламан ҡарт, башын боҙ тамсылары шикелле һалҡын, һөйәксел бармаҡтары менән матҡып тотоп, тағы бик оҙаҡ бәүелеп ултырҙы. Йылдар уҙған һайын, тағы ла ауырыраҡ, һыҙлаулыраҡ була барған уңалмаҫ йөрәк яраһын аҡтарып башта Бураншаның, уның артынса бөтә ғаиләһенең һәләкәтен тағы бер ҡат өр-яңынан кисереп сыҡты.

## III

... Ул көн, Буранша һуңғы тапҡыр балыҡ ауына сыҡҡан көн, үтә томороҡ, бөркөү ине... Улар, Бураншалар, балыҡ өйөрө эҙләп, диңгеҙ эсенә алыҫ үк инеп киткәндәр... Шунан оҙаҡламай дауыл ҡупҡан... Буранша кәмәләрҙе елдән ышыҡ ҡултыҡҡа ҡыуған. Шул саҡ Аҙнағолдоң атаһы Ирьегеттең кәмәһен өйөрмә ел, әйләндерә килтереп, ярға яҡын, диңгеҙ эсенән сусайып сығып торған ҡаяға һуҡҡан. Ҡәмә ҡыйралған. Ирьегет менән Ғилман диңгеҙгә ауған... Шул саҡ Буранша батыусыларға ярҙамға ташланған. Тулҡындар менән көрәшеп, ярға табан йөҙә башлаған Ирьегетте үҙ кәмәһенә алған, ә күрше Ғилман был ваҡытта баяғы кәмә бәрелеп ватылған ҡаяға барып йәбешкән. Буранша кәмә менән уға яҡын барыуҙан ҡурҡҡан.

— Дауыл минең кәмәне лә ҡаяға бәреп сайратһа, беҙ ни эшләрбеҙ? — тигәндер инде, балаҡай... Ҡәмәһен ышыҡ ҡултыҡҡа индереп, ишкәкте Ирьегеткә биргән дә:

— Һин беҙҙе ошонда көт. Мин Ғилман ағайҙы йөҙөп барып алып киләйем. Юҡһа, ҡарттың хәле оҙаҡҡа бармаҫ. Уны тулҡын йыуып алып китер, — тигән. Үҙ-үҙен онотоп, ажғырып ятҡан тулҡындарға ҡаршы йөҙөп киткән. Барып еткән... Үлем ҡурҡынысы менән аҡылын-иҫен юғалтҡан Ғилман ҡаяға сат йәбешеп тора икән... Ауыр, бик ауыр булған Бураншаға уның ҡулдарын ҡаянан ысҡындырып алыуы... Буранша уның бер ҡулын ысҡындырып алһа, ул

икенсе ҡулы менән ҡаяға йәбешә, хатта Бураншаның башына һуғып-һуғып ала икән... Ошо тартыш быуынын алғандыр инде, балаҡайҙың... Юҡһа, Бураншa ундай ғына араны йөҙмәгәнме лә, ундай ғына тулҡындарға ҡаршы көрәшмәгәнме... Шулай ҙа ул Ғилманды нисек тә ҡаянан тартып алып йөҙөп киткән бит әле... Ә ҡоторонған аҡбаш тулҡындар уның өҫтөндә бейегән. Берсә бөтөнләй күмеп киткән. Берсә үкерә-үкерә кире сигенгән... Буранша Ғилман ағаһын йөкмәп йөҙгән дә йөҙгән... Бына бер саҡ ҡултыҡҡа тамам яҡын уҡ килеп еткән.

— Тиҙерәк, йәһәтерәк йөҙ, Буранша!.. Күп ҡалманы йөҙөргә!.. — тип һөләйтләгән Ирьегет. Үҙе ярҙамға ташланырға ашыҡмаған. Үҙ йәне өсөн дер ҡалтырап, ышыҡта, кәмәлә ултыра биргән. Тулҡынға ҡаршы яңғыҙаҡ көрәш оҙаҡ һуҙылған. Бына бер саҡ, ҡултыҡҡа килеп еттем генә тигәндә, айырата яман ҡоторонған тулҡын Бураншаларҙы баҫып киткән. Унан шундай уҡ көс менән кире сигенгән... Был юлы инде Буранша менән Ғилман тулҡын өҫтөнә ҡалҡып сыҡмаған... Шулай һәләк булған Буранша...

Йә, оло диңгеҙгә, мәкерле, аяуһыҙ диңгеҙгә, яңғыҙ баһадир ҡалай итеп ҡаршы тора алһын инде?!

Икенсе көндө, дауыл тынғас, Бураншаның кәмәһендә Ирьегет яңғыҙы ҡайтып килде. Эй-й... ул көндәге ҡайғылар...

Бына шулай һәләк булды Буранша. Шунан күп тә тормай, әсәһе донъяны ҡуйҙы... Улын юғалтыу ҡайғыһынан умырзая кеүек бер көндә һулыны ла ергә ятты, мәрхүмә... Аҙаҡ, Бураншаның кәләшен алып, бер төндә Ирьегет ҡасып китте... Ҡурҡаҡтан хыянатсыға әйләнде... Йә, иптәштәренең батып үлеүен үҙ күҙе менән күреп, ярҙамға ташланмай сыҙаған әҙәм аҡтығынан шунан башҡа нимә көтөп була?! Ҡеше тип әйтеп буламы инде уны ошоларҙан һуң?! Ә Юламан ҡарт менән Буранша нисек ышаналар ине бит уға?! Ҡеше икән тип ышаналар ине... Һай, һуҡырлыҡ... Һай, бер ҡатлылыҡ!..

Шулай итеп, донъя бер саҡ Юламан ҡартты төрлөсә сыбыҡларға тотондо... Ай-һай ауыр булды Юламан ҡартҡа... Түҙгеһеҙ ауыр булды... Әммә түҙергә

кәрәк ине... Эйе, ейәнсәре өсөн, ике йәшлек Зөлхизә өсөн, йәшәргә, бөтәһенә түҙергә тейеш ине ул. Һәм ул түҙҙе. Йәшәне. Хатта теремек, алсаҡ, көләс булып йәшәргә, Зөлхизәһен дә шулай итеп үҫтерергә тырышты... Аһ, еңел булманы быны эшләүе... Юҡ, еңел булманы... Белгән, аңлаған кешегә уның аҡ күбек төҫөнә ингән һаҡал-мыйығы ла, ҡараһыу арыҡ битенә төшкән һырҙар ҙа был хаҡта ап-асыҡ һөйләп тора бит.

Шулай ҙа, «түҙгәнгә — түш тейер», тип белмәй әйтмәгәндәр шул боронғолар. Юламан ҡарттың түҙеме лә емешһеҙ ҡалманы. Уның Зөлхизәһе, әкиәттә әйтмешләй, ай үҫәһен көн үҫте. Ете йәшендә инде ул бөтә өй эшен тигәндәй ҡартатаһының ҡулынан алды. Иҙәнен дә йыуҙы, балыҡ һурпаһын да бешерҙе, көлгә күмеп, сөсө икмәк тә бешереп ала белде. Эйе, харап теремек ҡыҙ булып үҫте ул Зөлхизә. Ҡурсаҡ уйнатҡан кеүек уйнап ҡына алып бара ине ул был эштәрҙе. Үҫкән һайын Зөлхизәнең ярҙамы арта ғына барҙы. Ҡартатаһына ҡушылып мурҙа ла үрҙе, ау ҙа бәйләне. Хатта киндер талҡып, ҡартатаһына күлдәк-ыштанлыҡ та һуғырға өйрәнде. Ул ғынамы һуң... Нәҙекәй билдәрен өҙҙөрөп, үҙенә камзул, елән дә тегеп кейҙе. Етмәһә, уйнап-көлөп, йырлап-бейеп, ҡартатаһының күңелен дә асты...

— Эйе... Был шатлыҡты ла күрер көнөм бар икән, — тип ҡыуанды Юламан ҡарт. — Инде әйәлебашлы булып, бәхетле ғүмер итеүен генә күрергә яҙһын, — тип теләне.

Ысынлап та, Зөлхизәгә яусылар күп булды. Башта Юламан ҡарт:

— Ейәнсәрем кемде һайлаһа — минең яратҡан кейәүем шул булыр, — тип кенә яуап бирҙе. Ә Зөлхизә берәүгә лә күңел бәйләмәй, ҡыр кәзәһе шикелле теремек, шаян булып, уйнап-көлөп йәшәй бирҙе.

— Һин, Зөлхизә, яҙғы ҡояш һымаҡ. Бөтә кешегә лә берҙәй көләс ҡарайһың. Тик бер кемде лә иш итмәйһең, — тип үпкә белдерәләр егеттәр.

— Ҡояштың йылыһы бөтә кешегә лә тигеҙ етә бит, — тип мәрәкәләй Зөлхизә уларҙы. — Иң яҡшыһы шул түгелме ни?..

— Кешегә тик үҙенең генә күңелен йылыта торған ҡояш та кәрәк бит әле, һылыу.

— Ҡара һин уны, ҡалай үҙен генә ярата!.. Уйлап ҡара, үҙең өсөн генә ҡояш теләргә лайыҡлыһыңмы әле һин?!

— Зөлхизә менән һуҙ көрәштереп еңә алмаҫһың,— тип өмөтһөҙләнә егеттәр.

Зөлхизәгә ҡыҙыҡ була: ул бәхетле йылмайып, башын ғорур күтәреп йәшәй белә. Ғүмер шулай үтә бирә.

Бына бер саҡ, балыҡсылар ауылы янындағы тымыҡ ҡултыҡҡа, тап бына бөгөнгөләй, аҡ елкәнен елберҙәтеп, диңгеҙ карабы килеп туҡтай. Мыҡты кәүҙәле, һыҙылып киткән ҡара мыйыҡлы, уйынсаҡ һүҙле, үтә һөйкөмлө йәш егет бер нисә егет менән ярға сыға. Аҙнаголдоң тәү килеүе була был. Бынан малай саҡта атаһы менән киткән, хәҙер, егет булғас, ҡайтҡан Аҙнағол. Тик ҡайтыуы нимә өсөн бит?!. Эй-й, ташҡа үлсәйем.

## IV

...Теге ваҡытта Ирьегет, ауылдан ҡасҡас, яҡындағы ҡалаға барып, байға ялланған. Байҙың карабы ла булған. Бай сауҙа менән генә түгел, диңгеҙҙә юлбаҫарлыҡ менән дә шөғөлләнгән. Ирьегет уға был эштә бик ихлас булышҡан. Аҙнағол да, үҫкәс, шул эшкә тартылған. Бара-тора Ирьегет үҙе лә байып, карап хужаһы булып алған. Инде карапты Аҙнағол үҙе йөрөткән. Зөлхизәнең әсәһе байбисә булып ҡалала ғына йәшәгән.

Кешенең байлығы бергә артҡанда, ҡомһоҙлоғо бишкә арта тигән һүҙ дөрөҫтөр ул. Бына шулай, уңлы-һуллы юлдар менән ҙур байлыҡҡа ирешеп, шәп итеп йәшәп ятҡанда, бер саҡ теге ваҡытта ташлап киткән ер өйө Ирьегеттең иҫенә килеп төшкән.

— Ҡарағыҙ әле, бер тинһеҙ юғалды бит мал! — тип ҡысҡырып ебәргән ул, ҡото осоп. — Өй ныҡ-ныҡ ине. Таштан бурап эшләнгәйне. Емерелмәгәндер. Һис кисекмәҫтән барып, берәйһенә һатып китергә кәрәк.

— Әйтмә лә, — тип күтәрмәләгән бисәһе. — Һатырға кәрәк. Тин янына тин артһын!..

— Ярар. Сауҙа менән сит ҡалаға китеп барышлай, үҙем туҡталып, һатып китермен,— тигән Аҙнағол. — Бер ыңғайҙан тыуған йортто ла күрермен...

Бына шул маҡсат менән килеп сыға бында Аҙнағол тәүҙә. Шунда ул аңғармаҫтан Зөлхизәне осрата. Шунан һуң Аҙнағол бында һәр үткән-һүткәндә туҡтай башлай. Хатта бер килеүендә ысын күңелдәнме, былай һынау өсөн генәме, Юламан ҡартҡа:

— Олатай, мин бында ҡайтып, һеҙҙең кеүек балыҡсы булып йәшәргә теләйем. Һин быға нисек ҡарайһың? — ти.

— Мин кәңәш бирмәйем. Ҡанаты бар саҡта ыласын осорға тейеш. Бында, ҡая башында, минең кеүек ҡанаты ҡайырылғандары ғына ултыра уларҙың... Ундайҙары ла, үҙҙәрен ҡаяға беркетеп тотҡан бәй өҙөлөү менән, оса алмаһалар ҙа, баштүбән ташланып, донъя ҡуялар... — тип кинәйәләп яуап ҡайтара Юламан ҡарт.

«Ә һин ыласынмы, ҡоҙғонмо, әлегә әйтеүе ҡыйын...» — тигән фекерен эстән генә уйлап, баш сайҡап ҡуя.

— Һүҙең хаҡ, олатай, — тип килешә Аҙнағол. Зөлхизәнең йондоҙҙай шат күҙҙәрен йәш бөркөй. Нисек иламаһын, Аҙнағолон үҙ янында ғына тотҡоһо килә бит уның.

— Һүҙең бик хаҡ! — тип ҡабатлай Аҙнағол.— Мин диңгеҙҙә йөҙөргә тейеш. Тик ул саҡта, олатай. Зөлхизәне һин миңә биреп ебәрерһеңме һуң? Мин бит уны яратам. Мин уны ҡалаға алып ҡайтып китәм.

«Ярай әле, бәләкәс саҡта Зөлхизәнең ҡолағын тешләгән булыуын белмәй... Әйтмәгәндәр... Юҡһа, ҡаршы тороуы ҡыйын булыр ине...» — тип уйлай Юламан ҡарт. — Әлдә был хаҡта Зөлхизә лә белмәй... — тип ҡыуана. Шулай ҙа үҙе Аҙнағолға ни тип яуап ҡайтарырға белмәй аптырабыраҡ тора. Аҙнағол сабырһыҙлана.

— Мин Зөлхизәне яратам. Унһыҙ йәшәй алмайым, — тип ныҡыша.

Зөлхизәнең әле генә моңайып мөлдөрәгән күҙҙәре инде Зөһрә йондоҙҙай тоҡанып китә.

«Мин дә яратам... Мин дә... унһыҙ йәшәй алмайым, картатай...» — тип ялбара был ҡараш.

Юламан ҡарт йәштәргә алмаш-тилмәш ҡарап тағы бер аҙ өндәшмәй ултыра. Зөлхизәнең бөтә йөрәктән ғашиҡ булыуына төшөнә. Аҙнағолдоң мөхәббәтенә ышанмай.

— Зөлхизәне, Аҙнағол, мин һиңә биреп ебәрә алмайым, — ти. — Һис тә ризалығым юҡ, аңлайһыңмы, риза түгел!..

Аҙнағол ҡайтып китә. Зөлхизә моңға бирелә. Һөйгәненә арнап йыр сығара. Шул йырҙы, ҡарышҡан шикелле, һәр саҡ картатаһына ишеттереп йырлап ҡына йөрөүсән булып китә.

„..Эй-й,
Бүтән йәрҙәр миңә һис кәрәкмәй,
Килерһең бит? Килсе, йәш егет.

Шул һөйләшеүҙән һуң Аҙнағол тағы бер нисә тапҡыр килә. Юламан ҡарт «ризалығым юҡ!» тиеүҙән башҡа һүҙ таба алмай. Эйе, башҡа һүҙ табырға мөмкин түгел шул был урында. Теләһәң дә, мөмкин түгел... Ахыр, Аҙнағол килмәҫ була. Бер йыл үтә. Аҙнағол күренмәй.

— Бәләһенән баш-аяҡ, — тип ҡыуана Юламан ҡарт. — Ҡәләш алғандыр. Үҙенең тиң-тошон тапҡандыр. Зөлхизә лә үҙ кешеһен табыр... Бәхетле булыр.

Ләкин эш Юламан ҡарт уйлағанса барып сыҡмай. Зөлхизә башҡа бер егеткә лә ҡарамай. Аҙнағолон көтөп, диңгеҙҙән күҙен алмай, моңайып йырлап йөрөй бирә.

— Былай булһа, бала һарыға һабышыр,— тип көйөнә хәҙер Юламан ҡарт. — Инде Аҙнағол килһә, ҡаршы тороп булмаҫ. Был никахтың аҙағы хәйерле булып бөтөүенә ышанысым булмаһа ла, кире ҡаҡмам бүтән... Яҙғаны шул булһа, ҡарышып ҡайҙа бараһың, — ти.

Юламан ҡарттың был уйын һиҙгән кеүек, бына Аҙнағол улар тупрағына тағы аяҡ баҫты. Һай, ҡан-

дай оло бәхеткә тарыны бөгөн Зөлхизә. Быны күрмәҫкә, аңламаҫка ташмы ни Юламандың йөрәге... Белмәйме ни ул мөхәббәтте еңер көстөң юҡлығын... Эйе, мөхәббәткә нимә ҡаршы тора ала?! Бына бит. картатаһын да онотто... Ә бит ул, Зөлхизә, сикһеҙ һиҙгер йөрәкле, иғтибарлы бала... һөйгәнен күреү ҡыуанысынан бына онотто ла ҡуйҙы. Хатта ул көтмәй ҙә, буғай, картатаһын... Эйе, Юламан ҡарт, ахыр килеп, берҙән-бер хазинаһынан да ҡолаҡ ҡаҡты, күрәһен... һай, яҙмыш... һай, тормош!..

Шулай ҙа ҡайтырға, Зөлхизәне һуңғы тапҡыр күреп ҡалырға кәрәк... Туҡта әле, ни өсөн һуңғы тапҡыр? Ҡыҙ бала кейәүгә китмәҫ тә, киткәс, ҡунаҡҡа ҡайтмаҫ булырмы? Өмөтһеҙ кеше түгел ине ләбаһа Юламан!.. Ҡартлыҡтыр инде, ҡартлыҡтыр. Хәйер, әйтеүе генә анһат: һикһән йәш — һикһән йыл көрәш... йәшәү өсөн көрәш... һай-й... Әйтерең генә бармы?!

Юламан ҡарт таяна-тотона урынынан торҙо. Имгәкләп тигәндәй Ташһыйыр өҫтөнән төштө. Ҡулдарын артҡа ҡуйып, үтә ҙур һаҡлыҡ менән ҡая ҡуйынындағы ер өйөнә табан үрмәләне. Был уның гүмерендә тәүтапҡыр ҡармаҡһыҙ һәм балыҡһыҙ ҡайтыуы ине.

— Хәйерле булһын... — тип бышылданы ул, ҡалтыранған, ҡапыл нык ҡартайып киткән тауыш менән. — Ахыры хәйерлегә булһын...

Уның был теләге, әлбиттә, үҙенең буш ҡул менән ҡайтыуынан бигерәк, Зөлхизә менән Аҙнағолдоң мөнәсәбәтенә юнәлгәйне.

## V

Өс көн, өс төн туй барҙы. Дүртенсе көндө Аҙнағол:

— Сауҙаны шунан да оҙаҡҡа туҡтатып тороу кеҫәгә нык һуғасаҡ,— *тип белдерҙе.* Зөлхизәнең бөткөһөҙ бәхет менән нурланған күҙҙәренә тағы моң юғерҙе.

— Ә мин?! Мине ташлап та китәһеңме ни, йәнем?! — тип ялыныс менән ҡараны ул Аҙнағолға.

— Һине лә үҙем менән алып китәм, һылыуым, — тине Аҙнағол, Зөлхизәне күкрәгенә ҡыҫып. — Сит илгә алып китәм. Унда мин һине алтын-көмөшкә мансырмын, атайым янына ҡайтҡанда, һин батша ҡыҙы кеүек биҙәнгән-төҙәнгән булырһың...

Бөтә туй буйына бер һүҙ өндәшмәй йоҡомһорап ултырған Юламан ҡарт, йылан саҡҡан кеүек тертләп, уянып киткән һымаҡ булды. Ҡара ҡурғаш кеүек ауыр ҡараштарын йәштәр яғына йүнәлтте.

— Аҡылдан яҙҙығыҙмы әллә һеҙ?! — *тип* ҡото осоп ҡысҡырыуҙы аңланы Зөлхизә был ҡараштан. Сөнки ул ҡартатаһының: «диңгеҙ бик мәкерле, һылыу ҡатын икән. Шуға ҡатын-ҡыҙҙы һис тә яратмай икән. Әгәр берәй ҡатын баҙнат итеп, карапҡа ултырһа, диңгеҙ карапты батыра. Йоланы боҙған теге ҡатынды ырғытһаң ғына, карапты ебәрә икән», тип һөйләгәнен йыш ҡына ишеткәне бар. Бығаса бер ҡатындың да әле был йоланы боҙорға баҙнат итмәүен дә белә. Эйе, белә. Тик уның йөрәге быны аңлауҙан баш тарта. Аҙнағоло бар ерҙә быңдай ҡырағай йоланың хөкөм һөрөүенә ышана алмай. «Диңгеҙ бит инде ул, һәр саҡ ҡоторonoп, караптарҙы ла батырып тора. Ҡатындар ултырмаһа ла, баталар караптар. Унда кем ғәйепле? Ниңә ул саҡта диңгеҙгә ҡорбан ташламайҙар? Ниңә ҡатын кеше карапта булған саҡта диңгеҙ ҡоторһа, мотлаҡ ул ҡатынды диңгеҙгә ташлайҙар? Уны ташламаһалар ҙа, ваҡыты еткәс, диңгеҙ тынып ине ләбаһа! Мәңге шаша алмай ҙабаһа ул», — тип йәберһенеп уйлана Зөлхизә. Ләкин был уйын бер кемгә лә белдермәй. Киреһенсә, иҫ киткес ғәмһеҙлек менән кинәнеп көлә генә.

— Хафаланма, ҡарттай, — ти. — Диңгеҙбикә мине һорамаҫ!

— Һораһа ла, бирмәм! — тип ҡырт киҫеп раҫлай Аҙнағол.

— Һай, ышана алһам ине мин, егет, һинең һүҙҙәреңә... — тип ауыр ыңғырашып ҡуя Юламан ҡарт. Унан был шиген уйҙа дауам итә:

«Иң ауыр, иң кәрәк саҡта, атайың һымаҡ, кеше хаҡында түгел, ә үҙеңдең бик бәләкәс, төҫһеҙ-еҫһеҙ генә йәнең хаҡында нығыраҡ уйлауса булып сыҡ-

маһаң ярар ине лә бит... Телдән батырҙар күп тә бит ул... Йөрәктән батырҙар һирәгерәк осрайҙар шул...»

Зөлхизәнең әсәһе хаҡындағы дөрөҫлөктө Аҙнағолдоң ошоғаса асмай йөрөүе лә Юламан ҡарттың шиген арттыра.

«Ярай, теге ваҡытта мин Зөлхизәнең күңелендә үҙ әсәһенә ҡарата насар ҡараш уянмаһын тигән теләк менән уның ике йәшлек ҡыҙын бер ҡартҡа ташлап ҡасып китеүен әйтмәгәнмен, ти... Бәлки, дөрөҫ тә эшләмәгәнмендер. Ул саҡта, әйтәйек, минең ҡайғы менән иҫәңгерәгән башым хата уйлаған да булһын, ти. Әммә хәҙер Аҙнағол ни өсөн быны йәшерә? Уның был хәлде белмәүе мөмкин түгел. Аҙнағол ул саҡта ун йәшлек малай ине бит. Белә. Бик яҡшы белә. Әйтмәй. Һөйгән кешеләр араһында сер булыуы мөмкинме?.. Һай, Зөлхизә, Зөлхизә... Бер ни ҙә аңламайһың, бер ни ҙә күрмәйһең, балаҡай. Мөхәббәт һинең күҙеңә пәрҙә япҡан шул, ҡалай итәһең? Ни ҡылаһың?!»

Зөлхизәне оҙатыр өсөн, яр буйына бөтә ауыл йыйылды. Аяҡтан баҫҡан, ултырып-шыуғандың бөтәһе лә был ғәжәп ваҡиғанан ситтә тороп ҡалырға теләмәне. Ҡаты йоланы боҙорға, үҙен-үҙе Дингеҙбикә тигән мәкерле һылыуҙың упҡынлы ҡосағына ташларға, үҙ-үҙен үлемгә дусар итергә уны мәжбүр иткән мөхәббәт тигән тылсымлы көстөң серенә төшөнөргә тырышты. Шомло ҡыҙыҡһыныу менән Зөлхизәнең артынан күҙәтте.

Был көндө күк йөҙө үтә зәңгәр, тәрән, ҡояш нурҙары үтә иркә, ә диңгеҙ өҫтө, ынйы һибелгән беләҙек ҡашы шикелле, семәкәйләнеп, ғәҙәттән тыш шат йымылдап ята ине.

«Аһ, мәкерле йән... Беләм, аңлайым мин һине... һинең шәфҡәтһеҙ ҡыуанысыңды!.. — тип уйлай Юламан ҡарт, күҙен диңгеҙ өҫтөнән ала алмай.— Беләм... Тик Зөлхизәгә генә мин быны аңлата алмайым... Аңларлыҡ түгел инде ул быны...»

Зөлхизә лә бөгөн айырата һылыу, сиктән тыш шат. Уның йөҙөндә балҡыған бәхет, мөхәббәт нуры күҙҙәрҙе сағылдыра, күптәрҙе телһеҙ ҡалдыра, табыныу дәрәжәһенә еткән хөрмәт һәм һөйөү уята. Шу-

ға, ахыры, уның мәңгелек йоланы боҙоп, карапҡа ултырып китеүен бер кем дә ҡысҡырып, телдән әйтеп ғәйепләй алмай. Күңелдән ғәйепләүселәр ҙә уның йөҙөнә бер ҡарау менән был хаҡта оноталар. Эйе, сихри нур түгелә бөгөн Зөлхизәнең йөҙөнән. Ул бәхетле. Ул һөйгәне артынан бер түгел, ете диңгеҙ кисергә, ете ҡат ер аҫтына төшөргә, кәрәк икән, хатта уның менән бергә, уның өсөн ете ҡат үлергә лә әҙер.

Бөтә булған ваҡлыҡты, түбәнлекте, икеләнеү-шикләнеүҙе белмәй үҫкән саф һәм ғорур йөрәкле кешеләргә генә хас рәүештә үҙ-үҙен онотоп, ярһып, дәртләнеп һөйә ул. Уның өсөн Аҙнағолдан башҡа тормош та, йәшәү ҙә юҡ. Унан башҡа тыуыу ҙа, үлеү ҙә, хатта Зөлхизәнең үҙе лә юҡ. Ай ҙа, ҡояш та, сәскә лә, диңгеҙ ҙә Аҙнағол булмаған урында юҡҡа сыға. Шулай булғас, ҡалай итеп, ни өсөн тороп ҡала алһын һуң ул Аҙнағолонан! Ҡалай итеп, әллә ниндәй ҡырағай йолаларҙың быуаттар төпкөлөнән килгән шомло өнөнә ҡолаҡ һалһын ул?! Ҡалай итеп үҙ бәхетенән үҙе ҡул һелтәһен?! Мөмкин түгел. Эйе, быны булдыра алмай Зөлхизә.

Шулай, Зөлхизә был ерҙә, ҡатын-ҡыҙҙарҙан тәүгеләрҙең тәүгеһе булып, мәңгелек тип иҫәпләнгән шомло йоланы емереп үтте. Башын ғорур күтәреп, көндәй балҡып, карапҡа табан атланы... Кем белә, бәлки үлемһеҙлеккә табан атлауы ошо булғандыр уның, Зөлхизәнең...

Хушлашыу бөтөнләй тип әйтерлек һүҙһеҙ булды. Был оҙатыуҙан кешеләрҙең күңеленә ғүмерлеккә яҙылып өс нәмә ҡалды: бының тәүгеһе — Зөлхизәнең йөҙөндә сағылған ғорур тантана, һөйөү-һөйөлөү шатлығы ине. Икенсеһе, Юламан ҡарттың күҙ йәштәрен тыйырға тырышып көсәнеүҙән, таш кеүек ҡатып ҡалған йыйырсыҡлы, арыҡ йөҙөндәге иҫ киткес тәрән ҡайғы һәм өмөтһөҙлөк булды. Аһ, Зөлхизә күрһә, аңлаһа ине был ғазаплы йөҙгә нимәләр яҙылғанын!.. Бәлки, хәтәр юлға сығыуҙан баш тартырлыҡ көс тә таба алған булыр ине ул үҙендә... Ҡайҙа һуң... Мөхәббәт уның йөрәген генә түгел, күҙен дә бәйләгән ине бит...

Кешеләрҙең хәтеренә һис тә юйылмаҫ өсөн инеп урынлашҡан өсөнсө нәмә — аҡ елкәнле ҙур караптың һалмаҡ, яй ғына сайҡалып, үтә шат йымылдап ятҡан, зөбәржәт диңгеҙ өҫтөнән тауыш-тынһыҙ ғына шыуа барып, әкрен генә ирей-ирей күҙҙән юғалыуы булды. Аһ, ҡандай тылсымлы, сихри күренеш ине был... Оҙатыусылар хатта аҡ елкәндәрҙең күбәләк хәтле генә ҡалып, һыу өҫтөндә һуңғы тапҡыр елпелдәп үтеүенән һуң да бик оҙаҡ телгә килә алмай торҙолар. Эйе, ауыр, бик ауыр тойғо ҡалдырып китте был карап. Кешеләр, мәйет оҙатҡандай, шомло тынлыҡ эсендә өйҙәренә таралды. Диңгеҙ ярында Юламан ҡарт япа-яңғыҙ ғына ултырып ҡалды.

---

Ҡара ҡурғаш кеүек тос, сирҡаныс минуттар, сәғәттәр бер-береһен ҡыуып үтә торҙо. Төш етте. Ҡояш, түбә өҫтөнә баҫып, рәхимһеҙ ҡыҙҙырҙы. Аяҡ аҫтындағы ҡырсынташтары, баҙлаған ҡуҙға әйләнеп, табанды ҡыҙҙырырға, көйҙөрөргә кереште.

Юламан ҡуҙғалманы.

Бына бер саҡ, көн буйы ҡыҙҙырыуҙан хәлдән тайған ҡояш, офоҡҡа ҡанлы шаршау ябып, диңгеҙгә сумды.

Юламан ҡуҙғалманы.

Ергә төн таралды. Диңгеҙ ҡараһыу күк шәл бөркәнде. Ярты ай, бер көтөү йондоҙҙарын эйәртеп, диңгеҙ төбөнә төшөп ятты. Көндөҙ ҡуҙға әйләнеп, табанды көйҙөргән ҡырсынташтары хәҙер, боҙ энәләр булып, Юламан ҡарттың табанына ҡаҙалды.

Ҡарт ҡуҙғалманы.

Таң яҡынлашты. Шаян йондоҙҙар тағы ярты айға эйәреп, берәм-берәм диңгеҙ төбөнән сыҡтылар ҙа күккә менеп йәшенделәр. Сығасаҡ ҡояш юлына ҡыҙыл һары балаҫ түшәлде. Ергә тағы көн тантанаһы килергә йыйынды.

— Юҡ, бөгөнгө ҡояш минең өсөн түгел. Ҡарай алмайым, күрә алмайым мин уны бөгөн... — тип бышылданы Юламан ҡарт.— Унын ғәмһеҙ йымылдауы ла, диңгеҙ, мәкерле, ҡомһоҙ диңгеҙ, һинең ҡояш нуры аҫтында үтә сағыу балҡыған йәнһеҙ матурлығың

да минең өсөн түгел хәҙер... Эйе, Диңгеҙбикә, мин һиңә мәңгелек ғашиҡ инем. Инде һин минең мәңгелек нәфрәтемде яуланың... Бөтә ҡыуанысымды, йыуанысымды, барлыҡ өмөтөмдө йотоп бөттөң дә, миңә тағы йымылдап, йылтырап ятмаҡсыһыңмы?! Әйҙә, белмәгәндәр һоҡланһындар һинең был яһалма мөләйемлегеңә... Ә мин күралмайым. Йәнем-тәнем менән күралмайым!.. Ишетәһеңме һин мине, мәкерле Диңгеҙбикә!..

Юламан ҡарт тағы, Аҙнағол килгән төндәге кеүек, таштарға тотона-имгәкләй урынынан торҙо.

Һай, ауыр, ҡандай ауыр икән дәбаһа унын һөйәктәре... Әгәр ул бында, диңгеҙ ярында, мәңгелеккә йоҡлап ҡалһа, ауылдаштарына уны күтәреп алып ҡайтыуы, ҡая өҫтөндәге ҡәберлеккә мендереүе бик ауыр буласаҡ табаһа... Күршеләрҙе, һәйбәт кешеләрҙе улай ыҙалап китергә яраймы ни?! Аяҡ йөрөгәндә, өйгә ҡайтып йығылырға кәрәк...

Ул, аҡтыҡ көсөн йыйып, ҡаяға үрмәләне. Ҡояш ҡалҡмаҫ элек ер өйөнә ҡайтып, һалҡын түшәгенә ауҙы.

Шул ятыуҙан ул ҡабат торманы. Күршеләре, алмаш-тилмәш инеп, унын хәлен белделәр. Аш-һыу алып килделәр. Ауыл хәлдәрен, балыҡсыларҙың ниндәй табыш менән ҡайтыуын, кемдең улы-ҡыҙы тыуыуын, кемдең кәзәһе бәрәс һалыуын һөйләп сыҡтылар. Ләкин Юламан ҡарттан бер генә һүҙ ҙә ишетә алманылар. Ул ашаманы ла, йоҡламаны ла, һөйләшмәне лә. Унын ялбыр күк ҡаштары аҫтына йәшеренгән аҡыллы ҡара күҙҙәрендә тик бер генә һорау үлмәй йәшәне:

«Зөлхизә ни хәлдә икән?!»

Ә был ваҡыт эсендә диңгеҙ өҫтөнән Зөлхизәнең иҫ киткес бәхетле һәм ҡот осҡос фажиғәле минуттарҙан торған ҡыҫҡа ғына ғүмер юлы балҡып уҙҙы.

## VI

... Көҙгө кеүек йылтырап хәрәкәтһеҙ тынып ятҡан зәңгәр диңгеҙ бушлығында яңғыҙ ҡарап йөҙә. Аҡҡош кеүек ғорур кирелеп, елкәндәрен наҙлы елбер-

ҙәтеп йөҙөп бара ул. Аҙнағол Зөлхизәнең тулҡынланып торған оҙон йыуан толомдарын һүтеп тарата. Ебәк кеүек йомшаҡ ҡара сәстәр, Зөлхизәнең зифа буйын тотош ҡаплап, аҡ ебәк күлдәк өҫтөнә ҡара күләгә ташлай.

— Һыу һылыуы! — тип һоҡлана Аҙнағол. — Һыу һылыуы бит һин, Зөлхизә!.. Тик һиңә алтын тараҡ ҡына етмәй. Мин һиңә, ошо сит ҡалаға барып еткәс тә, алтын тараҡ алып бирәсәкмен, аңлайһыңмы, һылыуым!

Зөлхизә, сабый бала кеүек ҡыуанып, ғашиҡтәргә генә хас вайымһыҙлыҡ менән Аҙнағолдоң муйынына һарыла.

— Йәнем, кәрәкмәй алтын тараҡ миңә. Һыу һылыуы булғым килмәй минең. Мин бит тау ҡыҙы. Тау ҡыҙы итеп кенә ярат һин мине, Аҙнағол!..

Аҙнағол Зөлхизәне һөйә-үбә күтәреп алып йөрөй.

— Хаҡ һүҙ, һин тау һылыуы, Зөлхизә!.. Минең һылыуым. Тау үҙе лә, анауы балҡып торған ҡояш та, ай ҙа, йондоҙҙар ҙа минеке хәҙер. Улар ҙа минең өсөн генә яратылғандар. Яҙмыш үҙе уларҙы һинең менән бергә ҡушып миңә бүләк итеп бирер өсөн ятратҡан... Диңгеҙгә ҡара, Зөлхизә, ул да минең өсөн зәңгәр тынлыҡҡа сумған. Еләҫ талғын ел дә минең елкәндәремде тирбәтер өсөн йәшәй бөгөн. Был донъяла хәҙер минең өсөн йәшәмәгән бер генә матурлыҡ та, бер генә байлыҡ, муллыҡ та юҡ... Тоям, ул һәр саҡ шулай булыр... Бәхет, шатлыҡ, байлыҡ, матурлыҡ тигәндең бөтәһе лә минең ғүмерлек юлдашым булыр... Сөнки минең янымда ерҙең иң һылыу ҡыҙы — Зөлхизәм, һин бар...

— Һөйлә, бер туҡтамай һөйлә, Аҙнағол,— ти Зөлхизә, бәхеттән шашып. — Аңлайһыңмы, йәнем, минең йөрәгем хәҙер тылсымлы скрипка кеүек. Һинең һәр бер һүҙең уның иң нескә, иң нәфис ҡылдарына сиртеп тирбәлтә. Һинең тауышыңдан мин үҙем дә тотош бер моңға, сихри бер моңға әйләнәм һымаҡ... Аңлайһыңмы, беләһеңме һин был моңдоң исемен?.. Беләһең... Мөхәббәт!.. Әй-й, ниндәй татлы, ниндәй наҙлы икән был моң!..

... Төн. Күк тә, диңгеҙ өҫтө лә ҡоторонҡо өйөрмә-

гә әйләнеп бергә тоташҡан. Ҡара тулҡындар ауыр йөк тейәп, тыуған ярҙарға ҡарай сыҡҡан яңғыҙ карапты, ҡаҙ ҡауырһыны шикелле еңел ҡаҡҡылап, ҡыуып йөрөтә. Елкәндәрҙе ҡоторған дауыл йолҡҡолап ырғыта. Ҡарап тирәһендә, аждаһалай урғылып, тулҡындар ҡайнай. Нисә көн буйы был аяуһыҙ һәм ҡомһоҙ тулҡындарға ҡаршы көрәшеп, аҡылдан яҙыу дәрәжәһенә еткән ишкәкселәр өмөтһөҙ ҡараштарын күшеккән тауыҡ себеше хәленә төшкән Аҙнаголға төбәгәндәр:

— Диңгеҙбикә ҡорбан һорай! Күрәһеңме, аңлайһыңмы, изге йоланы боҙған өсөн, ул беҙҙең бөтәбеҙҙе лә һәләк итергә йыйына!.. Йә, хәҙер үк Зөлхизәнде уға биреп, беҙҙе ҡотҡараһың, йә үҙеңде лә уның менән бергә диңгеҙгә ташлайбыҙ!— тип талап итә улар, ҡотороноп. — Йәһәтерәк аҙаҡҡы һүҙеңде әйт!.. Диңгеҙбикә оҙаҡ көтөргә яратмай!..

Үлем ҡурҡыныснан тамам башын юғалтҡан Аҙнагол һүҙһеҙ баш эйә.

— Тимәк, риза?!

— Риза?!

— Ха-ха-ха!.. — тип шарҡылдап көлә ҡара тулҡындар. — Ха-ха...

Ҡырағай ҡыуаныстан тулҡындар, шашынып, карап аша һикереп уйнарға керешә. Йығылмасҡа тырышып, карап ҡолғаһына сат йәбешеп торған Аҙнаголдо, ҡоторонop, тоҙло һыу менән ҡойондора. Ә ишкәкселәр, берен-бере тапай-йыға аҫҡа, Зөлхизә янына, ташлана.

Хәҙер улар Диңгеҙбикәгә ҡорбан бирәсәк... Диңгеҙбикә тынысланасаҡ... Уларҙы йотмаясаҡ. Диңгеҙбикәгә уға үҙе менән ярышырға маташҡан ҡыйыу ҡыҙҙы йоторға ғына кәрәк!.. Ул ҡатын-ҡыҙҙы күралмай!..

... Зөлхизә яңғыҙ. Уны хәҙер танырлыҡ та түгел. Өҫтә алтын уҡалар менән сигелгән ал ебәк күлдәк, ҡолаҡта алтын алҡалар, муйында ынйы-мәрйен муйынсалар. Беләктә, бармаҡтарҙа аҫыл ташлы, фирүзә ҡашлы беләҙектәр, йөҙөктәр... Аяҡта есло дағалы, сәмсәле ситек, башта ынйылы ҡалпаҡ. Аһ, ниндәй ғорур, һылыу һын! Нисек килешә уға был ке-

йемдәр! Әйтерһең, ғүмер буйына ул шулай ғына кейенеп йөрөгән!.. Ысынлап та, Зөлхизәме был?.. Әллә берәй батша ҡыҙымы?!. Әйе, кейемдәргә ҡараһаң, уны Зөлхизә тип әйтеүе ҡыйын. Ә бына ҡыйылып киткән ҡыйғас ҡаштар, аҡыллы, ҡыйыу ҡарашлы яҡты күҙҙәр!.. Бөтәһе лә уныҡы. Әйе, Зөлхизәлә генә ине бит бындай, фәрештәләй, һылыу йөҙ!..

Тышта өс көн, өс төн диңгеҙ ҡотора. Ә Зөлхизәнең йөҙөнә ул бер генә лә үҙгәреш индермәгән. Ул һаман тыныс, бәхетле. Әйе, бер ҡасан да булмаған оло бәхет менән балҡып яна уның йөҙө. Сөнки ул — һөйә. Сөнки ул — ышана.

Диңгеҙҙең ҡотороуы хәҙер сиктән ашты. Ләкин Зөлхизәне был ҡурҡытмай. Аҙнағоло — йән һөйгәне барында уға ниндәй ҡурҡыныс булыуы мөмкин?! Аҙнағоло уны бер ҡасан да, бер кемгә лә йәберләргә бирмәҫкә ант итмәнеме ни?!

— Күҙ ҡарам кеүек һаҡлармын мин һине, һылыуым, — тимәнеме ни ул?! Шулай тине. Мең ҡат ант итте. Зөлхизә белә, ышана, уның Аҙнағоло юрый ғына ант итә торған егеттәрҙән түгел! Түгел!.. Туҡта, кемдер ишек ҡаға?! Ҡемдәрҙер ҡотороноп шаулаша?! Аһ, Аҙнағолға бер-бер хәл булдымы әллә?! Аҙнағолдо һәләк итеп, был ҡоторонған ишкәкселәр хәҙер Зөлхизәгә ташланмаҡсылармы әллә?!

Зөлхизә ҡаты хафаланып һикереп торҙо. Югереп ишеккә барҙы. Ул арала булмай, ишкәкселәр, ишекте емереп, уның янына инде. Аһ, улар ниндәй ҡот осҡос! Сәстәре туҙған, күҙҙәре аҡайып маңлай урталарына менеп ултырған, ауыҙҙарынан аҡ күбектәр сәсрәй... Нимә булған? Ни бар уларға бында?

— Әйҙә, һине Диңгеҙбикә һорай?!

— Йәһәт бул! Һинең өсөн балаларыбыҙҙы етем ҡалдырырға теләмәйбеҙ!

Зөлхизә кәфендәй ағарынып артҡа сигенә.

— Аҙнагол, йәнем, ҡотҡар!.. Аҙнағол, һин ҡайҙа?!

— Ул үҙе рөхсәт итте. Әйҙә! — тиҙәр ишкәкселәр.

— Ялған!.. Ышанмайым. Һеҙ уны үлтергәнһегеҙҙер! Уй, Аҙнағолом, йәнем!!

Ишкәкселәр Зөлхизәне аяуһыҙ һөйрәкләп өҫкә алып сығалар. Берәүҙәре өҙгөләнгән елкәндәрҙән

ашығып кәфен бесә. Икенселәре ҡалтырай, ашыға, йыназа уҡый. Нисек шулай итмәһен? Улар бит мосолмандар. Йыназаһыҙ, кәфенһеҙ бер кемде лә теге донъяға ебәрә алмайҙар...

— Ха-ха-ха!.. — тип, тағы ла сабырһыҙланып, шарҡылдай ҡара тулҡындар. Зөлхизәнең шашҡан ҡараштары йотлоғоп тирә-яҡты ҡапшай.

«Ҡайҙа минең Аҙнағолом?! Аҙнағол тере булһа, мине рәнйетергә бирмәҫ. Һәләк иттермәҫ ине ул мине!.. Ниңә ул күренмәй? Уға ни булған?!»

Шул саҡ уның ҡарашы ҡолға артына боҫоп, дер ҡалтырап торған Аҙнағолдоң үтә төҫһеҙ йөҙө, ҡот осҡос ҡурҡаҡ күҙе менән осраша.

— Йәнем, һине ни эшләттеләр? Туҡманылармы? Бәйләп ҡуйҙылармы? — тип әсенеп ҡысҡыра Зөлхизә. — Ниңә һин мине, үҙеңдең Зөлхизәңде, ҡотҡармайһың?! Ебәрегеҙ!.. Үлтермәгеҙ уны!.. Йәберләмәгеҙ минең Аҙнағоломдо!..

— Ул үҙе риза булды. Ҡарышма! — тиҙәр ишкәкселәр. — Тиҙерәк кәфенгә төрөргә, йыназа уҡырға мөмкинлек бир. Юҡһа, кафыр китерһең!.. Тамуҡта янырһың...

— Эйе, ул үҙе, үҙе!.. Ха-ха! Аҙнағол үҙе һатты һине!.. — тип, тағы ла ҡотороноп, урғыла тулҡындар.

— Ысынмы был, Аҙнағол?! — тип, аҡтыҡ көсөн йыйып, йән әсеүе менән ҡысҡыра тағы Зөлхизә. — Әйт, ялған, тиген!..

Аҙнағол өндәшмәй. Тағы ла ҡатыраҡ төҫһеҙләнә генә.

— Диңгеҙбикә һине һорай. Аҙнағол — бирә. Башҡа сара юҡ. Яҙмышҡа баш эй, ҡыҙым! — ти бер ҡарт ишкәксе.

— Ысынмы был һүҙҙәр, Аҙнағол!?

Аҙнағол, устары менән биттәрен ҡаплап, ергә сүгә. Зөлхизә бөтәһен дә аңлай. Шул саҡ уның йөрәген ярһыу мөхәббәт урынына ҡот осҡос әсе нәфрәт солғап ала.

— Аһ! — тип ҡуя Зөлхизә, нәфрәтенә түҙә алмай. — Аһ, ҡурҡаҡ!.. Аһ, һатлыҡ!.. Күралмайым һине!.. Күралмайым!..

Бығаса әле уға таныш булмаған был утлы нәфрәт тойғоһо Зөлхизәнең бөтә йәнен-тәнен үтмәҫ бысаҡ менән ҡыйып үтә. Уның ярым-йорто хисте, урта-марҙа ҡылыҡты белмәҫ йөрәген ысын батырҙарға ғына хас ҡыйыу ғорурлыҡ, бөткөһөҙ көс-ҡеүәт солғап ала. Зөлхизә бер һелкенеүҙә үҙен тотоп тороусыларҙың ҡулынан ысҡынып китә лә Аҙнағолдоң ҡаршыһына барып баҫа. Аҙнағол йомран кеүек йомарлана, боҫа. Инде Зөлхизәнең йөрәге генә түгел, бөтә йәне-тәне тағы ла утлыраҡ нәфрәт һәм ерәнеү тойғоһо менән тулыша. Ул үҙен ҡайтанан тотоп алырға, кәфенгә төрөргә ниәтләнгән ишкәкселәргә иҫ киткес ғорур һәм тыныс тауыш менән:

— Мәшәҡәтләнмәгеҙ, — ти. — Мин үҙем ташланам диңгеҙ ҡосағына. Бынауындай әҙәм аҡтығы менән мин, хатта һеҙ теләһәгеҙ ҙә, һораһағыҙ ҙа, бер карапта ҡала алмайым. Хушығыҙ, ҡурҡаҡ йәндәр!.. Миңә һеҙҙең кәфенегеҙ ҙә, йыназағыҙ ҙа кәрәкмәй!

Зөлхизә, шул һүҙҙәрҙе әйткәс, Аҙнағол яғына ҡарап, ғорур һәм әсе нәфрәтле тауыш менән бер ҡысҡырып көлә лә, йүгереп барып, караптан ситкә, ажғырып ятҡан тулҡындар ҡосағына ташлана... Уның ал ебәккә төрөнгән нәҙекәй һылыу һыны тулҡындар өҫтөндә бер генә тапҡыр аҡсарлаҡ кеүек ҡағына ла күҙҙән дә юғала...

... Диңгеҙ тына. Тау-тау тулҡындар, ҡанаты һынған ҡарағош шикелле хәлһеҙләнеп, һуҙылып ята.

— Мәкерле Диңгеҙбикә көндәшен йотҡас тынысланды, ниндәй татлы йоҡоға талды, — тип һоҡланалар ишкәкселәр. — Гел шулай ул. Ҡорбан бирһәң генә тына...

Ҡорбан бирмәгән саҡта ла, ваҡыты еткәс, диңгеҙҙең тына торған ғәҙәте барын береһе лә иҫләргә теләмәй. Ниңә уйларға ла ниңә иҫләргә? Былай анһат бит. Йолаға һылтанаһың да йөрәк тауышын баҫырып ҡуяһың...

... Аҡ елкәнле яңғыҙ карап, бер ни булмаған кеүек, һалмаҡ, наҙлы сайҡалып, юлын дауам итә. Инде, ғәҙәтенсә, бик һөйкөмлө күренергә тырышып, карап менән идара итеп барған Аҙнағолдоң аңлаған кешегә ни хәтле буш, меҫкен һәм мәкерле кеше бу-

лыуы хаҡында ап-асыҡ һөйләп торған, мәғәнәһеҙ турғай күҙҙәрендә үкенеү ҙә, йәлләү ҙә, выждан ғазабы ла күренмәй. Унда тик үҙе һәм карабына төйгөсләп тултырылған байлыҡтың иҫән ҡалыуы өсөн булған хайуанға хас ҡомһоҙ ҡыуаныстан башҡа бер ни ҙә сағылмай...

Ни хәтле түбән, ҡырағай ҡыуаныс! Ниндәй буш өмөт!.. Диңгеҙ хәтле диңгеҙ ҡайтанан ярһымаҫ булырмы ла ҡайнамаҫ булырмы?! Эй-й, нисегерәк тә урғылыр, караптарҙы ғына түгел, мөһабәт гранит ҡаяларҙы ла дер һелкетеп ҡоторонор, шашыр әле ул! Эйе, аҫты-өҫкә әйләнеп тулҡыныр...

Хыянат һәм енәйәт язаһыҙ ҡаламы ни?!

## VII

Зөлхизә һәләк булған төндө Юламан ҡартты ҡаты йоҡо баҫты. Ошо төндә ул Зөлхизәһен һуңғы тапҡыр, тап өндәге кеүек, ап-асыҡ итеп төшөндә күрҙе. Ә таң алды еткәс:

— Аһ, Зөлхизә, Зөлхизә! — тип манма һыуға төшөп уянып китте. — Һәләк булдың бит, Зөлхизә! Йә, кем өсөн?!

Тәбиғәттең әлегә асыҡ ҡына билдәле булмаған ғәжәп бер тылсымлы сере Юламан ҡартҡа Зөлхизәнең диңгеҙҙә уҙған һуңғы минутын һәм фажиғәле һәләкәтен нисек булған шул көйө, түкмәй-сәсмәй алып килеп еткерҙе, һәм был әсе хәҡиҡәт Юламан ҡарттың аҡтыҡҡы хәлен дә тартып алды.

— Әйттем бит... ышанма, тинем бит... Бөркөт тоҡомонан була тороп, ҡоҙғондо юлдаш иттең бит, балаҡай!..

Юламан ҡарттың был көндәрҙәге осһоҙ-ҡырыйһыҙ уйҙарының иң әсеһе лә, иң һуңғыһы ла ошо булды. Бынан һуң Юламан ҡарттың һүнеп барған аңында Зөлхизәнең йыр тауышы, ер аҫтынан килгән кеүек, үҙәк өҙгөс моң менән һыҙыла башланы.

...Эй-й,  
Күкрәгемдә әсе нәфрәт уты,  
Күҙҙәремдә ҡанлы йәш минең...

Юламан ҡарт ейәнсәренең аһ-зарына ҡолаҡ һала-һала, яҙғы ҡар һымаҡ иреп, әкрен, шым ғына төпһөҙ ҡараңғылыҡ донъяһына инеп юғалды. Иртәнсәк, ғәҙәт буйынса, хәл белергә ингән изге күңелле күршеләре уны һыуынған хәлдә таптылар. Балыҡсыларҙың яланғас ҡая өҫтөндәге моңһоу ҡәберлегендә шул көндө тағы бер бәләкәс кенә түбәләс артты.

Ә аҫта, гранит ҡаялар ҡуйынында, тормош әүәлгесә дауам итте. Оло диңгеҙ, берсә күк арғымаҡ булып, ел-дауыл менән ярышты, берсә мең башлы аждаһа булып, шаулай-үкерә ярҙарҙан ашып сыҡты, берсә зәңгәр сәңгелдәктә тирбәлә-сайҡала, ҡояш һәм ай менән бөтмәҫ-төкәнмәҫ наҙлы серен дауам итте.

Диңгеҙ ярына яңы ғашиҡтәр килде:

— Аһ, ниндәй мөһабәт, ғорур тәрәнлек, гүзәллек!..

— Ниндәй ҡабатланмаҫ, шиңмәҫ йәшлек! Ниндәй көс, ҡеүәт!..

— Әй, бөйөк диңгеҙ! Мәңгелек һәм тиңһеҙ!

*Апрель, 1964*
*Йоматау*

# ПОВЕСТӘР



килешһеҙ хәрәкәт менән, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡапыл Зарифаның терһәгенә тотоноп, уны үҙ яғына тартты. Һәм үҙенә һис тә хас булмаған ҡабаланлыҡ менән:

— Зарифа! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. — Еттек тә!.. Бар, ҡайта һал!

Улар был ваҡытта, ысынлап та, Зарифаларҙың ҡапҡаһы янына килеп еткәйнеләр. Зарифа, ғәҙәттә булмағанса шаян йылмайып, берәүһе артыҡ оҙон, икенсеһе имән түҙлеге шикелле томтоҡ, ныҡлы булып йәнәшә баҫып торған дуҫтарға алмаш-тилмәш ҡарап, йәнә әҙ генә торҙо ла, йүгереп, ишек алдына инеп китте.

— Хушығыҙ, малайҙар!

Егеттәр икеһе бер тауыштан:

— Тыныс йоҡо! — тип ҡалдылар. Ә унан һуң өйҙәренә хәтле бер һүҙ ҙә һөйләшмәнеләр. Һәр ҡайһыһы, үҙ уйына батып, әкрен генә барҙы. Нимә тураһында уйланылар улар? Яҙғы ташҡын шикелле шаулап-гөрләп уҙып, бөгөн мәктәп менән бергә тороп ҡалған ғәмһеҙ бала саҡ тураһындамы? Әле һыналмаған, татылмаған, ләкин ҡояш кеүек балҡып, үҙенең бөтә мөһабәтлеге, гүзәллеге, дәртлелеге менән йөрәктәрҙе ярһытҡан, илгә, халыҡҡа хеҙмәт юлында мең төрлө подвигтарға бай булған ғүмер яҙы — йәшлек тураһындамы? Әллә үҙҙәренең, күп һынауҙар аша үтеп, үрмә гөлдәй үрелеп үҫкән балалыҡ дуҫлығының хәҙер, йәшлектең тәү аҙымында уҡ, бынауы ҡыҙға, икеһенең йөрәгендә лә берҙәй үк яҡты, тынғыһыҙ хистәр уятҡан Зарифаға, бәйләнешле, быға са таныш булмаған татлы тойғолар өйөрмәһенә бәрелеп ҡаҡшау мөмкинлеге тураһында уйланылармы улар? Билдәһеҙ. Тик шуныһы билдәле: улар икеһе лә был минутта донъяның иң бәхетле егеттәре ине.

*1952—1954*

# Партизан малай

## I

Павло менән Ирек мәктәпкә тәүбашлап ингәндән бирле бер класта уҡыйҙар, бер партала ултыралар, кластан класҡа ла бергә, хатта бер үк отлично билдәһе менән күсәләр. Улар бик яҡын дуҫтар. Уларҙың яратҡан-яратмаған нәмәләре лә күп ваҡыт бер үк төрлө була. Әйтәйек, Павло ҡыш көнө мәктәпте, уның йылы, яҡты бүлмәләрен сикһеҙ ярата. Шул бүлмәләрҙә ултырып уҡыу, көн һайын яңынан-яңы нәмәләр тураһында өйрәнеүҙән дә күңеллерәк бер нәмә лә юҡ кеүек тойола уға. Ул көндәр буйы урынынан ҡуҙғалмай китаптар уҡып ултыра ала. Үҙе арымай ҙа. Уның бик ҙур белемле кеше булғыһы килә. Ирек тә тап шулай. Үҫкәс кем булыу тураһында ла улар йыш ҡына һөйләшеп алырға яраталар. Уларҙың икеһенең дә врач булғылары килә.

— Врач — кешенең иң яҡын дуҫы ул, ти минең әсәйем, — тип һөйләй Ирек, был турала һүҙ барғанда.

— Дөрөҫ, — ти Павло, дуҫының фекеренә ҡушылып, — бигерәк тә хәрби врач булһаң, эйеме?!

— Эйе.

— Мин хәрби врач булам.

— Мин дә.

Улар икеһе лә кешеләрҙең иң яҡын дуҫы булырға теләйҙәр һәм шуға ашҡыналар ине.

Ә йәй көнө Иректең яратҡан эше балыҡ тотоу, ҡармаҡ һалып көндәр буйы йылға ярында ултырыу. Бына яланғас табандарынды ҡыҙған ҡырсынташтарға яндыра-яндыра, йылға буйлап йөрөй торғас, яр

ситенән үҙеңә уңайлы бер урын табып ултыраһың да ҡармағыңды һыуға ырғытаһың. Ҡалҡыуыстан күҙҙәреңде алмай балыҡ сиртеүен күҙәтә башлайһың. Ә балыҡ һине шаярта. Һиҙҙермәй генә селәүсененде ашап ҡаса. Ҡайһы саҡта аңғармаҫтан ҡабып та ҡуя.

Һин йәһәт кенә ҡармағыңды тартып сығараһың. Әгәр шунда берәр ҡыҙыл күҙ йәки алабуға эләгеп тә сыҡһа, инде шатланыуҙан йөрәгең эсеңә һыймай тулап китә. Һин шулай һыу ситендә ултыраһың да ултыраһың. Йәй ҡояшы рәхәт итеп арҡаны ҡыҙҙыра һәм йылға өҫтөнә төшөп нур сәсеп уйнай. Эре суҡ тирәктәрҙең әле береһенә, әле икенсеһенә ҡунып, тәбиғәттең иркә ҡошо — кәкүк саҡыра. Уның ғәжәп яғымлы тауышы, йөрәктә ниндәйҙер ярһыулыҡ уятып, өҙлөкһөҙ яңғырап тора...

«Ошондай урында ултырып балыҡ ҡармаҡлауҙан да күңеллерәк ни нәмә булһын инде! Билдәле, юҡ», тип уйлай Ирек был турала. Павло ла шулай уйлай.

Ҡыш үҙәге үтеп, ҡояш ялтырай башлағас та, Ирек менән Павло балыҡ тотоу тураһында йыш ҡына һөйләнә башланылар:

— Әгәр икебеҙ ҙә V класты отличноға тамамлаһаҡ, уҡыуҙар туҡтау менән тәүге ял көндө үк балыҡ тоторға барырбыҙ, — тип һүҙ ҙә ҡуйыштылар. Был турала ата-әсәләренә лә әйттеләр. Ирektең дә, Павлоның да атаһы менән әсәһе улдарының был уйҙарын хупланылар һәм уларҙы ҡырға үҙҙәре үк алып сығырға һүҙ бирҙеләр. Дуҫтарҙың күңелдәрен был вәғәҙә бигерәк тә күтәреп ебәрҙе. Улар алды-ялды белмәҫтән тағы ла тырышыбыраҡ уҡый башланылар.

* * *

Көндәр тиҙ үк үтеп тә киттеләр. Ирек менән Павлоның тырышыуы бушҡа булманы. Улар икеһе лә V класты маҡтау грамотаһы алып тамамланылар. Был дуҫтарҙың үҙҙәре өсөн генә түгел, бәлки бөтә ғаиләләре өсөн дә ҙур шатлыҡлы көн булды.

Вәғәҙә ителгән ял да килеп етте. Ялға ҡаршы кисте Ирektең әсәһе күп итеп бешеренде. Ирек тә уға булышты. Улар бер кәрзинде тәмле-тәмле

аҙыҡтар менән тултырҙылар: ит, һөт, күкәй, май — берәһе лә ҡалманы. Ирек үҙенә өр-яңы ҡармаҡ та әҙерләп ҡуйҙы.

Был көндө Ирек көндәгегә ҡарағанда бик һуң ятты. Атаһын көттө ул. Атаһының иртәгә, ысынлап та, ҡырға сыға аламы, юҡмы икәнен белгеһе килә ине уның. Ләкин атаһы ҡайтманы ла ҡайтманы. Бөгөн уларҙа партия йыйылышы бара ине шикелле.

Иртә менән Ирек, йоҡонан тороп, йыуынып кейенеүгә, атаһы менән әсәһен эйәртеп, Павло ла килеп етте. Уның янында Павлоның апаһының улы Сережа ла бар ине. Павло Ирektең ҡабырғаһына төртөп:

— Әйҙә, балыҡсы, йәһәтерәк бул, юҡһа көн үтеп тә китер, — тип ашыҡтырҙы. — Үҙе, ғәҙәтенсә, оҙон керпектәре араһынан күҙен шаян уйнатып, рәхәтләнеп көлдө.

— Мин күптән әҙер,— тине Ирек һәм, ишек төбөнә һөйәп ҡуйған ҡармағын алып, Павло менән сығып китергә әҙерләнде. Ләкин әсәһе уны туҡтатты.

— Ирек, һин кәрзин күтәреп барырһың, улым, яраймы.

— Ә атайым бармаймы ни? — тине Ирек, ҡапыл күңелһеҙләнеп. Низер һөйләй-һөйләй ашығып кейенеп торған атаһына үпкәле ҡараш ташланы. Атаһы уны тынысландырырға ашыҡты:

— Улым, һин мине ғәфү ит. Минең бик ашығыс башҡараһы бер эшем килеп сыҡты. Ә һин күңелһеҙләнмә. Киләһе ял көндө һис һүҙһеҙ мин һеҙҙе ҡырға үҙем башлап алып сығырмын. Булдымы?!

Ул Ирektең башынан һыйпап, маңлайынан бер үпте лә өйҙәгеләрҙең бөтәһе менән хушлашып сығып та китте.

— Киҫкә, күрешкәнгә тиклем, хушығыҙ. Күңелле ял теләйем!

— Хуш!

Ул китеүгә, Ирektәр ҙә өйҙән сыҡтылар һәм ҡала ситенә табан йүнәлделәр. Башта Ирекkә күңелһеҙерәк булды.

«Нигә минең атайым хәрби кеше булды икән! Бер ҙә эштән бушамай. Ана, Павлоның атаһы уҡытыусы булғас, ниндәй һәйбәт. Йәй буйы тиерлек уның

янында була», тип уйланы ул. Лəкин был күңелһеҙлек оҙаҡҡа барманы. Тирə-яғындағы кешелəрҙең бөтəһе лə үтə шат булғанда, ул бер үҙе күпме бошонop барһын инде!

Юл бик ҡыҫҡа булды. Һөйлəшə-һөйлəшə бара торғас, улар тиҙ арала ҡаланы сығып, ҡыш буйы һағынып иҫкə алған йылға буйына ла килеп еттелəр. Йылға буйы туғайлығынан бер ситтəрəк яңғыҙ, үҙе генə үҫеп ултырған бик бейек, йыуан ҡарт тирəк төбөнə килеп урынлаштылар. Павло менəн Ирек ҡармаҡтарын күтəреп шунда уҡ яр аҫтына төшөп юғалдылар. Павлоның атаһы ҡула-ҡаҙан рəтлəне, утындар йыйып ут яҡты ла, тирəк төбөнə ултырып, мандолина уйнай башланы. Əсəлəр уйнай-көлə билмəн бешерергə тотондолар. Павлоның атаһы мандолинаны бик матур итеп, тəрəн йылғаның тулҡынланыуына оҡшатып уйнай. Уға ара-тирə Ирektең əсəһе ҡушылып йырлап ҡуя. Иректең əсəһе йырлағанды ишеткəн кешелəр уны бик матур йырлай тиҙəр. Ирекkə лə шулай тойола. Ҡышҡы оҙон кистəрҙə, икеһе генə өйҙə ултырған саҡтарҙа, əсəһе уның шулай йырлап ебəрə, ə Ирек «тағы ла йырлаһа ине», тип уйлап ултыра торғайны. Ə хəҙер əсəһенең йырҙары уның ҡолағына аҙ-маҙ ғына сағылып ҡалалар. Ул түгел, хатта йылға өҫтөн аҡҡоштар шикелле ҡаплап алған кəмəлəр ҙə, ул кəмəлəрҙə йөҙгəн кешелəрҙең йыр һəм гармун тауыштары ла уның күңелен үҙенə тарта алманылар. Павло ла шулай уҡ бөтə күңеле менəн балыҡ тотоуға бирелде.

Улар көн буйы һыу ситенəн сыҡмай ҡармаҡ һалып ултырҙылар. Əсəлəре уларҙы ашатыу өсөн яр өҫтөнə көскə сығарып алалар, ə улдары ашыҡ-бошоҡ ҡына ашайҙар ҙа тағы ла йылғаға югерəлəр ине. Өлкəндəр янында ауыр холоҡло, тос тəнле, ашамһаҡ Сережа ғына кинəнеп һыйланып ултырҙы. Павло менəн Ирек бөгөн ҡыш буйы көтөп алған телəктəренə ирештелəр. Көн буйы бер-ике ташбаштан башҡа балыҡ тота алмау ҙа уларҙың ҡыуаныстарын кəметə алманы.

Кис етеп, ҡояш байырға яҡынлашҡас, улар сикһеҙ күтəренке күңел менəн өйҙəренə ҡайтырға сыҡ-

тылар. Ә йылға буйы һаман шулай уйын-көлкө, йыр тауыштары менән яңғырап, ял итеүселәр менән ҡайнап ҡалды.

— Хуш, йәмле йылға! Киләһе ялға беҙ бында атайымды ла алып килербеҙ. Ул саҡта тағы ла ҡыҙығыраҡ булыр, — тине Ирек. Йылға өҫтө, киске еләҫ ел менән аҙ ғына тулҡынланып, осорға йыйынған ҡош кеүек, талпынып ҡуйҙы. Гүйә ул:

— Тағы ла кил, Ирек, онотма! — тине.

* * *

Ирektәр ҡалаға килеп инеү менән, унда ниндәйҙер ғәҙәттән тыш үҙгәреш һиҙҙеләр. Урамда осраған кешеләрҙең бөтәһе лә ҡайҙалыр ашығалар. Бөтәһенең дә йөҙөндә айырата етдилек, хәстәрлелек күренеп тора. Ниңәлер, ғәҙәттәгесә шаулашып һөйләшкән, көлөшкән тауыштар ишетелмәй, һәр кем ҡайҙалыр ашыға, югерә ине.

— Әллә бер-бер хәл булдымы икән? Әйҙәгеҙ шәберәк атлайыҡ әле, — тине Павлоның атаһы. Үҙе, оҙон-оҙон баҫып, алдан китте. Башҡалар ҙа уның артынан ҡалышманылар. Күп тә үтмәй, улар ҡала үҙәгенә килеп еттеләр. Бына драма театры йорто. Уның янына бик күп халыҡ йыйылған. Радио тыңлайҙар. Ирektәр ҙә шунда югерҙеләр. Барып туҡтар-туҡтамаҫтан улар дикторҙың ғәҙәттәгесә бик таныш, ләкин, ни өсәндер, үтә хәүефле тауышын ишеттеләр.

«Немец фашистәре Советтәр Союзы менән Германия араһында төҙөлгән үҙ-ара һөжүм итешмәү тураһындағы килешеү договорын хыянатсыл рәүештә боҙҙолар һәм беҙҙең мөҡәддәс илебеҙгә мәкерле рәүештә һөжүм башланылар...»

Ирektең йөрәге ҡапыл туҡтап, тәне туңып киткәндәй булды.

— Һуғыш, һуғыш!.. Әсәй, ишетәһеңме, фашистәр... Ишетәһеңме, әсәй?!

Әсәһе, ниңәлер, уның ҡулынан ҡапыл ҡаты итеп тотоп алды ла алға югерҙе.

— Әйҙә, балам!

Хатта Ирек Павлоларҙың ҡайҙа тороп ҡалғанда-

рын да күрмәй ҡалды. Әллә улар ҙа инде шулай уҡ югерешеп ҡайтып киттеләр.

Шунда Иректәр менән йәнәш югереп барған бер ҡыҙ уларға:

— Көндөҙ үк был хаҡта радио аша сығыш булды. Ҡыҙыл Армияға фашист бандаларын беҙҙең ерҙән ҡыуып сығарырға бойороҡ бирелеүен әйттеләр... — тип һөйләне.

«Әй, нәмәгә кәрәккән инде был балыҡ тотоу? Етмәһә, ошондай көндө», тип үкенде Ирек һәм, йөрәгенең әсеүен баҫырға тырышып, тыныс тауыш менән әсәһенә өндәште:

— Ничего, беҙҙең Ҡыҙыл Армия барыбер уларҙың кәрәктәрен бирер әле, эйе бит, әсәй?!

Әсәһе бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Һаман өйгә табан югереүендә булды.

Улар, драма театрынан ике генә квартал ары тороуҙарына ҡарамаҫтан, ҡайтып етә алмай яфаландылар. Был юл Ирекҡә бөткөһөҙ оҙаҡ һуҙылғандай булды.

Улар ҡайтып еткәндә, квартиралары һаман йоҙаҡлы тора ине.

«Күрәһең, атайым һаман ҡайтмаған», тип уйланы Ирек һәм, йоҙаҡты асып, ашығып өйгә инде. Ишектән инеү менән уның күҙе өҫтәл өҫтөндә ятҡан бәләкәй генә ҡағыҙға төштө. Ул, үҙе лә һиҙмәҫтән атылып барып, уны ҡулына алды ла, секунд эсендә күҙ йөрөтөп сығып, әсәһенә бирҙе.

— Әсәй, уҡы!

— Атайың яҙып ҡалдырғанмы әллә!?

— Эйе.

Яҙыу бер нисә һүҙҙән генә тора ине:

«Һөйөклөләрем, Рауза, Ирек!

Ватан өсөн, һеҙ ҡәҙерлеләремдең бәхетле тормошо өсөн, мин фронтҡа киттем. Борсолмағыҙ. Еңеү беҙҙең яҡта булыр. Дошман юҡ ителер. Күрешкәнгә тиклем, хушығыҙ.

Һеҙҙең Ғ ә л и м.

22 июнь 1941 йыл».

«Их атайым, атайым, китеп тә барған. Инде мин уны ҡасан күрермен?!»

Ирек, ни нәмәлер эҙләгән һымаҡ, бөтә өй эсенә күҙ йөрөтөп сыҡты. Ләкин уның ҡараштары бер генә урында ла туҡталып ҡала алманылар. Өй эсе буш һәм күңелһеҙ ине. Уның йөрәге ҡапыл бик ҡаты әрнеп, тамағына ни нәмәлер төйөлгәндәй булып китте. Үкһеп-үкһеп илағыһы килеүҙе көскә генә тыйып тора башланы. Әле генә үҙҙәре күреп ҡайтҡан йылға өҫтө кеүек тыныс, шат тормоштоң көтмәгәндә былай боҙолоп китеүе өсөн дә, атаһын күрә алмай ҡалыуы өсөн дә йөрәге һыҙланы уның.

Ә әсәһе яҙыуҙы алды ла уға текләп өҫтәл янында бик оҙаҡ ултырҙы. Уның ҡаштары төйөлөп, һәр ваҡыт көләс күҙҙәре киң асылып аптыраған да, асыуланған да кеүек булып, бер урында туҡтап ҡалғандар, ә яҙыу тотҡан ҡулы әкрен генә дерелдәй ине.

— Эйе, — тине ул бер аҙҙан улына ҡарап. — Һуғыш, аяуһыҙ һуғыш... Ә беҙ һинең менән атайыңды ҡәҙерләп, оҙатып та ҡала алманыҡ. Ниндәй үкенесле хәл!.. Ләкин нәмә эшләмәк кәрәк. Дошманды еңеп ҡайтҡан саҡта бик яҡшы итеп ҡаршыларбыҙ инде уны, шулай бит, улым?!

— Шулай, — тине Ирек тауышын көскә сығарып, һәм, әсәһенә ҡарамаҫҡа тырышып, ситкә боролдо.

Әсә, ниҙер иҫенә төшкән кеүек, ҡапыл һикереп торҙо. Һәм башын эйеп өҫтәл янында һүҙһеҙ баҫып торған улы янына килде. Унан ниндәйҙер ҡырҡыу хәрәкәт менән уның эйәгенән тотоп, башын юғары күтәрҙе лә маңлайынан үпте.

— Ирек, һиңә, бәлки, бер аҙға яңғыҙың ғына ҡалып торорға тура килер. Мин дә военнообязанный бит. Хәҙер мин военкоматҡа барам, фронтҡа ебәреүҙәрен һорайым. Ә һин ебемә, ныҡ бул. Ҡыҙыл командир улы икәнлегенде онотма!

Бынан һуң әсә тиҙ генә кейенде лә сығып та китте.

Ирек үҙен-үҙе шелтәләне:

«Эй юнһеҙ, ебеп торам тағы. Етмәһә пионер! Тыуған иленде дошмандан һаҡларға китерлек ата-әсәм булғаны өсөн ҡыуанырға кәрәк ине миңә. Ә мин...

Әллә минең атайым хәрби кеше булған. Ул фашистәрҙе нисек туҡмарға белә инде...»

Был уй Иректең күңелендә ғорурлыҡ һәм тыныслыҡ уятты. Ул әле бөгөн иртә менән генә атаһы тураһында уйлаған уйын иҫенә төшөрҙө.

«Нинә уҡытыусы булмаған, имеш. Фу, ниндәй балалыҡ!»

Бынан һуң Ирек өйҙәрен тиҙ генә йоҙаҡланы ла Павлоларға йүгерҙе.

Ул барып ингәндә, Павло ла бер үҙе генә ултыра. Уның атаһы менән әсәһе лә фронтҡа китергә теләп ғариза биреү өсөн военкоматҡа киткәндәр. Павло үҙе лә ғариза яҙып маташа ине.

— Бына үҙең дә килеп еттең, — тине ул ҡәнәғәт тауыш менән. — Мин хәҙер ғаризамды яҙып бөтөрәйем дә һинең янға йүгерәйем тип ултыра инем әле.

— Килеп тә еттем шул.

— Беләһеңме, дуҫ, әйҙә беҙ ҙә китәйек!

— Ҡайҙа?!

— Фронтҡа.

— Нисек?! Малайҙарҙы алалармы ни унда?!

— Бына инде, нисек тә нисек, имеш! Нинә алмаһындар, ти. Әллә граждандар һуғышында беҙҙең кеүек малайҙар ҡатнашмағандармы? Нисегерәк тә ҡатнашҡандар, иптәшкәйем. Бына тигән һуғышсы малайҙар булған. Белһәң, Аркадий Гайдар ун биш йәшендә командир булған!.. Бына нисек?! Әйҙә, беҙ икәү ҙә китәйек!

Ирек ни әйтергә белмәй аптырап ҡалды. Ә Павло һөйләгән һайын йәнләнә барҙы.

— Нинә беҙгә фронтҡа китмәҫкә. Ошолай ғына булһаҡ та, беҙҙең түштәрҙә төҙ атыусылар значогы яна бит. Бер фашисте атып йыҡһаң да ни тора бит, эйе бит!?

Ул дуҫының ике яурынынан тотоп ҡаты һелкетте.

— Ишетәһеңме, әйҙә, китәбеҙ!

Дуҫының шундай ышаныс һәм ялҡын менән әйткән һүҙҙәре Иректе лә тиҙ үк мауыҡтырҙы, был бик ҙур, бала кеше өсөн мөмкин булмаҫтай эште булдырырға ышаныс уятты. Ул тиҙ үк Павлоның фекеренә ҡушылды.

— Әйҙә, китәйек һуң, булмаһа.

Павлоға шул һүҙ генә кәрәк ине. Ул Иректе елтерәтеп килтереп өҫтәл янына ултыртты ла алдына ҡәләм, ҡағыҙ һалды.

— Ҡиттек, дуҫҡай. Йә, ғариза яҙ.

Улар, өҫтәлдең икеһе ике башына ултырып, ғариза яҙа башланылар.

Ирек улай итте, былай итте, ләкин ғаризаны нисек тә башлап китә алмай йөҙәне. Ә Павло өлкәндәрсә етди төҫ менән ниҙәрҙер яҙа ла яҙа ине.

«Бындай ғаризаны һис тә яҙып ҡарағаным юҡ. Нисегерәк кенә итеп яҙырға инде...»

Ирек, сәстәрен артҡа һыйпай-һыйпай, шулай уйланды. Ләкин дуҫының бик бирелеп яҙып ултырғанын күргәс, өндәшмәне. Үҙенең аптырауын һиҙҙермәҫкә теләп, башын түбән эйҙе лә тырышып яҙырға кереште.

Ул бер тапҡыр яҙып бөткәс уҡып ҡараны ла йыртып ташланы. Тағы яҙҙы, тағы йыртты.

— Бер ҙә күңел теләгәнсә барып сыҡмай, — тип һуҡранды. Павло ла бер нисә тапҡыр йыртып, бер нисә тапҡыр яҙҙы. Ахырҙа ғаризалар әҙер булды.

— Йә, уҡышып ҡарайыҡ, кем шәберәк яҙҙы икән? — тине Ирек, Павлоның нисек яҙғанын белергә теләп.

Павло өлкән кешеләрсә етди тауыш менән бойорҙо:

— Уҡы, тыңлайым.

— Юҡ, һин тәүҙә уҡы!

— Йә, ялындырып торма инде, уҡы, — тине Павло артабан һүҙ оҙайтырға урын ҡалдырмаған тауыш менән.

— Тик һин көлмә, йәме. Мин ғаризаны ғүмеремдә беренсе тапҡыр яҙҙым бит.

— Ярар, ярар, әйҙә уҡый башла!

— Йә, улай булһа, тыңла!

Ирек, кластағы шикелле ҡыйыуһыҙыраҡ ҡына урынынан тороп, аяғүрә баҫты. Һәр бер һүҙҙе ҡырҡыу, асыҡ итеп әйтергә тырышып уҡый башланы:

«Комиссар ағай!

Мин гүзәл Тыуған илебеҙҙе илбаҫарҙарҙан һаҡлаусылар сафына баҫырға теләйем. Бер нәмәнән ҡурҡмай батыр, ҡыйыу һуғышасаҡмын. Мин мылтыҡтан мәргән атам. Граната ла ырғыта беләм. Комиссар ағай, мин һеҙгә, дошманды аяуһыҙ туҡмарға, тигән пионерлек һүҙемде бирәм! Мине иң алғы фронтҡа, мөмкин булһа атайымдың часенә, ебәреүегеҙҙе үтенәм.

Пионер Ирек Ильясов».

Ирек ғаризаһын уҡып бөттө лә мунсанан сыҡҡан саҡтағы кеүек булып ҡыҙарған битенән тир бөртөктәрен ҡул һырты менән һөртөп алды. Унан, нәмәнәндер риза булмаған һымаҡ кәйефһеҙләнеп, урынына ултырҙы. Павло рәхәтләнеп ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

— Комиссар ағай, комиссар ағай, имеш. Дилбегәнән оҙон, һыуҙан шыйыҡ ғариза. Бына нисек кенә яҙалар уны.

Ул күҙенә төшөп торған оҙон, һары сәстәрен һелкеп кенә артҡа ташланы ла, һүҙҙәренә көс бирергә тырышып, уң ҡулын һелкә-һелкә уҡый башланы:

«Иптәш комиссар! Һеҙгә пионер Павлонан ғариза.

Иптәш комиссар!

Беҙҙең бәхетле балалығыбыҙҙы урларға ингән фашист ҡараҡтарына ҡаршы һуғышта ҡатнашырға рөхсәт итегеҙ. Мылтыҡ бирегеҙ миңә. Мин һуғышырға, илемде һаҡлауҙа үҙем дә ҡатнашырға теләйем. Фронтҡа, бөгөндән үк фронтҡа ебәрегеҙ мине.

Пионер Павло».

Павло уҡып бөттө лә дуҫының күҙҙәренә туп-тура ҡарап, ғорур тауыш менән һорап ҡуйҙы.

— Йә, нисек сыҡҡан?!

— Ул тиклем шәп түгел инде, ярар.

— Эйе шул, — тине Павло ла килешеп. — Ҡағыҙға яҙылған һүҙҙәр бик үк шәп сыҡмағандар... Шулай ҙа барыбер аңларҙар. Нимә теләүебеҙҙе төшөнөрҙәр. Эйе бит, дуҫ! Әйҙә, киттек.

— Әйҙә!

Дуҫтар ғаризаларын алдылар ҙа ашығып өйҙән сыҡтылар һәм туп-тура военкоматҡа киттеләр.

Улар барып еткәндә, военкоматҡа үтеп инер юл юҡ ине. Үҙ теләктәре менән фронтҡа китергә теләп килгән кешеләр военкоматтың йорт эсенә түгел, ишек алдына ла һыйышмай ине. Бында ирҙәр, егеттәр, ҡатын-ҡыҙҙар, малайҙар — барыһы ла бар. Уларҙың бөтәһе лә ошо сәғәттә үк үҙҙәрен фронтҡа ебәреүҙе һорайҙар, ҡәбәхәт дошмандың юлын үҙ күкрәктәре менән быуырға теләйҙәр ине.

Павло менән Ирек тә нисек кәрәк улай комиссар янына үтеп инделәр, кемуҙарҙан ғаризаларын уға тотторҙолар. Комиссар, ғаризаларға күҙ йөрөтөп сыҡҡандан һуң, ҡыҙыҡһынып малайҙарға бер аҙ ҡарап торҙо. Уның ҡаршыһында икеһе лә оҙон буйлы, икеһе лә бөхтә бәйләнгән ҡыҙыл галстуклы, береһе аҡ йөҙлө, һары сәсле, яҡты зәңгәр күҙле, икенсеһе ҡоңғорт йөҙлө, сөм-ҡара сәсле, янып торған ҡара күҙле ике малай баҫып тора ине.

— Эйе, бик молодец малайҙар булырға оҡшайһығыҙ, — тине комиссар һәм, бер аҙ уйланып торғандан һуң, ҡапыл ғына һорап ҡуйҙы:

— Егеттәр, һеҙгә нисә йәш?

Пионерҙәр, смирно баҫып, бер тауыштан, ҡыйыу яуап бирҙеләр:

— Ун дүртәр йәш, иптәш комиссар.

Комиссар уларға ҡарап яғымлы йылмайып ҡуйҙы.

— Егеттәр, һеҙгә әле һуғышсы булырға иртәрәк. Беҙҙә балаларҙан башҡа ла һуғышсылар аҙ түгел. Һеҙ хәҙергә бында эшләгеҙ. Фронтҡа китеүселәрҙе алмаштырығыҙ. Еңеүҙе тылда әҙерләшегеҙ.

Был һүҙҙәр пионерҙәрҙең башына һуҡҡан кеүек ауыр тәьҫир итте. Улар һуғышсы булырға тейешлектәрен аңлатырға бөтә көс менән тырышып ҡаранылар. Булманы. Комиссарҙың әйткән һүҙе бер булды.

Дуҫтарға, ни тиклем ауыр булһа ла, ғаризаларын күтәреп, кире ҡайтып китергә тура килде.

— Эшме ни был! — тип ҡыҙҙы Павло, юлда ҡайтып барғанда, — теләй тороп, фронтҡа ебәрмәйҙәр. Дөрөҫ түгел был!

Ирек, бер аҙ өндәшмәй барғандан һуң, дуҫына ҡаршы төштө:

— Юҡ, Павло, беҙ яңылышабыҙҙыр. Комиссар иптәш дөрөҫтө әйтәлер ул. Беҙҙең кеүек малайҙарҙан унда ни файҙа? Бында, исмаһам, беҙ фронт өсөн файҙалы күп эштәр эшләй алабыҙ. Бына тимурсылар командаһы төҙөп ебәрербеҙ. Унан һуң...

Павло ғәҙәттәгегә оҡшамаған ҡаты тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе.

— Ҡуй әле, зинһар!.. Яратмайым мин шундай аумаҡай кешене. Әле былай, әле тегеләй... Фронтҡа китәм тигәс, фронтҡа китәм. Мин ике төрлө һөйләргә яратмайым, аңланыңмы?

— Аңланым,— тине Ирек, ғәйепле кеше кеүек баҫынҡы тауыш менән.

Павло һаман ҡыҙҙы.

— Фашист эттәрен үҙ ҡулым менән атып үлтергем килә минең. Ниңә улар тып-тыныс ятҡан илгә баҫып инәләр!

Дуҫының беренсе тапҡыр үҙенә шулай ҡаты итеп өндәшеүенә Иректең хәтере ҡалды.

«Әйтерһең, мин ебәрмәйем уны. Ебәрмәүҙәре минең үҙем өсөн дә бик күңелле түгел дә бит... Атайым да, әсәйем дә фронтҡа киткәндә, минең бында бер үҙем тороп ҡалғым килеп тора тиме икән», тип уйланы ул. Хатта дуҫына үҙе кеүек үк ҡаты тауыш менән яуап ҡайтарҙы.

— Ярай, кит, улай булғас. Уңышлы юл теләйем. Китә алмаһаң, минең тимурсылар командаһына килерһең. Мин һиңә унда фронт өсөн файҙалы булған бына тигән эштәр табып бирермен.

Павло тағы ниндәйҙер ҡаты һүҙ әйтергә теләгән һымаҡ ярһыған күҙҙәрен тултырып дуҫына асыу менән ҡарап ҡуйҙы. Ләкин өндәшмәне. Ирек тә бүтән һүҙ әйтмәне. Улар шул хәлдә айырылыштылар.

Дуҫтар араһында был беренсе тапҡыр аңлаша алмау, икеһе ике төрлө уйлау булып, икеһендә лә ауыр тәьҫир ҡалдырҙы.

Ирек өйгә ҡайтып ингәндә, бик һуң ине инде. Өй эсе баяғыса күңелһеҙ һәм ҡотһоҙ ине. Ләкин Ирек уға иғтибар итмәҫкә тырышты. Әсәһе тураһында уйланы.

«Әсәйем һыуһап ҡайтыр», тине ул һәм, электр сәйнүккә һыу ҡойоп, ҡайнатырға ултыртты. Унан тимурсылар командаһын нисек ойоштороп ебәреү тураһында уйланды. Пландар ҡорҙо. Павло менән үпкәләшеүе өсөн борсолдо.

«Павло тимурсылар командаһында бына тигән командир булыр ине. Нисек итеп уны күндерергә?..»

Бер аҙҙан Иректең әсәһе ҡайтып инде. Тик ул артыҡ күңелһеҙ ине. Ирек бының сәбәбен белергә ашыҡты.

— Әсәй, әллә һине лә алманылармы?!

— Нисек? Тағы кемде алмағандар?!

Ирек, үҙенең артыҡ һүҙ ысҡындырып ебәреүен аңлап, һүҙҙе икенсегә борорға ашыҡты.

— Ә ана теге беҙҙең менән уҡыған Сережа китергә теләгән дә — алмағандар...

— Сережа! Теге ашауҙан башҡаны яратмай торған, аҡ ҡалас кеүек ҡабарып торған һимеҙәк Сережкамы?! — тине әсәһе, ғәжәпләнеп.

— Эйе, — тине Ирек баҫынҡы тауыш менән. Уйламағандан былай әсәһенә бушты һөйләргә мәжбүр булыуы өсөн ғәрләнде. Һәм һүҙҙе нисек тә тиҙерәк икенсегә күсерергә тырышты.

— Әсәй,— тине ул тағы борсоулы тауыш менән,— һине ниңә алманылар?!

Әсәһе ауыр көрһөнөп ҡуйҙы.

— Алыуын алдылар ҙа улым, тик бында, госпиталдә эшләргә, тиҙәр. Фронтҡа ебәрмәүҙәре үкенесле. Ә бына Павлоның атаһын да, әсәһен дә алдылар. Бер үк часҡә.

Ирек сәмләнеп китте.

— Нисек инде улай?! — тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе ул иламһыраған тауыш менән, — Павлоның әсәһе медсестра ғына булһа ла, фин һуғышында ла ҡат-

нашып, орден алып ҡайтҡайны, әле лә алынған. Ә һин врач булһаң да юҡ... Ниңә улай?

— Шулай тейеш, күрәһең.

— Нисек шулай тейеш булһын ти. Фронтта врачтар кәрәкмәйме ни? Ни өсөн, әйт?!

Улын тынысландырыр өсөн тураһын әйтеп биреүҙән башҡа юл тапмаған әсә, күҙенә инерҙәй булып текләп, яуап көтөп торған Иреккә ҡарап көлөмһөрәне лә:

— Тыуасаҡ бала өсөн, улым. Советтең өр-яңы граждандары тыныс шартта тыуырға тейеш тиҙәр, — тине, һәм шунда уҡ һүҙҙе икенсегә борҙо.— Әйҙә, улым, сәй эсеп алайыҡ. Сәй ҡайнатып бигерәк тә шәп иткәнһең инде. Юҡһа мин бик һыуһағайным.

Ирек әсәһенең был яуабынан бер ни ҙә тип әйтерлек аңламаһа ла, һорауын дауам иттерергә башҡа һүҙ тапманы. Әсә һаман улын йыуатырға тырышты:

— Госпиталдә эшләү, яралы боецтарҙың ғүмерҙәрен һаҡлап ҡалыу бик-бик почетлы эш ул...

Ирек өндәшмәне. Улар һөйләшмәй генә, ҡарашҡаршы ултырып сәй эстеләр. Сәйҙән һуң да һүҙ башлаусы булманы. Ятып йоҡларға кәрәклек береһенең дә иҫенә төшмәне. Өйҙә тик радио һөйләгән тауыш ҡына Иректең йөрәгенә бөткөһөҙ борсоу һалып, өҙләкһеҙ яңғырап торҙо.

Бына радио ла туҡтаны. Өйҙә ҡаты тынлыҡ урынлашты. Тирә-яҡ моңһоу булып китте. Бығаса бер ҡасан да радио туҡтатмаҫ элек йоҡларға ятмаған Ирек өсөн был тынлыҡ айырыуса күңелһеҙ тойолдо.

«Их, ошо саҡта атайым ғына ҡайтып инһә ине. Бөтә өй эсе йәмләнеп, күләсләнеп, бөтә нәмә теүәл, шат булып китер ине», тип уйланы ул, бошоноп.

— Әйе, — тип ҡуйҙы әсә, Ирektең уйын дөрөҫләгән кеүек, һәм, тағы бер аҙ өндәшмәй ултырғандан һуң, әсенеүле, ярһыулы тауыш менән һөйләп китте.— Донъяла үҙеңдең бөтә кешеләр менән бер тигеҙ хоҡуҡта булыуыңды, тормоштоң бөтә матурлығын, рәхәтен татырға хаҡлы булыуыңды төшөнгәндән һуң, яңынан бөтә нәмәнән мәхрүм ителгән ҡолға әйләнеүҙән дә ҡурҡынысрыраҡ нәмәнең булыуы мөмкинме, тип уйлайым мин.

Мин үҙемде башҡалар араһында бөтә яҡтан тиң хоҡуҡлы һәм бер нәмә менән дә кәмһетелмәгән кеше итеп һиҙергә мөмкин булған бер генә көн өсөн бөтә ғүмеремде бирер инем. Октябрь революцияһына тиклемге заманда кешенең нисек кәмһетелеүен, уның достоинствоһы нисек хурлап тапалыуын күрмәгән һеҙ, балалар, ирек тигән һүҙҙең ни тиклем бөйөклөгөнә төшөнөп тә етә алмайһығыҙҙыр, билдәле. Их, ни тиклем йөрәккә яҡын был һүҙ...

— Әсәй, әллә шуға күрә һин миңә исемде лә Ирек тип ҡуштыңмы?

— Эйе. Үҙемдең иң ҡәҙерле кешемә исем иттем мин был бөйөк һүҙҙе.

Ирек. Ысын мәғәнәһе менән иреклe кеше булыуҙан да, кешегә ҡол булмауҙан да бәхетлерәк хәлдең булыуы мөмкинме һуң?! Ә фашистәр бына беҙҙең ошо бөйөк бәхетте тартып алырға, уны үҙҙәренең ҡанлы табандары аҫтына һалып тапарға теләйҙәр. Улар мине, врачлыҡ дәрәжәһенә ирешкән башҡорт ҡатынын, яңынан шәл аҫтына, байҙар ишек төбөнә ҡайтарырға теләйҙәр. «Һин — башҡорт, һин түбән раса, һин ҡол булырға ғына хаҡлы» тип әйтергә теләйҙәр улар миңә.

Юҡ, быныц булыуы мөмкин түгел. Иректе бөтә нәмәнән өҫтөн һанаған һәм уны күп ҡорбандар биреп яулап алған совет халҡы быға юл ҡуймаҫ. Ватанды һаҡлау өсөн ирҙәр генә түгел, бөтә ҡатын-ҡыҙҙар ҙа күкрәк киреп сафҡа баҫыр. Фашизм ирҙәргә бер ҡоллоҡ килтерһә, ҡатын-ҡыҙҙарға икеләтә, өсләтә ҡоллоҡ килтерә ул. Ә ҡол булып йөҙ йыл йәшәгәнсе, ирек өсөн, бәхетле тормош өсөн ысын мәғәнәһендә кешеләрсә йәшәү өсөн героик көрәш менән тулған яҡты тормошта бер генә көн йәшәп үлеү ҙә мең ҡат артыҡ.

Тик бына миңә көрәштең урғып ҡайнаған ерендә булырға тура килмәүе ниндәй үкенесле...

— Әсәй, һин военкоматҡа иртәгә тағы барып ҡара, бәлки ебәрерҙәр, — тине Ирек, әсәһенең ҡайғыһын уртаҡлашып.

Әсә улына һөйөп ҡарап, үҙенә генә хас яғымлы көлөү менән көлөп ҡуйҙы:

— Эй, минең аҡыллы малайым! Атайың урынына ҡалған кәңәшсем!.. — Әсә улының арҡаһынан тыпылдатып һөйҙө лә ебәк кеүек ҡара сәстәренән үпте. — Әйҙә, йоҡлайыҡ, улым. Иртәгә байрам түгел. Күрәһеңме сәғәтте, нисәгә барып еткән?

Ирек үҙенең оло кешеләрсә биргән кәңәшенә әсәһенең ошолай көлөп кенә ҡарауына үпкәләне. Күңелһеҙләнеп:

— Минең йоҡлағым да килмәй әле, — тип кirelәнде.

— Ярамай, йоҡларға кәрәк, — тине әсә һәм улының залда торған карауатына урын йәйҙе лә үҙенең йоҡо бүлмәһенә инеп китте.

Ирек тә ятты. Ләкин ваҡыттың инде бик һуң булыуына ҡарамаҫтан, ул бик оҙаҡ йоҡлай алмай ыҙаланды. Уйҙар йөҙәттеләр уны.

«Атайым хәҙер ҡайҙа икән, тип уйланы ул. Бәлки, ошо сәғәттә уларҙың эшелондары һуғыш яғына табан ҡош кеүек осалыр. Ә атайым һаман шулай тыныс ҡына уйланып баралыр. Түҙемле, батыр кеше минең атайым. Ысын большевик. Моғайын, ул һуғышта бер ҡасан да еңелмәҫ...

Минең тимурсылар командаһының беренсе эше үҙебеҙҙең мәктәптең шефы булған колхозға барып ҡыр эшенә ярҙамлашыу булырға тейеш...

Павло хәҙер нәмә уйлай икән?.. Их, Павло!..»

Шулай уйланып ята торғас, Ирек еңел генә тирбәлеп киткәндәй булды. Уйҙар бер-береһе менән буталдылар ҙа ҡапыл бөтәһе лә онотолдолар. Йоҡо уны үҙ ҡосағына алды.

* * *

Ирректең командаһы бесән йыйыу эшенән туҡтағанда, ҡояш байып, ер өҫтөнә еңелсә ҡараңғылыҡ төшкәйне инде. Эштән туҡтауға, сигнал уйнағас, пионерҙәр тырмаларын, һәнәктәрен иңбаштарына һалып, бер урынға йыйылдылар.

— Команда, урындарға! — тип команда бирҙе Ирек. — Уңға тигеҙлән! Смирно!

Бер ай буйы ҡояш нуры аҫтында, асыҡ һауала эшләп, бронза төҫөнә ингән теремек һәм үтә сыр-

сыулы, тынғыһыҙ балалар шып туҡтап командирҙәре алдында смирно баҫып тынып ҡалдылар. Ирек, строй алдында, бер айлыҡ эш йомғағын иғлан итте. Айырыуса яҡшы эш өлгөләре күрһәткән пионерҙәрҙең исемлеген уҡыны, унан һуң командаһын ҡайтыу яғына алып китте.

Дөйөм ятаҡтарына етер алдынан улар йылғаға һыу инергә туҡтанылар. Пионерҙәр, трусиктәрҙән генә ҡалып, кемуҙарҙан һыуға һикерештеләр һәм өйрәк балалары кеүек йөҙә-сума һыу инергә тотондолар. Һыу буйы уларҙың шау-шыуы менән яңғырап, йәнләнеп китте.

«Их Павло ғына күрһә ине беҙҙе хәҙер. Ни тиер ине икән? Барыбер ҡыҙыҡһыныр ине. Ҡилмәне бит. Фронтҡа китәм ти ҙә ҡуя. Нишләтәһең инде уны...»

Ирек шулай уйланып торғанда, уның янына команданың иң алдынғы кешеһе, шаян һүҙле, тере тәбиғәтле пионер Марат йөҙөп килеп етте.

— Иптәш командир, әйҙә аҙаҡҡы тапҡыр йөҙөп, ярышып ҡарайыҡ. Ҡем уҙыр икән. Ҡем менән булһа ла ярышмай торһам, эсем боша башлай минең.

— Һин барыбер минән яҡшы йөҙә алмайһың бит.

— Әйҙә, әйҙә ярышып ҡарайыҡ. Мин командала һинән башҡа бөтәһенән алдын сығып бөттөм инде.

— Туҡта әле, туҡта, ана ҡара, килгәндә һыу ситенә төшөргә лә ҡурҡҡан Лилия нисегерәк йөҙә.

— Атайымдар мине һау түгел тип юҡҡа ғына йыл һайын санаторийгә ебәреп ыҙалағандар. Колхоз эшенә генә ебәрергә кәрәк булған мине. Колхозница булырға кәрәк миңә, ти ул хәҙер, — тип һүҙгә ҡушылды Ләлә.

— Ә һин үҙ тураңда нисек уйлайһың? — тине Ирек, Ләләне шаяртып.

— Минме, — тип шаян яуапланы Ләлә, — мин үҙемде әсәйем кеүек ткачиха булырға бик оҡшап торғандай һиҙәм. Ҡайтҡас та шул эшкә тотонорға кәрәк булыр.

Шул арала төрлө яҡтан йөҙөп килеп Ирек тирәһенә йыйылырға өлгөргән пионерҙәр:

— Ә мин, ҡайтҡас, слесарлеккә өйрәнәм.

— Ә мин — токарлеккә.

— Мин тракторист булырға теләйем, — тип һүҙгә ҡушылдылар.

— Улай булғас, ҡалаға ҡайтҡас та, бөтәбеҙ ҙә ҡулдан килгән эште эшләп, фронтҡа ярҙам итәсәкбеҙ, эйе бит, иптәштәр? — тине Ирек, шатланып.

— Ура, йәшәһен беҙҙең тимурсылар командаһы!

— Ура, ура! — тип күтәреп алдылар пионерҙәр. Уларҙың яңғырауыҡлы тауыштары, күмәк ҡулдар сәсрәткән һыу тауышына ҡушылып, йылға өҫтөнә килеп бәрелделәр ҙә алыҫтарға китеп яңғыранылар.

Һыу инеп, туҙандарҙан таҙарынып бөткәндән һуң, тимурсылар тағы стройға теҙелделәр һәм үҙҙәренең боевой йырҙарын йырлап дөйөм ятаҡтарына ҡайтып киттеләр.

* * *

Иртәгеһен таң менән Иректең командаһы ҡалаға ҡайтыу өсөн юлға сыҡты. Колхозсылар уларҙы йылы ҡараш менән оҙаттылар. Колхоз председателе команданың ай буйы колхозға, бигерәк тә уның утау эшендә күрһәткән ҙур ярҙамдарын билдәләп, тимурсылар командаһына һәм уның командире Ирекkә рәхмәт белдерҙе.

— Молодец, пионер иптәштәр! Һеҙ илдең ысын патриоттары булып үҫәһегеҙ, — тине ул.

Тимурсылар, колхоздың атын эштән туҡтатырға теләмәй, ун километр алыҫлыҡта ятҡан станцияға йәйәүләп киттеләр.

Йәйге иртәнең сағыу ҡояш нурҙарына ҡойоноп, ынйы бөртөктәрендәй йымылдашҡан, ауыр ысыҡ тамсыларына һығылышып ултырған ҡуйы йәшел үләндәр менән ҡапланған икһеҙ-сикһеҙ киң ялан, иртәнге йомшаҡ, еләҫ ел пионерҙәрҙең күңелдәрен тағы ла елкендереп ебәрҙе, уларҙы күбәләк шикелле осондороп алға алып китте.

«Их, ниндәй иркен, ниндәй гүзәл беҙҙең Белоруссия ҡырҙары», тип уйланы Ирек, тирә-яғына һоҡланып ҡарап. Һәм күкрәген тултырып тын алды ла:

— Киң минең, киң тыуған илкәйем һин... — тип йыр башлап ебәрҙе. Пионерҙәр бер тауыштан кү-

тәреп алдылар. Һәм шулай бөтә даланы яңғыратып йырлай-йырлай юлды нисек үтеүҙәрен һиҙмәй ҙә ҡалдылар.

Станцияға барып инеүгә, уларҙы бер төркөм пионерҙәр ҡаршыланы. Улар араһында һимеҙәк Серёжа ла бар ине. Салют биреп иҫәнләшкәндән һуң, Ирек өлкән кешеләрсә етди төҫ менән:

— Һеҙ ҡайҙан, Серёжа? — тип һораны.

— Ҡаланан, — тип яуап бирҙеләр пионерҙәр бер тауыштан.

— Ҡаланан икәнлегегеҙҙе былай ҙа беләм инде, — тине Ирек, үҙ һорауының урынһыҙыраҡ сығыуынан уңайһыҙланып. Шул ваҡыт Иректең эргәһендә үк баҫып торған Серёжа ҡапыл ишеккә күрһәтте:

— Ана беҙҙең командир үҙе инеп килә.

Ирек, һиҫкәнеп, ҡапыл артына боролдо һәм үҙенең:

— Павло, һинме ни был?! — тип ҡысҡырып ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

— Эйе, мин, Ирек дуҫ! — тине Павло, ҡыуанысынан бөтә станцияны яңғыратып, һәм, ни эшләргә белмәй, аптырап ҡалған дуҫына ҡаршы ҡосағын йәйеп югерҙе. Улар, бер-береһен дөмбәҫләй-көрмәкләшә, ҡосаҡлашып күрештеләр.

— Их, мин һине ҡалай һағындым, Павлуша!

— Мин дә...

— Гел генә уйлап йөрөнөм!

— Мин дә уйланым. Шуға бына алмашҡа тимурсылар командаһы төҙөп алып килдем. Команда насар түгел, гел отличник уҡыусыларҙан тора.

— Бына молодец!

— Һин дә молодец, мине еңдең!

Дуҫтар оҙаҡ һөйләштеләр. Ирек Павлоны уның командаһына колхозда эшләргә тура киләсәк эштәр менән таныштырҙы.

— Эш бик еңелдән түгел, ләкин пионерҙәр ҡыйынлыҡты еңергә тейештәр, — тине ул һүҙенең аҙағында, тәжрибәле өлкән кешеләрсә дуҫына кәңәш биреп.

— Пионерлек исеменә тап төшөрмәбеҙ, тыныс бул, дуҫ! — тине Павло.

— Билдәле, шулай, — тине Ирек, дуҫының күҙенә текләп ҡарап һәм тағы ла ниндәйҙер, йылы, ярымлы һүҙҙәр әйтмәксе ине лә, ул арала паровоз ҡысҡырып ебәрҙе. Пионерҙәр шаулашып вагондарға йүгерҙеләр. Дуҫтар ашығыс ҡына хушлаштылар.

— Тиҙҙән күрешкәнгә тиклем һау бул, Ирек!

— Хуш. Уңышлы эш теләйем, Павло!

Бер нисә минуттан поезд ҡуҙғалды. Ирек үҙ командаһы менән ҡалаға ҡайтып китте. Павло уларҙы, поезд күҙҙән юғалғанса, кепкаһын болғап, оҙатып ҡалды. Унан кепкаһын ҡулына тотҡан килеш иптәштәренә табан боролдо һәм, һынаулы күҙ менән уларға бер аҙ ҡарап торғандан һуң, яңғырауыҡлы тауыш менән һүҙ башланы:

— Иптәштәр! — тине ул, үҙенең тулҡынланыуын һиҙҙермәҫкә тырышып, — беҙҙең алда ҙур эштәр тора. Беҙ мәктәбебеҙҙең шефындағы был колхоздың урожайын юғалтыуһыҙ һәм тиҙ арала йыйып алыуҙа ҡулдан килгән бөтә ярҙамды күрһәтергә, уҡығандағыса, тик отличноға ғына эшләргә тейешбеҙ. Беҙҙең арала илаҡтар, ялҡауҙар булмаҫҡа тейеш. Бөйөк Ватан һуғышы, һөйөклө Тыуған илебеҙ беҙҙән шуны талап итә. Илебеҙҙең яҙмышы хәл ителгән бер ваҡытта беҙ көндө элеккесә тик уҡып, йәки уйнап ҡына үткәрә алмайбыҙ. Беҙ фронтҡа ярҙам итергә тейешбеҙ... Тыуған илебеҙ беҙгә шулай ҡуша.

Павлоның был ҡыҫҡа, ләкин йөрәк һүҙҙәре пионерҙәргә ныҡ тәьҫир итте.

— Дөрөҫ!..

— Фашизмгә үлемде тылда ла әҙерләү өсөн! Ура! Урра!! — тип ҡысҡырыштылар пионерҙәр, Павлоның һүҙен ҡеүәтләп. Ә унан һуң сафҡа теҙелделәр ҙә Ирекләр килгән юл менән ашыға-ашыға колхозға йүнәлделәр.

* * *

Ирекләр йәшәгән ер Белоруссия ҡалаларынан береһе булып, хәҙер фронтҡа бик яҡын тора ине инде. Иректең атаһы хәрби хеҙмәте буйынса бынан биш йыл элек был ҡалаға килеп урынлашҡайны. Һәм алыҫ Башҡортостандан ғаиләһен дә күсереп алып

килгәйне. Башҡорт малайы Ирек был бәләкәй генә, ләкин алма баҡсалары эсенә сумған белорус ҡалаһын сикһеҙ яратты. Беренсе башлап ошо ҡалала мәктәпкә инеү, бергә уҡыған иптәштәре, уҡытыусылары һәм иң яҡын дуҫы Павло уға был гүзәл ҡаланы тағы ла яҡынайттылар. Был ергә ул үҙенең тыуған ауылы кеүек эйәләште. Шуға күрә фронттың бында яҡынлашып килеүе Иректе бик ныҡ борсой башланы. Был турала уйлап уның төндәр буйы йоҡлай алмай сыҡҡан ваҡыттары ла күп булды.

«Нисек инде ошондай матур ҡаланы, уның шундай тыныс, рәхәт тормошон фашистәр ҡулына ҡалдырмаҡ кәрәк. Ҡаланы ул эттәргә биргәнсе, уның өсөн һуғышып үлеү артыҡ. Их, ҡулымда ҡорал ғына юҡ. Ниңә мин, исмаһам, бер нисә йыл элегерәк тыумағанмын икән. Миңә хәҙер һис юғы ун алты йәш булһа ине», тип борсолоп уйланды Ирек.

Ләкин уның кескәй йөрәге быны ни тиклем генә һыйҙыра алмаһа ла, совет ғәскәрҙәре илде обороналау һәм дошманға тағы ла ҡатыраҡ удар ҙар яһау өсөн уңайлыраҡ позицияға күсергә булдылар. Ҡаланан госпиталдәрҙе, граждан халҡын һәм завод-фабрикаларҙы алыҫ тылға күсереү башланды. Бер көн Ирректең әсәһе иртә менән госпиталгә китҡән сағында Иреккә йыйынып, әҙерләнеп торорға ҡушып ҡалдырҙы.

— Бәлки, бөгөн күсеп китербеҙ, — тине ул.

«Мин бер ҡайҙа китмәйәсәкмен!» тип донъя яңғыратып ҡысҡырғыһы килде Иректең. Ләкин ул әсәһен урынһыҙ борсоуҙан ҡурҡып өндәшмәне. Ә эстән уның йөрәге өҙөлөп әрней, ул үҙен ҡаланы ташлап бер ҡайҙа ла китә алмаҫ кеүек тоя ине.

Иректең әсәһе сығып китеүгә, кемдер ҡыйыуһыҙ ғына ишек ҡаҡты.

— Мөмкин, — тине Ирек.

Унан Павлоның ҡустыһы — пионер Сережа килеп инде.

— Сережа, һаумы? Ҡайттығыҙмы ни? — тип ҡысҡырып ебәрҙе Ирек.— Павло ҡайҙа, ниңә бында килмәне? — тип өҫтө-өҫтөнә һорауҙар яуҙыра-яуҙыра, Сережаны ҡултыҡлап өҫтәл янына килтереп ултырт-

тәрҙе йыйып кем һуң утҡа ырғытыр! Фашистәр шуны эшләнеләр, ни өсөн?!»

Ирек, уйының ошо еренә еткәс, ҡапыл урынынан һикереп торҙо, бәләкәй йоҙроҡтарын ҡаты йомарлап, ниҙер эшләргә йыйынған кеүек, һауала уйнатты. Уның күҙҙәре, сикһеҙ асыу менән ҡыҫылып, осҡонланып яндылар. Ул телмәр һөйләргә әҙерләнгән кеше һымаҡ кәүҙәһен турайтты ла ярһыулы тауыш менән:

— Ҡәҙерле Павло! — тине, — һин әле бик кескәй булһаң да, был юлбаҫарҙарға ҡаршы мылтыҡ тотоп һуғышырға теләнең. Тик һин уға өлгөрә алманың. Тыныс бул, Павло, ул мылтыҡты мин алырмын!

— Мин дә алырмын! — тип өҫтәне Сережа, Ирек янына йәнәш баҫып. Һәм ойпаланып күҙенә төшөп торған ерән сәстәрен артҡа һыйпап, башын юғары күтәрҙе. Уның эре һары һипкелле, көнгә янып ҡыҙарған йөҙө кинәт яҡтырып, асылып киткәндәй булды.

— Һин дәме?! — тип ғәжәпләнгән дә, шатланған да тауыш менән һораны Ирек. Уның һынаулы күҙҙәре Сережаның тәрән күк күҙҙәре менән осраштылар һәм улар бер аҙ ваҡыт шул ҡарашҡан хәлдә ҡатып ҡалдылар.

«Эйе, ул ысынды әйтә. Ниндәй һәйбәт иптәш. Нисек һуң мин быға тиклем уны бер ҙә яҡшылап белмәгәнмен. Бер класта ултырып, хатта мин уның ниндәй отметка менән уҡыуын да юнләп белмәйем бит. Туҡта әле, туҡта, әҙерәк хәтерләйем. Уны, китаптарҙы бик күп уҡый, бигерәк тә һуғыш һәм геройлыҡ тураһындағы китаптарҙы уҡырға ярата, тип бер ишетеп ҡалғайным булһа кәрәк... Ашамһаҡ, тип, һимеҙәк, тип көлә торғайныҡ беҙ унан...

Ҡласта артыҡ бер ни менән дә иптәштәренән айырылмаған был аҙ һүҙле, тыныс тәбиғәтле, уйсан малайҙа ошондай ҡыйыу йөрәк барҙыр тип кем уйлаған?!» тип уйланы Ирек. Һәм ышанысле итеп:

— Эйе, беҙ, һинең тере ҡалған иптәштәрең, алырбыҙ. Беҙ бала тип был һуғыштан ситтә тороп ҡала алмайбыҙ. Беҙ, балаларҙың иң яуыз дошманы фашис-

тәргә ҡаршы һуғышта ҡорал алып, үҙебеҙ ҙә ҡатнашасаҡбыҙ, — тип ҡуйҙы.

— Ә фашистәрҙе ҡырып бөтөргәс, Павлоларҙың ҡәбере өҫтөнә сәскәләр үҫтерербеҙ, йәме, Ирек?!

— Эйе, Сережа. Тыныс йоҡла Павло, врач булып етешергә тура килмәне һиңә. Ләкин һин былай ҙа кешенең иң яҡын дуҫы булыуыңды күрһәттең.

Тыныс йоҡлағыҙ, пионер иптәштәр, һеҙҙең үсте алыр өсөн мин бында ҡалам.

— Мин дә ҡалам, — тине Сережа һаман шулай Ирек янында баҫып торған килеш. Уның йөҙөндә хәҙер баяғы илау эҙҙәре бөткән, уның урынына ниндәйҙер етди ҡыйыулыҡ ҡына ҡалған ине.

— Ысынмы, Сережа? — тип һораны Ирек сикһеҙ ҡыуанып һәм, йәнә иптәшенең ике иңбашынан тотоп, күҙҙәренә текәлде. Ә Сережа ҡырҡыу итеп:

— Эйе, ҡалам, партизан булырбыҙ, — тип ҡабатланы.

— Булды, — тине Ирек, Сережаның ҡулын ҡыҫып. Улай булғас, әйҙә, тиҙерәк китәйек бынан. Юҡһа, минең әсәйем хәҙер ҡайтып инер ҙә мине үҙе менән бергә тылға алып китер.

— Әйҙә.

Иптәштәр етәкләштеләр ҙә ашығып, югереп сығып киттеләр.

* * *

Ирек өйҙәренә кис менән бик һуң ҡайтып инде. Һәм өҫтәлдә әсәһе яҙып ҡалдырған ҡағыҙҙы алып уҡыны.

«Ирек, мин һине оҙаҡ көтөп тора алманым. Миңә госпиталь менән бергә күсергә кәрәк булды. Ә һин әсәңде тыңламай сығып киткәнһең. Мин бик ҡаты борсолдом. Ҡайтып инеү менән вокзалға төш һәм берәр поезға ултырып минең арттан барып ет», тип яҙғайны ул. Ирекқә әсәһе сикһеҙ ҡыҙғаныс булып китте.

— Эй әсәкәйем, һиңә бик ауыр булғандыр шул. Ләкин, ғәфү ит, әсәй, мин бынан китә алмайым, — тине ул, әсәһенең яҙыуына ҡарап. Уның күңеле йом-

шарғандан-йомшара барҙы. Хужаһыҙ ҡалған квартира сикһеҙ моңһоу һәм ҡайғылы күренде уға. — Әле күптән түгел генә беҙ бында атайым, әсәйем, мин, өсәүләп, ниндәй күңелле итеп йәшәй инек бит, эс бошоуҙың, илауҙың ни нәмә икәнен дә белгән кеше юҡ ине. Ә хәҙер, бөтәһен дә ташла ла ҡалдыр, имеш. Етмәһә кемдәргә ҡала бит әле. Уйлауы ла ауыр. Хәҙер ошо ваҡытта фашистәр килеп инһәләр, мине киҫәктәргә өҙгөләрҙәр... Ниңә әсәйем менән китмәнем икән мин...

Ирек ғүмерендә беренсе тапҡыр үҙен йыртҡыс ауыҙына ташланған япа-яңғыҙ, ярҙамсыһыҙ кеше итеп һиҙҙе. Һәм был һиҙенеү артыҡ ауыр ине. Ул түҙә алманы. Өҫтәлгә башын ҡуйҙы ла шым ғына илай башланы. Оҙаҡ иланы Ирек. Ә унан һуң, күңеле еңеләйгән кеүек булып, башын күтәрҙе һәм, ни нәмәләр эҙләгәндәй, күҙен өйҙөң бөтә урындарына югертеп сыҡты. Унда бер рамда уның атаһы, әсәһе менән өсәүләп төшкән һәм буяулы итеп эшләнгән һүрәттәре тора. Улар өсөһө лә көлөп төшкәндәр.

«Ниндәй ҡайғыһыҙ саҡ! Әсәйем был карточканы алып китергә, күрәһең, онотҡандыр. Ашығыс китте шул».

Ә икенсе алтынлы рамда Ленин портреты. Ул яғымлы йылмайып, Иреккә туп-тура ҡарап ултыра. Ирек тә күҙен ала алмай уға оҙаҡ ҡарап торҙо. Ленин бабаһы уға:

— Үҙең пионер, ә илап ултыраһың, — тип уның йомшаҡлығынан көлә кеүек тойолдо. Ирек уңайһыҙланып китте һәм, ғәйепле кешеләй, танауын ныҡ итеп тартып, еңдәре менән күҙҙәрен һөртөп ҡуйҙы. Һәм ғәфү үтенгән һымаҡ:

«Мин былай ғына, яңылыш ҡына бит. Фашистәр бында килһәләр ҙә, оҙаҡ йәшәй алмаҫтар. Барыбер көлдәрен күккә осорорбоҙ. Мин бынан һуң бер ваҡытта ла иламаясаҡмын...» тип уйланы.

Ошо ваҡыт баш осонда ғына самолет осҡан тауыштар ишетелде. Бик яҡында ҡолаҡ тондорғос шартлауҙар яңғыраны. Өй нигеҙенән алып дер һелкенде.

«Күрәһең, фашист ҡоҙғондары килделәр», тип уйланы Ирек һәм йәһәт кенә электрҙе һүндерҙе. Ләкин нисектер бер төрлө лә ҡурҡыу һиҙмәне. Ул хәҙер үҙендә бомбанан да үлмәҫ көс һиҙә ине.

«Был йыртҡыстарҙан бик ныҡ итеп үс алаһы булғанда нисек үлеп тормаҡ кәрәк. Унан һуң мин бында яңғыҙ түгел, Ленин бабай үҙе минең менән», тип уйланы ул һәм карауатына барып ятты ла йоҡлап та китте. Ул үтә нык арығайны.

* * *

Иректең әсәһе китеп, өс көн үтеүгә, ҡалаға фашистәр инде. Шул ваҡыт Ирек стеналағы рамдан Ленин портретен һәм теге атаһы, әсәһе, үҙе өсәүләп көлөп төшкән карточкаларын алып, ҡәҙерләп, аҡ ҡағыҙға төрөп, ҡуйынына йәшерҙе, өҫтөнә алама эйберҙәр табып кейҙе лә яланбаш урамға сығып китте. Һәм бер ни белмәгән урам малайы рәүешендә фашистәрҙең йыртҡыслыҡтарын күҙәтеп көн буйы урамда йөрөнө.

Фашистәр үҙҙәренең самолеттары тарафынан яртылаш емерелеп, яндырылып бөткән был ҡалаға килеп инеү менән, тыныс халыҡты талау, язалау башланды. Ҡоршайып бөткән ас яңаҡлы, йыртҡыс төҫлө ҡурҡыныс йөҙлө немец һалдаттары бер өйҙән икенсеһенә югерешеп инәләр һәм күҙҙәренә күренгән бөтә нәмәне талап-тартып алып сығалар. Өйҙәрҙә атыу, илау, һыҡтау тауыштары өҙлөкһөҙ яңғырап тора ине.

Бына бер тыҡрыҡтан йәш бер ҡыҙ килеп сыҡты. Уның ҡулында ниндәйҙер бер аҡ төйөнсөк бар. Бер фашист һалдаты менән офицер уға ҡаршы югерҙеләр. Һалдат уның төйөнсөгөн тартып алды. Ә офицер уны яҡындағы бер өйҙөң ишек алдына һөйрәкләй башланы. Ҡыҙ тартылды, ялынды, ярҙамға кешеләр саҡырҙы, ахырҙа офицерҙең ҡулын айыра тешләп алды. Офицерҙең күҙенә ҡан тулған ҡурҡыныс йөҙө тағы ла ҡот осҡос булып ҡотороноп китте һәм ул пистолетен сығарҙы ла ҡыҙға атты. Ҡыҙ ҡулдарын сәйер йәйеп бер аҙ югереп барҙы ла йөҙтүбән әйләнеп мостовойға ауҙы.

— Әһә, рус, мамка капут?! — тип ырылданы офицер һәм, тештәрен ыржайтып, көлә-көлә китеп барҙы.

Шунда алыҫ түгел бер йорт янында был күренеште күҙәтеп торған Иректең бөтә тәненә боҙло һыу ҡойоп ебәргән һымаҡ булды, йөҙө ағарынып, быуындары ҡалтырап китте. Тештәре ирекһеҙҙән шыҡырҙап ҡыҫылдылар, ҡулдары ҡаты йомарланды.

«Ах, минең ҡулымда хәҙер атайымдың браунинге булһа ине!»

Ләкин ул үҙен ҡулға алды һәм, үҙенә ҡарата шик уятмаҫ өсөн, был ҙур енәйәт эшләнгән урынға арты менән боролдо ла әкрен генә алға китте. Бомбалар менән емертелеп, яндырылып, ташландыҡ хәлгә килтерелгән йорттар янынан бара торғас, үҙәк урамдарҙың береһенә барып сыҡты. Һәм унда баяғынан да ҡот осҡосораҡ күренешкә осраны. Унда, ҙур майҙанда, дар ағастары яһалған һәм уларға унлаған кеше аҫып ҡуйылғайны. Улар араһында ике ҡатын һәм бер бала кәүҙәһе лә бар. Аҫылған кешеләрҙең күкрәктәренә таҡталар элеп ҡуйылған һәм ул таҡталарға «баш эйергә теләмәгән һәр бер кеше менән ошо хәл буласаҡ» тип яҙылған ине.

Бынан ары Иректең артыҡ күҙәтеп йөрөр хәле ҡалманы. Ул башын түбән эйҙе лә ҡала ситенә сығып китте, һәм унда ҡаланы көньяҡтан уратып аҡҡан мул һыулы тымыҡ йылғаның текә яры аҫтына төшөп китте.

Ҡискә табан күк йөҙөн ҡалын ҡара болот ҡапланы һәм, күп тә үтмәй, ҡойоп ямғыр яуырға тотондо.

Төн етте. Төн ғәҙәттә булмаған рәүештә ҡараңғы булды бөгөн. Ирек ошо ваҡытта әкрен генә урынынан торҙо ла үҙ квартиралары яғына китте.

Урамда патрулдәрҙән башҡа бер кем дә юҡ. Ғәҙәттә был ваҡытта халыҡ менән ҡайнап торған ҡала ташландыҡ урын шикелле тын ята. Тик унда-бында атыш тауыштары ғына әленән-әле яңғырап тора. Был атыштар, халыҡты талау һәм язалау әле, төнөн дә, дауам итеүен күрһәтә ине.

Ирек ҡайтып етте һәм ҡуйы ҡараңғылыҡ эсендә ҡайғылы төҫкә инеп ултырған квартираларының ҡа-

йырып асылған ишеге төбөнә килеп туҡтаны. Тирәяҡты бик ҙур иғтибар менән тыңланы. Әйләнә-тирә тын һәм кешеһеҙ ине. Ул өй эсенә инде һәм шырпы яндырып ҡараны. Уның күҙ алдында ятһыҙ рәүештә талау эҙҙәре асылды. Өй эсендә ҡиммәтле әйберҙәрҙең береһе лә ҡалмаған, ә алып китергә мөмкин булмаған бөтә нәмәләр ватылып, емерелеп иҙәнгә ташланған. Хатта стеналағы картиналарға тиклем вата һуғып бөтөрөлгәйне.

«Әлдә Ленин бабай портретен алып киткәнмен», тип уйланы Ирек һәм ҡуйынындағы портретте йөрәгенә тағы ла нығыраҡ ҡыҫып ҡуйҙы. Унан һуң, эше бөткән кеше һымаҡ, кире ишеккә табан атланы. Шул ваҡыт уның аяғы ниндәйҙер йоморо, ҡаты нәмәгә бәрелде. Ирек тағы шырпы һыҙҙы һәм унда сумкаһы менән бер бәйләм ҡул гранатаһы ятҡанын күрҙе.

«Талауға мауығып, онотоп ҡалдырғандар, күрәһең. Йәки талап алған нәмәләрен күтәрергә көстәре етмәҫтәй булғас, ташлап киткәндәрҙер», тип уйланы Ирек һәм гранаталарҙы алып, әйләндереп-тулғандырып ҡарап, уйға батып ултырҙы. Унан ҡапыл, йәнләнеп, урынынан һикереп торҙо.

«Беләм, беләм, иҫкә төштө. Отрядтә граната ырғытырға өйрәнеүҙең бына ҡайҙа кәрәге булды уның!»

Ирек ашыға-ашыға гранаталарҙы ҡуйынына йәшерҙе лә йәһәт кенә өйҙән сығып китте. Уның бәхетенә ҡаршы төн һаман шулай ҡараңғы һәм ҡойоп ямғыр яуа ине.

Ирек немец ғәскәрҙәренең штабы урынлашҡан элекке Горсовет йорто ҡаршыһына, тротуар буйына, килеп боҫто һәм ҙур диҡҡәт менән йорт эсен күҙәтә башланы. Штаб йорто бик яҡты булып, унда күп кенә офицерҙәр күренә, ә йорттоң парадный ишеге төбөндә бер автомобиль тора ине. Күп тә үтмәй, йорттан ике офицер килеп сыҡты һәм, үҙҙәренсә бик күңелле итеп ниҙер һөйләшеп, көлә-көлә машинаға инеп ултырҙылар.

Иректең йөрәге атылып сығырҙай булып тулап китте, аяҡ аҫтынан ер күсеп киткәндәй булды. «Ах, китәләр бит... Шулай уҡ булдыра алмаммы икән

ни?!» тигән ғазаплы уй йәшен тиҙлеге менән уның мейеһен ярып үтте.

Ләкин шул ваҡыт ниндәйҙер бер көс Иректе боҫҡан урынынан туп шикелле бәреп сығарҙы. Ул, сысҡанға ташланған бесәй шикелле, машина янына һикерҙе лә гранаталар бәйләмен уның тап өҫтөнә ырғытты.

— Мә, һеҙгә, Павло өсөн!

Шартлау шул тиклем көтөлмәгәндә булды, хатта автомобиль янында торған һалдаттар ҙа ҡасып ҡотола алманылар, машиналағы офицерҙәре менән бергә киҫәктәргә өҙгөләнеп күккә остолар. Ниндәйҙер көслө тулҡын Иректе мостовойҙан тротуарға алып ырғытты. Ҡоторонол, ҡурҡынысла енәйәтсене эҙләгән фашистәр тротуарҙа йоҡлапмы, үлепме ятҡан һәләмә малайға иғтибар итмәнеләр. Ә төндә, тирә-яҡ һил булғас, Ирек ҡараңғы урамдарҙың береһенә инеп юғалды. Шул китеүҙән, үҙенең ҡайҙа барырға тейешлеге тураһында уйлап та ҡарамаҫтан, ҡаса-боҫа алға югерҙе. Оҙаҡламай ул ҡаланан бөтөнләй үк сығып китте. Уның юлы күптән түгел Павло менән балыҡ тотҡан урынға килеп сыҡты. Күптән түгел Павлоның атаһы мандолина уйнап ултырған ҡарт тирәк төбөнә килеп һөйәлде лә үкһеп-үкһеп илап ебәрҙе.

Ә әйләнә-тирәлә һаман ямғыр яуҙы. Уның тамсылары тирәк япраҡтарына бәрелеп өҙлөкһөҙ ҡыштырҙаштылар. Туҡтауһыҙ күк күкрәне, йәшен йәшнәне. Көслө ямғырҙан ташып, ярҙарынан ашып сыҡҡан йылға шаулап, гөрләп аҡты. Ә Ирек, илауҙан туҡтаһа ла, ауыр уйҙар тәьҫиренән ҡотола алманы. Һаман шунда баҫып торҙо ла торҙо.

«Ҡасан ғына һуң әле был ерҙәр ниндәй яғымлы, ниндәй күңелле ине бит. Ә хәҙер... Ҡайһылай асыулы, дәһшәтле. Күрәһең, тәбиғәт тә был ас бүреләрҙең ер бысратып йөрөүҙәренә түҙә алмай торғандыр», тип уйланы Ирек.

Ул, Павло менән балыҡ тотоп ултырған урындарын күрергә теләп, яр ситенә килде. Ләкин ул урынды һыу баҫҡайны хәҙер. Шулай ҙа Ирек унан күҙен ала алмай оҙаҡ ҡарап торҙо. Ә һалҡынса ямғыр тамсылары уның бөтә тәне буйлап югерҙе.

Ирек күптән түгел генә бында үткән ял көнөн, әсәһен, Павлоны, уның һәләк булыуын, үҙенең яңғыҙлығын хәтерләне. Бик, бик ауыр булды уға. Үкһеп, үкһеп, тағы-тағы илағы килде уның.

«Ах, Сережа, Сережа, исмаһам, һинең менән икәү булһаҡ ине хәҙер... Ләкин мин һине алыр өсөн ҡалаға ҡайта алмайым шул инде...»

Ул уйын икенсегә, әле генә булып үткән ваҡиғаға, күсерҙе. Уға, нисектер, ҡапыл еңел булып китте. Хатта ул йылмайып та ҡуйҙы:

«Нисегерәк ботай-сатай күккә остолар!..

Был башы ғына әле, Павло! Һинең өсөн беҙ уларҙан үсте былай ғына алмабыҙ әле...»

Ирек ҡаты йомарланған кескәй йоҙроҡтарын ҡараңғылыҡта уйнатты. Унан һуң, ни нәмәлер иҫенә төшкәндәй, ҡапыл артына әйләнде лә йылға буйы туғайлығына инеп юғалды.

Шул ваҡыт яҡында, бик яҡында ғына, гранит тауҙар емерелгән һымаҡ булып, ер һелкетеп күк күкрәне. Әйләнә-тирәне көндөҙгөләй яҡтыртып йәшен ялтыраны. Ямғыр баяғынан да шәберәк, көслөрәк ҡойоп яуырға тотондо.

## II

Урман. Икһеҙ-сикһеҙ ҡуйы урман. Көн-төн туҡтауһыҙ ҡойған ямғыр уның эсен батҡаҡҡа әйләндергән. Тик ҡарт имәндең көнбағыш башы шикелле йәйелеп, ҡалпаҡланып үҫкән яҫы япраҡтары ғына был ямғырға һаман бирешмәгәндәр. Имән төбөндә түңәрәк ҡоро урын ҡалған. Шул ҡоро урында ҡарт имәндең ер өҫтөнә үк ҡалҡып сыҡҡан тамырына башын һалған да салҡан төшөп бер малай ята. Уның аяҡ-ҡулдары, биттәре тырналып, ҡанап, кейемдәре өҙгөләнеп, йолҡҡоланып бөткән. Күрәһең, был малай таныш булмаған урман араһында юлһыҙ-ниһеҙ күп ерҙәр йөрөгәндер һәм арып ял итергә ятҡандыр ҙа ҡаты йоҡоға талғандыр. Кем белә, бәлки ул шулай мәңгелеккә тынып та ҡалғандыр.

Сеү. Ана суҡ япраҡлы ҡайын ағастары аҫтынан боҫоп ҡына кемдер килеп сыҡты. Ул мылтығына та-

янды ла күҙҙәрен ҡыҫыбыраҡ малайға теклəп ҡатып ҡалды.

Уның өҫтөндә һырылған, майланып, ялтыр ҡара төҫкə ингəн салбар менəн пинжəк, башында ла шундай уҡ майланып бөткəн ҡара кепка. Кепка аҫтынан бөтөнлəй тип əйтерлек ағарған сəстəре күренеп тора. Уның терпəйеп торған оҙон мыйыҡтары ла, күҙ ҡабағы өҫтөнə һалынып төшкəн ҡаштары ла ҡара түгел, əллə нисек күгелйем төҫлө булып күренəлəр. Ə киң яурынлы ныҡ кəүҙəһе менəн ул йəш кешелəргə оҡшап тора ине.

Был мылтыҡлы кеше, шулай шым ғына бер аҙ ҡарап торғандан һуң, аяҡ осо менəн генə баҫып малай янына килде. Сүгəлəп эргəһенə ултырҙы һəм уны уята башланы.

— Эй, малай, малай, тор! Һин кем?.. Бында ни эшлəп ятаһың?

Малай, һаташҡан кеше кеүек, ҡапыл тороп ултырҙы ла ҡурҡҡан күҙҙəрен ҙур асып уятыусыға теклəне.

— Ə мин... мин...

— Исемең кем?

— Исемем, ə исемем тиһегеҙме?!

— Эйе, исемең кем, үҙең ҡайҙан, тим?

— ... Павло... исемем Павло минең. Ə һин үҙең кем булаһың, олатай?

— Улым, тиҙерəк тор. Бында күп һөйлəнеп ултырырға ярамай. Унда... Эйе, минең йортҡа барғас, һөйлəшербеҙ. Унда мин һиңə үҙемдең кемлекте лə һөйлəрмен. Əйҙə, йəһəт бул.

«Үҙ кеше булырға оҡшай», тип уйлап алды малай ҡыуанып һəм ышаныслы тауыш менəн:

— Əйҙə, улай булғас, — тине. Һəм, көскə урынынан ҡуҙғалып, мылтыҡлы кешенең артынан эйəрҙе. Шəфҡəтле ҡарт имəн, яҫы япраҡтарын əкрен генə елберҙəтеп, уларҙы оҙатып ҡалды.

* * *

Партизандар отрядендə малайҙы бик телəп ҡаршыламанылар.

— Алып килеүен килгәнһең дә, Семен Борисович, бала-саға эше түгел бит был, — тине командир. — Бында төрлө хәлдәр була. Ул түҙә алмаҫ?!

— Походтарға сыҙамаҫ.

— Тегеләр ҡулына эләгә-нитә ҡалһа, отрядте тотторол ҡуйыуы ла мөмкин, бала кеше бит, — тиештеләр башҡа партизандар.

— Ҡуйығыҙсы, бушты һөйләмәгеҙсе. Оло кешенең ниндәйе юҡ та, баланың ниндәйе юҡ. Йөрәгендә уты булмаһа, бынау тиклем ыҙалар күреп, партизан булам, тип урман эсендә япа-яңғыҙы йөрөмәҫ ине ул бала, — тип ҡаршы төштө ҡарт эшсе Семен Борисович.

— Ярай, улай булһа, малай отрядтә ҡалһын, тик, Семен Борисович, яуаплылыҡ һинең өҫтә буласаҡ, ҡара уны, — тине командир, ҡарт партизанға һынаулы ҡараш ташлап, — мин үҙем бала-саға менән эш итеп ҡараған кеше түгел. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, мин уларҙы аҙ беләм.

— Тыныс булығыҙ, иптәш командир, малайҙы үҙ ҡарамағыма алам. Минең менән бергә разведчик булыр. Шулай уҡ һеҙ ҙә, иптәш командир, ундай малайҙар менән эш итә беләһегеҙ. Беҙҙең заводта партком секретаре булып эшләгән ваҡытығыҙҙа ғына аҙмы малайҙарҙы кеше иттегеҙ. Хулиган малайҙарҙан комсомол булып, стахановсы эшсе булып китеүселәр аҙ булманы. Ә был бына тигән малай. Ундайҙар күберәк булһын ине әле...

Семен Борисович кеше тураһында ысын күңелдән ҡайғыртыусан, һалҡын тәбиғәтле, һиҙгер күңелле был кешене күптән белә һәм уға ҙур хөрмәт менән ҡарай, уның тураһында һәр ваҡыт:

— Бына был ысын коммунист, исмаһам! — тип һөйләй торғайны. Шуға күрә ул командирҙең был малайҙы отрядҡа бик үк теләп алып ҡалмаһа ла, ҡалдырғас инде, уның тураһында һис шикһеҙ ҙур хәстәрлек күрһәтәсәгенә ныҡ ышана ине.

— Эшсе итеү ул бөтөнләй башҡа нәмә, Семен Борисович, — тине командир, был урынһыҙ маҡтауға уңайһыҙланып. Маҡтауҙы яратмай ине ул.

Тау ҡыуышында ошондай һүҙ барғанда, малай шул тау итәгендәге бәләкәй таш өҫтөндә ултыра һәм тирә-яғындағы ғәжәп матур тәбиғәт күренешен күҙәтә ине.

Тармаҡланып, алыҫтарға һуҙылған тәпәшәк тау. Уның түбәһендә аҙ ғына асыҡ урын ҡалдырып, итәктәрен ҡуйы ағаслыҡ ҡаплаған. Был урманлыҡ бер тоташтан тирә-яҡҡа һуҙылып, осһоҙ-ҡырыйһыҙ һымаҡ күренеп ята. Ә партизан отряде урынлашҡан тау ҡыуышы һис бер кеше һиҙмәҫлек булып ағастар менән ҡапланып алынғайны. Һаҙлыҡлы уйһыулыҡтар ҙа был урынды сит кеше аяғынан ныҡ һаҡлай ине.

«Бындай урынды фашистәр һис тә таба алмаҫтар, ә беҙ таптыҡ», тип уйланы малай, ғорурланып. «Беҙ... беҙ, тим... Иртәрәк түгелме? Әгәр мине отрядкә алмаһалар?.. Ниңә Семен Борисович һаман килмәй икән?! Ултырып ҡына тор, мин хәҙер килермен, тине лә китте... Юҡ. Алһалар ҙа, алмаһалар ҙа мин партизан булдым инде...»

— Павло, эй Павло!— тигән тауышҡа малай һиҫкәнеп китте һәм шунда уҡ үҙ янында Семен Борисовичтең баҫып торғанын күрҙе.

«Нисек һиҙҙермәй генә килеп сыҡты. Оҫта!» тип һоҡланды малай һәм асыҡ тауыш менән:

— Ни бар, олатай? — тип һораны.

— Отряд һине ҡабул итте. Әйҙә тиҙерәк минең арттан!

Малай үҙенең сиктән тыш арыған, асыҡҡан булыуын да онотоп, ҡыуанысынан, ни эшләргә белмәй, һикереп торҙо һәм, ҡанланып бөткән яланаяҡтарын ҡушлатып баҫып, хәрби кешеләрсә честь бирҙе:

— Есть, иптәш Семен Борисович, һеҙҙең арттан барырға!

Ҡарт партизан күҙҙәрен ҡыҫып, мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайып ҡуйҙы.

— Эй балаһың шул, бала. Байрамға барғандай шатланаһың. Партизан булыу футбол уйнау түгел бит ул, улым. Унда ҡыҙыҡҡа ҡарағанда, ҡыйынлыҡ. Үлем бабай ҙа унда бик алыҫ тормай... Бөтәһенә лә түҙергә тура килә.

— Түҙербеҙ, Семен Борисович, борсолмағыҙ!

Улар, күптәнге таныштар шикелле дуҫтарса һөйләшә-һөйләшә, тау ҡыуышына инеп киттеләр.

* * *

Тирә-яҡҡа алтын нурын сәсеп, аҡ төтөн һирпеп, костер яна. Ҡороған ағастарҙы йыйып, өйөп яғылған костер. Ул бөтә яҡтан урман менән ҡаплап алынған тау итәгендәге бәләкәй аҡланды көндөҙгөләй яҡтыртып тора. Костер тирәһенә партизандар йыйылғандар. Уларҙың ҡайһы берҙәре костер тирәләп ултырған, ҡайһылары һуҙылып төшөп ергә ятҡандар. Партизан отряденең командире йыуантыҡ ҙур кәүҙәле, һылыу аҡ йөҙлө, текә маңлайлы, ҙур зәңгәр күҙле, урта йәштәрҙәге кеше костер янында, партизандар араһында, ултыра. Уның аяғында ңтек, өҫтөндә хәрби йәшел костюм, һары бөҙрә сәсле башы яланғас ине. Партизандар командирҙәрен ярым түңәрәк яһап уратып ултырғандар. Отрядтең иң ҡарт һәм хөрмәтле кешеһе Семен Борисович тә шунда командир янында ултыра. Тик Павло ғына ултырмай. Ул берсә костерға яңынан-яңы утындар ташлап, берсә көлтәнән һуғып алған бойҙайҙан үҙҙәре ярма яһап, бешерергә ултыртҡан бутҡаны болғатып, көлгә күмелгән картуфтарҙың бешеүҙәрен күҙәтеп костер тирәһендә әйләнеп йөрөй. Костер яны тын. Партизандар, һәр ҡайһыһы үҙ уйына сумып, һүҙһеҙ генә ултыралар ине. Ошондай ауыр, ҡайғылы тынлыҡ ваҡытында үҙенең балаларса бер ҡатлылығы, бошонмаҫ ҡылығы менән әҙгә генә булһа ла өлкәндәрҙе йыуатып, йәнләндереп алырға ғәҙәтләнгән Павло:

— Йә, ниңә бик шымып киттегеҙ? Улай күңелһеҙ ултырһағыҙ, картуфты ла, бутҡаны ла үҙем генә ашап та ҡуйырмын. Иң яҡшыһы, исмаһам, таҡмаҡ әйтеп булһа ла ултырығыҙ. Ә мин бейештереп алырмын, — тигән булды. Уның был ҡылығын һәр саҡ күтәрмәләргә әҙер торған йәш партизан Гришка:

— Дөрөҫ, дөрөҫ, — тип һүҙгә ҡушылды һәм нә-

ҙек тауыш менән: — В саду ли в огороде...— тип, ҡысҡырып таҡмаҡ әйтеп тә ебәрҙе.

— Вот молодец, Гришка, — тиештеләр партизандар, — әйҙә бейе, Павло!

— Бейейбеҙ инде уны,— тине Павло эре генә һәм ҡара салбар өҫтөнә кейеп, билен йөн бау менән быуып ҡуйған күк сатин күлдәгенең сабыуҙарын тартҡылап рәтләне лә итек үксәләрен бер-беренә тыҡылдатып һуғып бейеп китте. Костерҙы уратып, югереп йөрөп, бер ултырып, бер тороп оҙаҡ итеп бейене Павло.

— Молодец, яҡшы бейейһең, Павло,— тиештеләр партизандар. — Рәхмәт, күңелде асаһың...

Павло бик оҫта итеп рус бейеүен бейене. Ә туҡтауға, таҡмаҡсы егет Гришка үҙе бейей башланы.

— Туҡтағыҙ әле, иптәштәр, йәштәрҙән артта ҡалып тороу килешмәй. Аяҡтарҙы ҡаҡҡылап алырға кәрәк, — тине Семен Борисович һәм, оҙон мыйыҡтарын һыйпаҡлап, ике бөйөрөнә таянып, һалмаҡ баҫып, Гришаға ҡаршы бейергә төшөп китте. Ул да отрядтә күңел күтәреүселәрҙең береһе ине.

— Әйҙә, әйҙә, Семен Борисович, бирешмә!

— Йәштәрҙән уҙҙырып ебәр.

— Беҙҙең Семен Борисович булдырыр ул!

— Һөйләмә. Барыбер беҙҙең Гришкаға етә алмай. Күрәһегеҙме, уның аяҡтары ергә баҫмайҙар,ә осалар ғына, — тип партизандар бейеүселәрҙең әле береһен, әле икенсеһен хупланылар. Костер яңы бер аҙға ғына булһа ла шау-шыулы булып, йәнләнеп китте. Ләкин, йөрәктә ҡурғаш кеүек ауыр булып ятҡан ҡайғыларҙы көсләп тыйып күтәрелгән был күңеллелек, ғәҙәттәгесә, бик тиҙ һүрелде. Костер янында тағы тынлыҡ урынлашты. Әйләнә-тирә тып-тын һәм буш булып ҡалды. Әҙ генә ел дә иҫмәй, япраҡ та һелкенмәй, ҡоштар ҙа һайрамайҙар. Хатта аҡ селтәр болоттар үтә ер өҫтөнә ҡараған ярты ай ҙа был серле тынлыҡты һаҡлау өсөн барыр юлынан туҡтап ҡалғандай тойола ине.

— Ниндәй матур төн! Тап беҙҙең ауылдың төнө кеүек! — тине салҡан төшөп, күкте күҙәтеп ятҡан Гришка.

— Эйе, йәйге төн тиерһең, йылы, аяҙ, тып-тын!— тине икенсе партизан.

Командир, күҙҙәрен күккә текләп, бер аҙ ҡарап торҙо ла тәжрибәле ҡарттарса ышаныс менән әйтеп ҡуйҙы:

— Алдаҡсы тынлыҡ был, иптәштәр, бына күрерһегеҙ, иртәгә, хатта таңға уҡ нисегерәк көн боҙолор икән. Яуасаҡ ямғырҙың еүешлеге минең танауҙа һиҙелә лә башланы инде.

— Боҙолһон. Яратмайым хәҙер мин бындай тын, матур төндәрҙе,— тип һүҙгә ҡушылды костерға утындар ырғытып торған Павло.

Командир ҡалын күкрәк тауышы менән әкрен генә көлөп:

— Ә элек ярата инеңме һуң, Павлуша?! — тип һораны.

— Ярата инем.

— Ә хәҙер ниңә яратмайһың?! — тип һүҙгә ҡушылды Семен Борисович тә, күҙҙәрен шаян ҡыҫҡылап.

— Бындай тын төндәр хәҙерге осорға тура килмәйҙәр, шуның өсөн яратмайым,— тип яуапланы Павло.

— Дөрөҫ әйтәһең, Павло, хәҙер, көндәр тын булмаған кеүек, төндәр ҙә тын түгел инде. Һәм ул, беҙҙең мөҡәддәс еребеҙгә баҫып ингән бандиттәрҙе ҡырып бөтөрмәй тороп, тын булмаясаҡ та. Шулай бит, Павло! — тине командир малайға ҡарап, яғымлы йылмайып.

— Эйе, был ялған тынлыҡ! Әйҙәгеҙ, командир иптәш рөхсәт итһә, уны боҙоп, бер аҙ йырлап алайыҡ, иптәштәр,— тине Семен Борисович.

— Разведка яҡын-тирәлә фашист башкиҫәрҙәрҙең был арала күренмәй башлауҙары тураһында хәбәр итә. Күрәһең, улар, беҙҙән яҡшы ғына һабаҡтар алғандан һуң, был урманға яҡын килеүҙән һаҡлана башланылар. Ғөмүмән, беҙҙең йырҙы ишетергә тейеш түгел кешеләрҙең хәҙергә был урындарҙа булмауына һеҙҙе ышандыра алам,— тине командир һәм һалмаҡ бас тауыш менән әкрен генә «Партизан Железняк» көйөн башлап ебәрҙе. Партизандар башта бе-

рәмләп, унан әкренләп бөтәһе лә йырға ҡушылдылар. Павло ла үҙенең балаларса нәҙек, яңғырауыҡлы тауышын йырға ҡушты. Ҡүмәк йыр, баҫалҡы, моңһоу тулҡын булып, берсә бик түбәнәйеп, берсә күтәрелеп урман эсендә бик оҙаҡ сыңлап торҙо. Гөрләп янған костерҙан күтәрелгән аҡ төтөн, йыр тулҡындарына ҡушылып, әкрен генә үрмәләп күккә менде.

Бына йыр ҙа туҡтаны. Тирә-яҡ тағы ла тын ҡалды. Тик костерҙа янған ағастарҙың сытырҙап һыныуҙары ғына ара-тирә тынлыҡты боҙҙолар. Шул ваҡыт командир менән Семен Борисович араһында костерға ҡарап, аяҡтарын һуҙып ултырған Павло бик моңло итеп, ниндәйҙер бер оҙон көйгә йырлап ебәрҙе. Уның йырын бер кем дә бүлдермәне. Бөтәһе лә тын булып, ҡыҙыҡһынып тыңланылар. Тик ул йырлап бөткәс кенә командир, Павлоның тулҡынланып торған ҡара ебәк кеүек сәстәренән һыйпап:

— Әйт әле, Павло, ниндәй көй йырланың һин? Ул көй нисек тип атала? — тип һораны.

— Нисек атала торғандыр, белмәйем... Минең әсәйем йырлай торғайны был көйҙө.

— Һинең әсәйең?! Белмәйем, мин рус, белорус ҡатындарының ундай көй йырлағандарын һис тә ишеткәнем юҡ ине. Әллә нисек бигерәк серле, моңло көй был. Һүҙҙәре лә, ниңәлер, аңлашылманы, — тине командир, ғәжәпләнеп.

— Беҙ ҙә ишеткәнебеҙ юҡ ине, — тиештеләр партизандар.

— Ишетмәгән булһағыҙ, ишетегеҙ инде, иптәштәр. Эс бошҡанда йырлайҙар ул көйҙө, — тине Павло, хәйләкәр йылмайып.

Командир, ғәҙәтенсә, ҡалын тауыш менән әкрен генә көлөп ҡуйҙы.

— Эс бошҡанда, тигән ә?! Эй Павло, Павло! Ҡайһы саҡта бик сәйер малайһың һин. Ни өсөн һинең эсең бошорға тейеш?! Партизан булырға теләйем тинең, бына тигән батыр, йылғыр партизан булдың. Отрядҡа килгәнеңә ике йыл, ә һин ошо ваҡыт эсендә маҡтауҙан башҡа бер һүҙ ҙә ишеткәнең юҡ. Һине бөтәбеҙ ҙә яратабыҙ. Үҙең беләһең, беҙҙең күп-

тәребеҙ һинең кеүек матур улдарын, ғаиләләрен юғалтҡан кешеләр...

Дошмандар килеп баҫырҙар тип бошонор инең, һин беҙҙең постарҙың һәр ваҡыт уяу һәм һиҙгер икәнлектәрен, партизан районының киңлеген беләһең. Шулай булғас, ниңә һинең эсең бошоуы мөмкин?!

— Бер-ике көн разведкаға сыҡмаһа, йәки отряд берәй ергә һөжүм яһамай торһа, эсе боша башлай бит уның, — тип һүҙгә ҡушылды Семен Борисович.— Фашистәр урынлашҡан ауылдарға барып, уларҙың штабтарына инеп, офицерҙәр менән һөйләшеп өйрәнеп бөткән, шилма малай.

— Фашист аэродромындағы самолеттарҙы яндырыуҙан, эшелондарын ауҙартыуҙан ғына йәм таба ул хәҙер,— тип мәрәкәләп һүҙгә ҡушылдылар башҡа партизандар.

— Эйе, — тине командир, Павлоны үҙ тубығына ятҡырып. — Беҙҙең Павло уттан да, һыуҙан да тере сыға торған егет ул. Шулай бит, Павло?!

— Семен Борисович һине бына тигән разведчик булыр тигәйне, яңылышманы. Тәжрибәле кеше шул. Кешене бер ҡарауҙа үтә күрә ала.

— Берәй ергә разведкаға ебәр һин уны, иптәш командир, елһеп килһен, — тине Семен Борисович, Павлоның шуны ғына теләп ултырғанын һиҙеп.

Павло һүҙ уңайы сыҡҡанда файҙаланып ҡалырға ашыҡты:

— Иптәш командир, — тине ул командирҙең күҙҙәренә туп-тура ҡарап һәм ярһыуҙан тыны бөтөп, — минең күңел ни нәмәлер һиҙенгәндәй була. Рөхсәт итһәгеҙ, мин иртәгә тирә-яҡта нәмәләр бар, нәмәләр юғын белеп килер инем.

Ысынлап та лагерҙә тик тороу Павло өсөн иң ауыр көндәрҙең береһе була. Бындай саҡтарҙа ул аҙ һүҙле һәм моңһоу булып китә. Ә киреһенсә, разведкала, походтарҙа булғанда, дошмандың берәй объектына йәки часенә һөжүм иткән ваҡыттарҙа ул сикһеҙ шат, хәрәкәтсән һәм ғәйәт батыр булып китә. Бындай ваҡыттарҙа ул ҡурҡыуҙың, икеләнеп тороуҙың, арыуҙың ни икәнен дә белмәй. Уның күңелендә

тик дошманға булған сикһеҙ нәфрәт һәм унан аяуһыҙ үс алыу тойғоһо ғына ҡала. Шунан башҡа бөтә нәмәне, хатта үҙенең йәшәүен дә онота ине ул. Һәм ошо ғәҙәттәре уға һәр бер эшен уңышлы алып барып сығарыуға ярҙам итәләр ине.

— Шулаймы ни?.. — тине командир, бер аҙ өндәшмәй ултырғандан һуң. Ул Павлоның дошман ҡулына эләгеүенән айырата ҡурҡа, ул һәр саҡ бик кәрәкле материалдар килтереүенә лә ҡарамаҫтан, уны мөмкин тиклем разведкаға һирәгерәк ебәрергә тырыша ине. Ләкин уның был теләге бер ҙә барып сыҡмай. Павло һәр ваҡыт разведкаға иң күп йөрөүселәрҙең береһе булып ҡала. Командир был юлы ла уның һорауын кире ҡаға алманы.

— Ярай, булмаһа иртәгә йөрөштөрөп килерһең, — тип ҡуйҙы.

Павло, ҡыуанысы эсенә һыймай, һикереп тороп, командир ҡаршыһына барып, смирно баҫты ла, честь биреп:

— Есть, иптәш командир, иртәгә йөрөштөрөп, күрештереп, дошмандың серен белештереп килергә! — тине. Һәм, хәрби кешеләрсә ҡапыл арты менән әйләнеп, кабинеттән сыҡҡан кеүек етеҙ атлап, тыптып баҫып китеп барҙы.

Павлоның был шаян ҡыланышынан партизандар рәхәтләнеп көлдөләр.

— Уҫал малай һин, Павло, үҫкәс кем булыр икәнһең һин? — тине командир, Павлоға һоҡланып ҡарап.

— Иптәш командир, үҫкәс, тап һеҙҙең кеүек боевой командир булһам ине мин, — тине Павло һәм, көлөү, шаяртыуҙарға һис тә иҫе китмәгән төҫ менән, әкрен генә йырлай-йырлай, костерға утын ырғыта башланы. Ә костер ялҡынланып, тирә-яҡҡа оскондар сәсеп, тағы ла көслөрәк яҡтырып янып китте.

* * *

Фашистәрҙең каратель отряденең урман ситендә палатка ҡороп урынлашҡан штабына бер малайҙы тотоп килтерҙеләр. Малайҙың өҫтөндә ямаулы, тар

ҡара салбар, ендәре, итәктәре ҡыҫҡарып бөткән шундай уҡ ҡара, ләкин ҡояшҡа уңып ағарған костюм, башында йәмшәйеп бөткән кепка, ә ҡулында ҡайыш юған ине.

Малайҙы төрткөләп палаткаға индергән һалдат, ниндәйҙер бер тотҡон янында аҡырынып торған офицерға ҡарап:

— Һеҙҙең палатка янында йөрөй ине, — тигән һымаҡ бер-ике һүҙ әйтте лә сығып та китте... Офицерҙең күҙе аларып китте. Эт сәңгелдәгән тауыш сығарып, сыйылдап, малайға ташланды.

— Ни эшләп йөрөйһөң унда? Исемең кем, әй йолҡош! — тине ул рус телен үтә боҙоп. Малай офицерҙең күҙенә туп-тура ҡарап ғәмһеҙ тауыш менән:

— Господин офицер, мин Павло, Павлуша тигән малай, ат эҙләп йөрөй инем. Атым ана тегендә тора, ана ғына. Күрәһегеҙме, һеҙҙең палатканан алыҫ та түгел, — тип тәтелдәне һәм һүҙен аңғартыу өсөн ҡулындағы юғәнен башына кейҙе лә ауыҙлығынан тешләп: — Хи-хи-хи-ха-ха!..— тип, ат булып кешнәп ебәрҙе. Офицер тертләп китте.

— Тик тор, болван! — тип ҡысҡырҙы ул. Ә малай, уның һайын көлә биреп, офицерға яҡынлашты һәм һүҙен дауам итте.

— Господин офицер, беҙҙең ауылға һеҙҙән дә ҙурыраҡ офицер килде. Уға ылау кәрәк. Рөхсәт итегеҙ миңә атымды алып ҡайтырға. Ысынлап әйтәм, бик ҙур офицер. Уның был ерҙәрендә погондары һеҙҙекеише генә лә түгел. Ә һеҙҙең нәмә, хөрт кенә. Ә теге господиндең погондары их ниндәй шәптәр, алтындар, һеҙҙең тимер кресығыҙ ҙа берәү генә икән. Ә уның бик күп. Әллә нисәү. Бына ни тиклем, күрҙегеҙме?

Малай бөтә бармаҡтарын тырпайтып крестар һанап күрһәтте һәм үҙе ауыҙын ҙур асып, йәмһеҙ тауыш менән ҡысҡырып көлдө лә һуҡ бармағын бөтөнләй тығып ебәреп танауын соҡой башланы.

Офицер ерәнеп, малайҙың алйотлоғона тамам ышанып ситкә боролдо. Шул ваҡыт уның күҙе был күренеште күҙәтеп, йылмайыбыраҡ ултырған тот-

ҡонға төштө. Уның көләмһөрәүен күреп асыуы ҡабарҙы. Ул, ҡорбанына ташланырға торған йыртҡыс кеүек, тотҡонға ҡараны.

Арыҡ тәнле, бәләкәй битле, бөркөт танаулы һәм бер ҡарауҙа кешенең ҡотон алырға тырышыуҙан атылып сыға яҙып торған күҙле был немец офицере бөтөнләйе менән өкө ябалағына оҡшап тора ине.

«Был өкөнө лә баш итеп йөрөйҙәр микән?!» тип уйланы малай.

Ә тотҡон, офицергә һис тә иҫе китмәй, иғтибарһыҙ рәүештә күҙен икенсе яҡҡа борҙо. Ул ҙур, таҙа кәүҙәле, ауылса кейенгән, урта йәштәрҙәге бер кеше ине.

Офицер тағы ул ҡараған тәңгәлгә килеп баҫты һәм кәзә баҡырған тауыш сығарып:

— Һин партизанмы? Ҡайҙа бүтән иптәштәрең, хәҙер үк һөйләп бир. Юҡһа һиңә капут, капут! — тип баҡырҙы.

«Нисек әтәсләнә бит килмешәк!» тип уйланы малай һәм үҙе был әҙәм аҡтығына ҡарата йөрәгендә ялҡынланып янған асыуҙы саҡ тыйып, бер ни аңламаған төҫтә, ишек төбөндә тапанып тора бирҙе.

— Ишетәһеңме, хәҙер һинә капут, тием,— тип ҡабатлап ҡысҡырҙы офицер һәм пистолетен тотҡондоң йөрәгенә төҙәне. Тотҡон баҫҡан урынынан ҡуҙғалманы ла, өндәшмәне лә. Ә офицерҙең уны һөйләштергеһе, был тирәлә ныҡ активләшеп киткән партизан отряден уның аша бик анһат ҡына тапҡыһы килә ине. Ул тотҡондоң йөрәгенә төҙәгән пистолетен кире алды ла өҫтәле янына барып ултырҙы. «Атһаң, үлә лә бөтә. Бер ни әйтмәй үлә. Һөйләштерергә кәрәк. Үлтерергә ҡасан да өлгөрөрмөн», тип уйланы офицер һәм көсәнеп, яҡшы күңелле кеше булып күренергә тырышып, икенсе тауыш менән һүҙ башланы: — Мужик, мин һине үлтерергә йәлләйем. Һинең ҡатының, балаларың барҙыр. Улар һине көтәләрҙер. Һинең дә уларҙы күргең киләлер. Партизан отряденең ҡайҙалығын әйт тә, бар, хәҙер үк ҡайтып кит.

«Ҡатын, бала-аға тип һөйләнгән була бит. Исмаһам, ундай һүҙҙәрҙе хурлап, ауыҙына алмаһа ни була икән. Әйтерһең, уның юлбаҫар икәнен белмәйҙәр», тип уйланы малай.

— Йә, тиҙерәк һөйлә, — тип тағы екеренде офицер, түҙемһеҙләнә башлап.

— Минең һеҙгә һөйләр һүҙем юҡ, — тине тотҡон, ҡырт киҫеп.

— Нисек?! — тип сыйылдап баҡырҙы офицер һәм, уҡ шикелле атылып, тағы тотҡон ҡаршыһына килеп баҫты.

— Һөйләрһең, большевик, һөйләтермен!

— Партизандар фашист көсөктәре менән һөйләшмәйҙәр! Ҡөсәнмә! Минән барыбер бер һүҙ ҙә ала алмаҫһың. Аңланыңмы, ишәк! — тине тотҡон, офицерға туп-тура ҡарап.

«Бына был ысын герой. Уның кеүек ныҡ булһаң ине», тип уйланы малай һәм, ғорурланып, башын юғары күтәрҙе.

— Ә-ә, улаймы ни әле һин! — тип сыйылданы офицер һәм пистолете менән тотҡондоң күҙенә һуҡты һәм уны аяҡ аҫтына йығып туҡмай башланы. Малай был яҙаны күрмәҫ өсөн палатканың ишеге төбөндә һөйәлеп торған ниндәйҙер бер таҡта артына боҫто. Офицер тотҡондо үҙе арығансы туҡманы. Ә тотҡон һаман бер тауыш та сығарманы. Бер һүҙ ҙә әйтмәне. Был өндәшмәү офицерҙе тағы ла ҡоторондорҙо.

«Ошондай бер мужик немец офицеренән аҙ ғына ла ҡурҡмай, өндәшмәй торһон, имеш! Ҡайһы илдә күренгәне бар быңдай эш! Был хурлыҡҡа нисек түҙмәк кәрәк», тип уйланы ул һәм әшәке һүҙҙәр менән һүгенә-һүгенә тотҡон өҫтөнә тағы-тағы ташланды. Тағы арығансы туҡманы. Унан һуң ике һалдатын саҡырып индерҙе лә бите, башы ҡанға батып, ярым үлек хәлендә ятҡан тотҡондо яҙаларға ҡушты... Күҙҙәренә ҡан тулған, кешелек сифатын күптән юғалтҡан фашист һалдаттары, иң йыртҡыс, хайуандарса һалҡын ҡан менән, был исемһеҙ геройҙы яҙаларға тотондолар. Тимер ҡыҙҙырып баҫып күкрәгенә йондоҙ яһанылар. Аяҡ-ҡулдарын шаҡарып һындырҙылар. Шулай ҙа өндәштерә алмағас, уның Тыуған иленә тиңһеҙ һөйөү һәм дошманға сикһеҙ нәфрәт менән ярһып типкән ҡайнар йөрәгенә үҙҙәренең ҡанлы штыктарын ҡаҙап үлтерҙеләр.

Бынан һуң һалдаттар, ҙур һәм файҙалы эш башҡарған кешеләр кеүек, офицерҙәренә честь бирҙеләр ҙә сығып киттеләр.

«Ҡеше ҡулынан килә торған эш түгел бит был. Ни тиклем тәкәббер!— тип уйланы офицер, ҡорбанына ҡарап.— Үлде, ә әйтмәне. Иҫ киткес... Әгәр мин шундай хәлгә ҡалһам?! Ах, уйлауы ла хәтәр. Аллам, үҙең һаҡла!»

Офицер, уйының ошо урынына еткәс, ҡурҡыныпi тирә-яғына ҡаранып алды.

«Ни уйлайым мин, немец офицере?!» Ул тиреһенә һыя алмай палаткала бер ары, бер бире югерҙе.

«Нисек итеп был партизандарҙы табырға? Был урында төнләп ҡалһаң, уларҙың үҙҙәре килеүҙәре лә мөмкин. Ә уларҙың бөтәһе лә бынау мужик кеүек булһалар, ай-ай-ай?!»

Офицер үҙенең ғорур ҡорбанына ирекһеҙҙән һоҡланып ҡараны. Уның бысраҡ йөрәге дерелдәп, арыҡ тәне буйлап боҙ һалҡыны югереп үтте. Ошо тиклем яҙалауҙы тауыш-тынһыҙ кисергән, иптәштәрен йәшәтеү өсөн үҙен ҡорбан иткән был ялҡынлы патриоттың үлек кәүҙәһе лә уның йөрәгенә сикһеҙ ҡурҡыу һалды.

«Ҡасырға кәрәк бынан, тиҙерәк ҡасырға!»

Ул, ҡото осоп, ашығып ишеккә югерҙе. Ләкин шунда уҡ күгәренеп, ҡалтыранып кире боролдо.

«Ә приказ?.. Уны үтәмәй тороп бер ҡайҙа ла китеп булмай бит... Ах, ни эшләргә?!»

Әле генә эшләнгән был йөрәк ярырлыҡ йыртҡыслыҡтың ирекһеҙҙән шаһите булған малай офицерҙың үҙе тураһында бөтөнләй онотоуын һиҙҙе һәм уңай момент булыуы менән ҡасырға ҡарар итте.

Күҙенә ҡан тулған офицер, ысынлап та, үҙен ерәндергән был «алйот малай» хаҡында онотоп асыуын баҫа алмай, ситлектәге ҡоторған бүре шикелле тулап, палатка эсендә ары-бире йөрөй, үҙе мығырҙай, ни нәмәлер һөйләнә ине. Малай бынан файҙаланырға ашыҡты. Офицер арты менән әйләнгән бер арала һиҙҙермәй генә тышҡа сыҡты.

— Ҡайҙа бараһың? — тигәндәй һүҙ өндәште часовой.

— Господин офицер үҙе ебәрҙе. Юкһа, минең атым әллә ҡайҙа китеп барыр. Ана, күрәһеңме минең атымды, ана ғына тора, ҡайын аҫтында, — тине малай, баяғыса ғәмһеҙ йылмайып һәм бармағы менән урман эсен күрһәтте. — Күрҙеңме, ана шул минең атым ул.

— Йә, йә, әйҙә китә бир... — тигән һымаҡ булды часовой һәм оҙон итеп иҫнәп ҡуйҙы.

— Йә, йә, — тип ҡабатланы малай, часовойға тағы бер шундай уҡ ғәмһеҙ йылмайыу ташлап. Унан һуң юғәнен иңбашына һалды ла ашыҡмай ғына китеп барҙы. Часовой һәм палаткалар күҙҙән юғалғанға тиклем, ул, шулай, әкрен атлап, һыҙғырынып, йырлаштырып барҙы. Әйтерһең, ул бер ни ҙә белмәй ине. Ә йөрәге уның: «Тиҙерәк, тиҙерәк был ҡырағайҙар янынан китәйек! Китәйек тә, отрядкә тиҙерәк барып хәбәр итәйек!» тип ярһып, түҙемһеҙләнеп типте.

«Ашыҡма, йөрәк. Отрядкә төнһөҙ ҡайтырға ярамай, арттан күҙәтеп барыуҙары мөмкин. Уйламағандан отрядте тотторорһоң», тип уйланы малай. Һәм, урман эсенә, төпкөлгә инеп йәшеренеп ятты ла ошо урында төндө көтөргә булды.

Көҙгө ҡыҫҡа көндөң инде яртыһы үткән булыуға ҡарамаҫтан, кисте еткереү бик ауыр булды. Сәғәттәр йыл кеүек тойолдолар. Ҡараңғы төшөү менән Павло юлға сыҡты.

* *
*

Көҙгө дөм-ҡараңғы төн. Немецтәрҙең карательный отряде тирә-яҡҡа көслө ҡарауылдар ҡуйып был урында ҡунып ҡалырға мәжбүр булды. Көн буйы еҫкәнеп йөрөүҙәре уларға бер төрлө лә һөҙөмтә бирмәне. Партизандарҙың эҙенә төшә алманылар. Ә таң алдында партизандар үҙҙәре килделәр. Уларҙың тауыш-тынһыҙ ҡарауылдарҙы юҡ итеүҙәрен бер кем дә һиҙмәне. Улар, ер аҫтынан ҡалҡып сыҡҡан кеүек, аңғармаҫтан килеп баҫтылар. Таң шәүләһен ярып, немецтәрҙең ҡолаҡ төбөндә генә кинәт көслө «урра» яңғыраны. Уға:

— Үлем фашистәргә!
— Тыуған ил өсөн!
— Алға! — тигән тауыштар ҡушылды һәм урман сите бер аҙ ваҡытҡа тимерҙәр сыңҡылдаған, атышҡан, сәнсешкән, ыңғырашҡан тауыштар менән күмелеп ҡалды. Ҡыҫҡа ваҡытлы, ләкин дәһшәтле һәм аяуһыҙ һуғыш булып үтте. Унан бер генә немец тә ҡасып ҡотола алманы. Партизандар штыгы уларҙы бөтә урындан да эҙләп тапты. Ә теге офицерҙе партизандар терелəй ҡулға алдылар.
Һуғыштан һуң отряд дошмандан ҡалған ҡоралдарҙы йыйып алып урманға кире китергә әҙерләнде. Һуғыш операцияһының ғәжәп уңышлы сығыуынан тағы ла нығыраҡ рухланған партизандар шаугөр килеп командирҙәре янына йыйылдылар. Командир:
— Был уңыш өсөн, иптәштәр, беҙ иң элек үҙебеҙҙең отличник разведчигебеҙ Павлоға рәхмәт белдерергә бурыслыбыҙ. Ул үҙенең күҙәтеүҙәрендә аҙ ғына ла яңылышмаған. Хатта ул уларҙың һанын да дөп-дөрөҫ белгән. Павло, әй Павло, кил әле, улым, маңлайыңдан бер үбәйем, — тине.
Командирға яуап биреүсе булманы. Партизандар ашығып тирә-яҡтарына ҡарандылар һәм әле генә атып килгән таң яҡтыһында бер-береһен тоноҡ ҡына булһа ла айырып күрҙеләр. Ләкин үҙ араларында Павлоны күрә алманылар. Отряд кинәт тынысһыҙланып китте.
— Павло!
— Павлуша, һин ҡайҙа?!
Ҡысҡырыуҙар бөтәһе лә яуапһыҙ ҡалдылар. Командир отрядена сирек сәғәт ваҡыт эсендә яҡынтирәне эҙләп, Павлоны табырға ҡушты. Үҙе лә Семен Борисович менән бергәләп, югереп йөрөп бөтә мөмкин булған урындарҙы эҙләп бөттө.
— Ниндәй егетте юғалттыҡ табаһа, — тип әрнеп һөйләнде Семен Борисович.
— Әйе,— тине командир,— булдыҡлы малай ине. Отряд менән бергә үҫкәйне. Әрәм, малай, әрәм!
— Ул бер ваҡыт, минең Сережа тигән иптәшем бар, ул да партизан булып ошо тирәләге бер отряд-

тә йөрөй икән, — тип һөйләгәйне. Әллә, шуны осратып, ул отрядкә китеп барҙымы икән? — тине Семен Борисович, аптырағас.

— Юҡ, Семен Борисович, — тине командир, — Павло тере көйө отрядте ташламаҫ. Шулай ҙа мин уны үлгәндер тип уйлай алмайым. Тик шунnetwork ғәжәп, ул һуғыш ваҡытында минең яндан айырылмай торғайны. Бында ла башта минең янымда ине. Офицер палатkaһына ла бергә барып ингәйнек. Ҡайһы арала айырылған, белмәйем.

— Павло, Павлуша! — тип йәнә ҡысҡырып ҡуйҙы Семен Борисович. — Ҡайҙа һин!? Был яуыз фашистәр арҡаһында үҙ балаларымды юғалтып бөтөүем етмәгән, инде Павлонан да ҡалдым, күрәһең. Үҙ балам кеүек өйрәнгәйнем бит мин уға...

Ул югерә-югерә яҡын тирә-яҡты тағы бер ҡат ҡарап сыҡты. Ул арала ер йөҙө бөтөнләй яҡтыра башланы. Командир отрядена йыйынырға команда бирҙе.

— Иптәштәр, беҙ үҙебеҙҙең кескәй иптәшебеҙҙе ҡайҙалыр юғалттыҡ, — тине командир, отрядена өндәшеп, — билдәле, был беҙҙең бөтәбеҙ өсөн дә ауыр. Уны эҙләүҙе артабан дауам иттерә алмай кире китеү тағы ла күңелһеҙерәк. Был урындар тыныс булһа, аҙаҡтан килеп йәнә эҙләрбеҙ. Ә хәҙер бында артыҡ ҡалырға ярамай. Беҙгә отрядте һаҡларға кәрәк. Павло тере булһа, беҙҙе үҙе лә эҙләп табыр. Ниндәйҙер серле осраҡлыҡ уны ваҡытлыса айырҙы. Ләкин Павло үлергә тейеш түгел, иптәштәр!

Командирҙең өмөтлө һүҙенән һуң партизандар еңел һулап ҡуйҙылар һәм уның артынан:

— Эйе, Павло тере булырға тейеш! — тип ҡабатланылар.

Бынан һуң отряд фашистәрҙән ҡалған ҡоралдарҙы йыйып алып юлға сыҡты.

Кисә Павло күҙе алдында язалап үлтерелгән партизандың кәүҙәһен, үҙҙәренең яраланған һәм үлгән иптәштәре менән бергә ҡәҙерләп, носилкаға һалып, үҙҙәре менән бергә алып киттеләр.

— Ниндәй ҙә булһа берәй партизан отряденәндер.

— Геройҙарса үлгән был таныш түгел иптәше-

беҙҙе ҡәҙерләп, үҙебеҙҙең тау башына, туғандар ҡәберенә күмербеҙ, — тинеләр партизандар.

— Әйҙә, ишәк, — тине командир, — шунда, ерҙә аунап, ҡалтыранып ятҡан офицерға ҡарап, — һинең менән тегендә, урманда һөйләшербеҙ. Унда һин беҙгә һис бер ғәйепһеҙ кешеләрҙе был тиклем язалап үлтереү яҡшымы икәнен һөйләп бирерһең!

Офицер йылан шикелле йомарланып, командирҙың аяғына һалынып:

— Зинһар өсөн, мине ғәфү итегеҙ, мин һеҙгә ни нәмә белергә теләйһегеҙ, бөтәһен дә һөйләп бирермен. Бөтәһен дә. Мин бит былай ғына, хеҙмәтем ҡушҡанға ғына, юҡһа мин бик яҡшы күңелле кеше. Мин үҙем дә эшсе инем, — тип шыңшый, ялына башланы.

— Тор, атла хәшәрәт, тыныңды сығара торған булма. Юҡһа хәҙер үк атып үлтерермен! — тине командир, сикһеҙ ерәнеү менән уға ҡарап, — ҡулға эләкһәләр, аталарын һатырға ла әҙер, эттәр. Ә ҡоралһыҙ кешеләр, ярҙамсыһыҙ ҡатын-ҡыҙҙар, бала-сағалар янында нисегерәк батыр ҡыланалар, ҡарауы ла ерәнес!..

Офицер ҡалтырана-ҡалтырана аяғына баҫты һәм, күшеккән көсөк шикелле, шым булып, ауа-түнә отряд алдынан алға, урман эсенә табан атланы.

* *
*

Тылдағы ҡалаларҙың береһендәге госпиталдең баш врачы Рауза Габитовна иртә үк килеп яралыларҙың ауырыу тарихтәре яҙылған ҡағыҙҙар менән танышырға ултырҙы. Ул бөгөн бөтә палаталарға обход яһарға тейеш ине.

«Был ҡағыҙҙарҙың һәр береһенең артында тере кеше — Тыуған илдең ҡәҙерле һуғышсыһы — геройы тора. Хәҙер минең иң ҙур йыуанысым да уларҙың ҡиммәтле ғүмерҙәрен һаҡлап ҡалыу, уларҙың һауығыу шатлыҡтарын күреүҙә генә», тип уйлана-уйлана ул һәр бер ауырыуҙың тарихе яҙылған ҡағыҙҙарҙы ентекләп уҡып сыҡты. Ошо ҡағыҙҙар араһында береһе уны айырата ҡыҙыҡһындырҙы.

Ул уны ҡат-ҡат уҡыны. Уҡыған һайын күңелендә ниндәйҙер өмөт сатҡылары уянды. Билдәһеҙ шатлыҡ нурҙары менән уның ҡайғылы күҙҙәре яҡтырып яндылар. Йөрәге түҙемһеҙләнеп, ярһып типте. Йомшаҡ .аҡ ҡулдары әкрен генә ҡалтырандылар.

«Был ни эшләйем мин, тип уйланы баш врач, үҙ хәленә төшөнөргә, үҙен ҡулға алырға тырышып, әле бит билдәһеҙ, бөтөнләйгә билдәһеҙ. Бәлки, һис тә ул түгелдер. Донъяла аҙмы ни бер исемдәге кешеләр. Бер үк ҡалала улар әллә нисәү булырға мөмкин бит.

Их, әгәр ул ысынлап та шул беҙҙең Павло булһа... Ирек тураһында берәй нәмә белһә... Ни нәмә эшләр инем икән мин?.. Ҡыуанысымдан хатта аҡылымды юғалтырмын төҫлө тойола...

Ах, ни тиклем бәхетле булыр инем мин, улымдың һаулығын ишетһәм.

Юҡ, булмаҫ. Бушҡа ғына мин үҙемде ялған өмөттәр менән аҙаплайым. Фашистәр уны тере көйө ҡалдыралармы һуң? Әллә ҡасан үлтергәндәрҙер инде. Һөйәк-һаяғын йыйып күмер кеше лә булмағандыр. Эй, балаҡайым, ниҙәр генә һине шулай тороп ҡалырға мәжбүр итте икән? Мин һине шулай эттәр ҡулында ҡалып әрәм булыр өсөн үҫтергәйнемме ни?!»

Баш врач күҙҙәренә килеп тығылған йәш бөртөктәрен ҡулъяулығы менән ҡаты итеп һөртөп алды.

«Фу, тағы илайым. Был ни тигән эш инде! Әйтерһең, бер минең генә балам юғалған...

Иламаҫҡа, уйламаҫҡа тип, нисә тапҡырҙар инде үҙ-үҙемә һүҙ бирҙем, ә үҙем һаман илайым. Эй-й, иламай ҙа, уйламай ҙа мөмкинме һуң?! Бала бит, бала!..»

Баш врач, уйҙарын икенсе темаға күсерергә сәбәп эҙләп, тирә-яғына ҡараны. Ләкин уның күҙҙәре тағы шул ҡулындағы ҡағыҙ киҫәктәренә төштөләр һәм унда яҙылған ике-өс ауыҙ һүҙ өҫтөндә туҡтап ҡалдылар. Ә уйҙары тағы шул Павло, Ирек исемдәре тирәһендә әйләнә башланы.

«Павло, 16 йәш. Белоруссияның «Г» ҡалаһынан... Партизан... Ә фамилияһы яҙылмаған. Ғәжәп. Моғайын, был шул беҙҙең Павлолыр. Павло... Павло... Әллә нисек йөрәккә яҡын, бик яҡын булып тойола был

исем. Моғайын, Иректең дуҫы Павло булыр был. Яраһы ҡурҡыныслы булмаҫҡа кәрәк. Әлбиттә, һауыҡтырырбыҙ. Тиҙерәк күрергә ине уны...»

Врач түҙемһеҙләнеп сәғәтенә ҡараны.

«Ниңә был сәғәт әкрен, бик әкрен йөрөй әле бөгөн. Әллә боҙолдомо икән...»

Ул сәғәтен ҡолағына ҡуйып оҙаҡ ҡына тыңлап торҙо.

«Йөрөшө бик тигеҙ... Уф, ниңә мин был тиклем түҙемһеҙләнәм? Әллә баламды юғалтыу ҡайғыһынан аҡылдан шаша башланыммы икән?!»

Баш врач, йөрәгенең ярһыуына түҙә алмай, ултырған еренән һикереп торҙо һәм түҙемһеҙләнеп бүлмә буйлап йөрөй башланы. Шул ваҡыт Павло ятҡан палатаны хеҙмәтләндереүсе врач Анна Ивановна кабинетҡа килеп инде.

— Хәйерле иртә, Роза Габитовна. Мин ни тиклем тырышып ҡараһам да, һеҙҙән алда килә алмайым, күрәһең. Ҡасан ғына килһәм дә, һеҙ күптән бында булаһығыҙ. Ҡайһы арала ғына ял итәһегеҙ һуң һеҙ?

Анна Ивановна тышҡы кейемдәрен, эшләпәһен һалып гардеробҡа элде лә баш врачтың ҡулдарын дуҫтарса ҡыҫып күреште.

— Йә, нихәл, Роза Габитовна!

— Һау ғынаһығыҙмы, Анна Ивановна. Әйҙәгеҙ, ултырығыҙ әле тиҙерәк. Арығанһығыҙҙыр. Ял итегеҙ.

Баш врач ашығып үҙе лә өҫтәле янына барып ултырҙы һәм Анна Ивановнаға үҙе янынан урын бирҙе.

Анна Ивановна, эшләпәһен һалғас, әҙерәк туҙып ҡалған сәстәрен төҙәтә-төҙәтә баш врачҡа ҡаршы барып ултырҙы. Ул врачтарға ғына хас булған иғтибарлы ҡараш менән уның күҙҙәренә текәлде.

— Әллә йоҡоһоҙлоҡ борсоймо һеҙҙе, Роза Габитовна?

— Һис тә юҡ, Анна Ивановна. Киреһенсә, артыҡ күп йоҡлау борсоуы мөмкин.

— Булмаҫ. Уныһына ышана алмайым.

— Ярай, был турала аҙаҡтан, — тине баш врач, түҙемһеҙләнә төшөп. — Һеҙ, Анна Ивановна, бына был партизан малай тураһында миңә асығыраҡ

итеп ниҙәр һөйләп бирә алаһығыҙ? Уның хәле нисек? — тип һораны.

Анна Ивановна уның тауышында ниндәйҙер билдәһеҙ тынысһыҙлыҡ барлығын тойҙо һәм ҡапыл борсолоп китте.

— Ниңә, әллә уға берәй хәл булғанмы?

— Юҡ, бер ни ҙә булмаған. Тик мин уның малай ғына көйө партизан булыуы өсөн һәм ниңәлер уның фамилияһын яҙмағанығыҙ өсөн генә артығыраҡ ҡыҙыҡһынам. Башҡа бер ни ҙә юҡ,— тине баш врач, үҙенең тулҡынланыуын һиҙҙермәҫкә тырышып.

— Ә улаймы ни, — тине Анна Ивановна, бер аҙ тынысланып, — эйе, ул ҡыҙыҡһыныирлыҡ бала. Уны бынан өс көн элек полевой госпиталдән килтерҙеләр. Ул үҙе тураһында бер ни ҙә һөйләмәй. Хатта фамилияһын да әйттереп булманы. Иҫ киткес һере малай. Яраһы ауырта, бик нык ауырта бит инде. Ә ул эһ тә итмәй. Тештәрен шыҡырҙатып ҡыҫып, күҙҙәрен генә йома. Но, нисек, тип һораһаң:

— Ничего, — тип кенә яуап ҡайтара. Әйтерһең дә, бик күпте күргән өлкән кеше.

Пуля уның балтыр һөйәген ярсып үткән. Ҡүп ҡан юғалтҡан. Яраланғас, ярҙамсыһыҙ оҙаҡ ятҡан булһа кәрәк. Уның аяғын ҡырҡырға тура килмәһә ярар ине тип борсолам мин.

— Юҡ, ҡырҡмайбыҙ, ул аяҡлы булып һауығырға тейеш, Анна Ивановна, аңлайһығыҙмы?! — тип ҡапыл ҡысҡырып ебәрҙе баш врач. Аҙаҡ ғәҙәттән тыш йомшаҡ тауыш менән: — Анна Ивановна, әйҙәгеҙ, обходты һеҙҙең палатанан башлайыҡ, — тип өҫтәне.

— Урта билдән төшөпмө?! — тине Анна Ивановна баш врачтың был сәйер ҡыланышына төшөнә алмай, ғәжәпләнеп.

— Эйе, ҡап уртанан төшөп!— тине баш врач, йылмайып һәм, йәһәт-йәһәт атлап, Павло ятҡан палатаға табан китеп барҙы. Анна Ивановна тәүҙә башын сайҡап бер аҙ аптыраңҡырап торҙо ла үҙе лә уның артынан эйәрҙе.

Баш врач палатаға килеп ингәс, яралылар, ғәҙәттәгесә, уны бик ҡыуанып ҡаршы алдылар. Һәр ҡай-

һыһы үҙ яраһы тураһында асыҡлабыраҡ һорашып ҡалырға, врачҡа үҙенең рәхмәтен, ризалығын белдерергә ашыҡты. Баш врач та уларҙың һәр берәһенә ҡарата йылы, йомшаҡ һүҙ тапты. Һөйөп, ҡәҙерләп һәр ҡайһыһының яраһын ҡараны. Дауалау билдәләне. Тиҙҙән һауығып үҙ частәренә ҡайтасаҡтарын әйтеп күптәрҙе шатландырҙы. Шаян һүҙҙәр һөйләп көлдөрҙө. Палата күңелләнеп, йәнләнеп китте. Тик был күңеллелеккә бер генә кеше — партизан малай ғына ҡушылманы. Ул, аҡ простыняһен башынан уҡ бөркәнеп, тып-тын ята ине.

Башҡа яралыларҙы ҡарағанда ла, улар менән һөйләшкәндә лә баш врачтың күҙҙәре гел генә был карауат өҫтөн күҙәтеп торҙо. Ә күңеле ашығып унда тартылды. Ләкин малай һаман ҡуҙғалмай, тыныс ята бирҙе.

«Күрәһең, ҡаты йоҡлай, меҫкен бала, уятырға ла ҡыҙғаныс», тип уйланы баш врач.

Палаталағы бөтә яралыларҙы ҡарап бөткәс, врачтар партизан малай карауаты янына килделәр. Ә ул һаман ҡуҙғалманы.

— Павло, эй Павло, Роза Габитовна һине ҡарарға теләй, уян әле, — тине Анна Ивановна йомшаҡ ҡына тауыш менән. Малай өндәшмәне.

— Ярай, рәхәт йоҡлай икән, уятмайыҡ, икенсе ваҡыт ҡарарбыҙ, — тине баш врач, үҙе, ниңәлер, ауыр көрһөнөп ҡуйҙы.

— Шулай итербеҙ, — тине Анна Ивановна, — йоҡлаһын бала, тынысланһын.

Врачтар ишеккә табан йүнәлделәр. Ләкин тап шул ваҡытта кемдер ҡапыл:

— Әсәй, әсәй, туҡта әле! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Врачтар һиҫкәнеп артҡа боролдолар.

Баш врачтың кинәт төҫө ҡасып, ағарынып китте. Ул, башы әйләнеп, баҫҡан ерендә бәүелеп ҡуйҙы. Ләкин Анна Ивановна уны тотоп ҡалды.

— Ни булды һеҙгә, Роза Габитовна, һис тә төшөнә алмайым! Әйҙәгеҙ, һеҙҙе кабинетегеҙгә оҙатам!

— Аһ, мин кемде күрәм, балам, йөрәгем минең! — тип ҡысҡырып ебәрҙе баш врач, үҙенең яралылар араһында, палатала булыуын да онотоп. Анна Ива-

новнаның ҡулынан кинәт ысҡынды ла ҡулдарын һуҙып әсәһенең ҡосағына атылырға ултырған партизан малай карауатына ташланды. Малай ҡанһыҙлыҡтан ап-аҡ булған хәлһеҙ ҡулдары менән әсәһенең муйынына һырылды. Палатала бер минутҡа көсөргәнешле тынлыҡ урынлашты.

Әсә ҡалтыранған ҡулдары менән улын ҡосағына алды һәм, бөтә нәмәне онотоп, береһенән-береһе наҙлыраҡ, яғымлыраҡ һүҙҙәр әйтә-әйтә улын һөйөргә, үбергә тотондо.

— Эй минең үҫкән малайым, аҡыллы малайым, ҡыуанысым, йыуанысым һин минең. Ҡайҙарҙа булдың, ҡайҙарҙа йөрөнөң, нисек тере ҡалдың, һөйлә, барыһын да һөйлә, балам! Юҡ, һөйләмә, кәрәкмәй, арырһың, бәләкәйем! Мин былай ҙа бөтәһен дә аңлап торам.

— Ҡәҙерле әсәйем, — тине малай әсәһен тағы ла ҡыҫыбыраҡ ҡосаҡлап. — Мин һине ишектән инеүең менән үк, тауышыңдан уҡ таныным бит. Тик әҙерәк шаяртайым ғына тигәнсе, һин сығып та китә яҙҙың. Үҙем дә ҡурҡтым һуң. Нисек ҡысҡырып ебәргәнемде лә һиҙмәй ҡалдым.

— Эй балам, таш йөрәгем, нисек түҙеп өндәшмәй ята алдың? Шаяртып ҡына тороп ҡалып, мине ҡайғыға һалыуың етмәгәйнеме ни инде!

— Мин унда шаяртып түгел, ысынлап ҡалғайным шул, әсәй, — тине малай, әсәһенең икһеҙ-сикһеҙ бәхетлелек менән балҡып янған күҙҙәренә ҡарап, иркә йылмайып. Үҙе уның муйынына тағы ла нығыраҡ һыйынды. Уның иркәләнгеһе, һөйөлгөһө, әсә мөхәббәтенең ялҡынлы утында ҡыҙынғыһы, һуңғы йылдар эсендә күрелгән ауыр кисерештәрҙән яраланған йөрәгенә ял алғыһы килә ине. Ул әсәһен электән сикһеҙ ярата, хөрмәтләй һәм хәҙер уны сиктән тыш ныҡ һағынғайны.

— Эй балам, күҙ нурым, бәхет гөлөм минең!

Баш врач улын ҡосағынан ебәрмәй тағы һөйҙө, тағы үпте, күҙҙәрен ала алмай улының талған, уйсанланған күҙҙәренә бик оҙаҡ теклән ултырҙы. Һөйөп туйып, бер аҙ тынысланғас ҡына улын ментәргә ятҡырҙы һәм, уның туҙып, күҙҙәренә төшкән оҙон ҡа-

ра сәстәрен артҡа һыйпап, асыҡ киң маңлайынан тағы бер ҡат үпте лә:

— Йә, һөйләшәйек инде, улым, — тине.

Ҡапыл, ныҡ ҡыуаныуҙан ярһып типкән йөрәген көскә баҫып, малай әкрен генә тауыш менән:

— Әсәй, атайым ҡайҙа хәҙер? — тип һораны.

— Атайың әле һаман фронтта. Ул батыр һуғыша. Бер нисә тапҡыр боевой ордендәр менән наградланды, — тине әсә балаларса шат тауыш менән.

— Ордендәр алған! Атайым батыр һуғышсы! — тип бар көсөнә ҡысҡырып ебәрҙе малай, ҡыуанысы эсенә һыймай, һәм шунда уҡ тауышын баҫып: — Их, атайымды ла күрергә ине, — тип өҫтәне.

— Күрерһең, улым. Дошманды ҡырып бөтөргәс тә, атайың да ҡайтыр һәм беҙ тағы, элеккегә ҡарағанда ла, бәхетлерәк, шатыраҡ тормошта йәшәй башларбыҙ. Эйе бит, улым.

— Эйе.

— Атайым немецтәрҙе нисек туҡмарға, нисек еңергә белә инде ул, эйе бит, әсәй?

— Эйе.

Аҙаҡҡы һүҙҙәренең кескәй балалар һөйләшеүенә оҡшап сығыуынан әсә менән ул икеһе бергә көлөп ебәрҙеләр.

Был бәхетле осрашыу палаталағы яралыларҙың бөтәһендә лә ныҡлы ҡыҙыҡһыныу уятты. Уларҙың йөрөй алғандары йылы, йомшаҡ халаттарын кейеп, ҡайһылары елкәләренә һалып, әсә менән ул янына йыйылдылар. Ултыра алғандары тороп ултырҙылар. Инде бер аҙ тынысланған баш врач быны күреп сикһеҙ ҙур ҡыуанысын улар менән уртаҡлашырға ашыҡты.

— Бына, иптәштәр, бөтөнләйгә юғалттым тип иҫәпләгән улымды таптым, — тине ул, бәхетле йылмайып. — Мин уны немецтәр күптән инде үлтергәндәрҙер тип ҡайғыра инем. Ә ул, молодец малай, үҙе уларҙы ҡырып йөрөгән. Кем уйлаған уны шундай малай булыр тип. Күрәһең, тормош үҙе уны шулай ҡыйыуландырған. Тик шуныһы ғәжәп, ул, ниңәлер, Ирек түгел, ә Павло! Минең улым Ирек исемле ине.

Был турала ул беҙгә икенсе бер ваҡыт, ял иткәсерәк, һөйләп бирер әле, шулай бит, улым?

— Нимәһен һөйләйһең инде уның, — тине Ирек теләмәй генә, — Павло фашистәрҙе сикһеҙ күралмай ине. Фашистәргә ҡаршы ул ҡорал алып һуғышырға теләне. Ләкин өлгөрә алманы. Немецтәр уны бик иртә үлтерҙеләр. Уның урынына мин Павло булдым һәм уның өсөн дошмандан үс алдым. Үкенәһе юҡ. Аҙ үс алынманы. Әле тағы ла күберәк алыр инем дә, тик бынау аҙаҡҡы бер төнгө һуғышта бер немец һалдаты артынан ҡыуып бик алыҫ китеп барғанмын. Барыбер ул эт ҡасып ҡотола алманы. Атып үлтерҙем. Тик мин атҡансы, ул да мине яралап өлгөрҙө. Э отряд мине эҙләп таба алманы булһа кәрәк. Минең ҡуҙғалырға хәлем юҡ ине. Беҙ унда немецтәрҙең бер карательный отряден ҡырып бөтөрҙөк. Шул яраланыуҙан һуң, ике көн үткәс, мине колхозсы бер бабай табып алды һәм, мең бәлә менән фронт аша үткәреп, санчаскә тапшырҙы. Унан бына ошо госпиталгә эләктем. Шул ғына. Минең дуҫым Павло үлһә лә бына шулай һуғышып йөрөнө...

Ирек хәлһеҙ генә тауыш менән шулай һөйләне лә күҙҙәрен йомдо.

— Уға тыныслыҡ кәрәк, — тине баш врач, — әле ул хәлһеҙерәк. Ләкин уға тиҙҙән хәл инер, ул яңынан һап-һау партизан малай булыр. Һеҙ ҙә ял итегеҙ, иптәштәр.

— Эйе, ул һауығырға тейеш. Әйҙә ул хәҙер тыныслап ял итһен, — тинеләр яралы боецтар һәм был ҙур ҡыуанысла осрашыуҙан ныҡ тәьҫирләнеп урындарына таралдылар. Палатала йәш партизанға ҡарата тәрән хөрмәт йөҙөнән тынлыҡ урынлашты.

*Ноябрь, 1941*

# ХИКӘЙӘЛӘР



# Башак

## I

Йылғаның ҡояш нурҙарында балҡып йымылдашҡан ҡырсынташтар менән ҡапланған һөҙәк яры өҫтөндә, иркендә, берејһенән-береһе һылыу ҡуш тирәк үҫеп ултыра. Бер нисә ҡолас йыуанлыҡтағы был тирәктәр, үҙ-ара ярышып, ҡеүәтле олондарын бик бейеккә күтәреп, мөһабәт кирелеп үҫкәндәр. Уларҙың аҡһыл йәшел япраҡтары елһеҙ көндә лә бер өҙлөкһөҙ елпелдәй, ҡыштырҙай. Әйтерһең дә, улар әкрен генә һөйләшәләр ҙә һөйләшәләр. Ә ҡайһы саҡта был тирәктәр, мөһабәт олондарын ҡаты сайҡалдырып, дәһшәтле тауыш менән геүләргә, шауларға тотоналар. Ер өҫтө тып-тын тип әйтерлек саҡтарҙа ла тирәктәр шаулашалар, сайҡалалар. Ҡарттар уларға ҡарайҙар ҙа, күктә бер генә болот күренмәһә лә:

— Ҡуш тирәк шаулай башланы, ямғыр булыр, ахыры. Ашлыҡты тиҙерәк йыйып алырға кәрәк, — тиҙәр һәм йәһәтерәк эшләргә өндәй башлайҙар.

Ә балалар был ҡуш тирәк төбөн үҙҙәренә уйын. көлкө, күңел асыу төйәге итеп һайлағандар. Һәр көн иртәнге ҡояш ҡыҙҙыра башлау менән, был урын бала-саға тауышы менән сыр-сыу килеп ҡайнай, шаулай башлай. Берәүҙәре ваҡ таштар араһынан шылтырап ағып ятҡан йомшаҡ, йылы һыулы йылғала, сабаҡтар менән ярышырға теләгән шикелле, йылғаны арҡыры-буйға ярып, йөҙәләр, сумалар. Икенселәре, йылғырыраҡтары, ҡуш тирәктең һылыу олондары буйлап менеп китәләр ҙә һығылма ботаҡтарға атланып тирбәләләр. Өсөнсөләре, ҡуш тирәкте ура-

тып, ҡыуышып югерешәләр. Хәбир инде, быныӊ өҫтәүенә ҡуш тирәк төбөнә салҡан төшөп ятып, япраҡтар араһынан айырата асыҡ зәӊгәр булып күренгән күкте күҙәтергә ярата. Ә иртә менән малайҙар уны, тирәк төбөнә ятып, китап уҡыған йәки тирәктеӊ иӊ бейек ботағына менеп ултырған хәлдә осраталар. Ул унда, ботаҡтан-ботаҡҡа күсеп, тирбәлә-тирбәлә, һандуғас булып һайрай-һыҙғыра йәки кәкүк булып саҡыра-саҡыра ла ярһып ҡысҡырып ебәрә:

— Их, осҡо килә, малайҙар! Үҫкәс, мин барыбер летчик булам.

Малайҙар баш әйләндергес юғарылыҡта ултырған Хәбиргә һоҡланып һәм, йығылып төшмәһә ярар ине тип, бер аҙ ҡурҡынып ҡарайҙар.

Башҡа малайҙарҙыӊ береһе лә Хәбир ултырған ботаҡҡа барып етә алмай. Ҡош булып һайрарға ла ул башҡа малайҙарҙан оҫтараҡ. Шуныӊ өҫтәүенә уныӊ һәр йыл һайын, бигерәк тә дүртенсе класты маҡтау грамотаһы менән тамамлауы, мандолинала бик һәйбәт итеп уйнай белеүе, уйында, сәсәнлектә лә бер малайҙы ла алдын сығармауы һәм иӊ тәртипле пионер булыуы менән ул үҙенеӊ иптәштәре араһында хөрмәт ҡаҙанған. Иптәштәре уны яраталар. Бәләкәстәр уны «Хәбир ағай» тип кенә йөрөтәләр. Үҙ-ара тартыш сыҡһа ла, уларҙы яраштырыусы Хәбир була. Ғөмүмән, нисектер, һөйләшеп, аӊлашып ҡуймаҫтан, ул үҙ тиӊдәштәре һәм үҙенән кеселәр араһында ла танылған башлыҡ булып алғайны.

## II

Был арала көн бик иртә ҡыҙҙыра башланы. Август ҡояшыныӊ эҫе нурҙары, көньяҡтан иҫкән эҫе, ҡоро ел югерешеп уйнап йөрөгән малайҙарҙыӊ тамаҡтарын киптерә. Улар кемуҙарҙан ҡуш тирәк янына һыу инергә югерәләр.

Ләкин ни өсөндөр кисәнән бирле бында Хәбир күренмәй. Малайҙар уны хатта өйөндә лә күрмәнеләр. Ул, малайҙар йоҡоһонан торғансы уҡ, ҡайҙалыр киткән.

— Ҡайҙа йөрөй был Хәбир? — тип аптыраштылар малайҙар.

— Ҡайҙа китте икән? Бына ғәжәп!..

Һорауҙар яуапһыҙ ҡалды. Хәбирҙең ҡайҙа йөрөгәнен, ҡуш тирәк янынан ниңә биҙгәнен бер кем дә белмәне. Ә өйҙәренә барып белешергә береһенең дә ҡыйыулығы етмәне. Сөнки Хәбирҙең атаһы, ҡарт уҡытыусы Хәлим ағай, ауырып ята; кәрәкһеҙгә барып, уны борсорға береһе лә батырсылыҡ итмәй ине.

## III

Комбайнер Шәрипов кисәнән бирле үҙ участкаһында бер малайҙың ниҙер сүпләнеп, суҡаңлап йәрөүен күрҙе. Тәүге көндә быға артыҡ иғтибар итмәне.

«Йөрөй бирһен. Эшһеҙ бер малайҙыр шунда», тип уйланы ул. Ләкин бөгөн, таң менән тороп, үҙе эшкә башлаған саҡта ул, был малайҙың да баҫыуҙа йөрөгәнен күргәс, уға өндәшмәй ҡала алманы. Ике усын торба кеүек итеп ауыҙына ҡуйҙы ла бөтә баҫыуҙы яңғыратып ҡысҡырып ебәрҙе:

— Эй, малай, кил әле бында!..

Малай ишетмәне булһа кәрәк, һаман ер өҫтөндә эйелеп йөрөүен дауам итте.

Комбайнер ҡабатланы:

— Малай, бында кил!..

Быныһында малай ишетте. Ҡәүҙәһен турайтып, бер аҙ ҡарап торғандан һуң, ашыҡмай ғына атлап, комбайнер янына китте.

Аяғына күн итек, өҫтөнә ҡара салбар, аҡ күлдәк кейеп, янып торған ҡыҙыл галстук taҡҡан, ҡаҡсараҡ йөҙлө, аҡыллы ҡарашлы, ун бер-ун ике йәштәрҙәге был малай шунда уҡ комбайнер янында баҫып тора ине инде.

— Һин бында ни эшләп йөрөйһөң? — тип һораны унан комбайнер.

Малай уға һорау менән яуап бирҙе:

— Һеҙ, комбайнер ағай, ниңә был тиклем күп башаҡ ҡалдырып эшләйһегеҙ?

Комбайнер, был малайҙан көтмәгән һорауға нисек ҡарарға белмәйерәк торғандан һуң, ҡоро ғына итеп иҫкәртеп ҡуйҙы:

— Ағайыңдың эшен тикшерергә башың йәш әле, мырҙам. Ҡара һин уны, һин кем ул тиклем!

— Мин — пионер,— тине малай, ҡыйыу итеп. Унан, комбайнерға ауыҙ асырға ла бирмәй, ҡыҙыу итеп һөйләп китте: — Ағай, һеҙҙең был участкала ни өсөндөр күп башаҡ ҡала. Ә теге участкала эшләгәндә, һеҙ бер ҙә башаҡ ҡалдырмай инегеҙ. Мин, бында күпме ашлыҡ юғалыуын теүәл белеү өсөн, бер гектар ерҙең башағын йыйҙым. Эйе, эйе, ышанмаһағыҙ, председатель ағайҙан һорағыҙ. Ағай, һеҙ, минеңсә, комбайныгыҙҙы өҫтәнерәк йөрөтәһегеҙ шикелле. Күрәһегеҙ, ҡамылдар нисек оҙон ҡалғандар...

Комбайнер был көтөлмәгән «тикшеренеүсене»: «Минең эшкә ни ҡыҫылышың бар? Бешмәгән малай!..» тип әрләп ебәрмәксе булғайны ла, ләкин туптура ҡарап торған аҡыллы күҙҙәр уны был тупаҫлыҡты эшләүҙән туҡтаттылар. Һәм ул, үҙе лә һиҙмәҫтән, малай менән етди һөйләшеп китте.

— Мин комбайнды түбәндән йөрөтөр инем дә, бында ер түңгәклерәк шул, мырҙам. Ер тигеҙ түгел. Шуға күрә, нисек кенә тырышһаң да, комбайн үрҙәнерәк үтә. Шулай булғас, мырҙам, бында башаҡ ҡалыуы бик тәбиғи хәл. Аңланыңмы?

— Аңланым, — тине малай, уйланып.— Миңә хәҙер бында башаҡ күп ҡалыуҙың сәбәбе аңлашыла. Шулай ҙа һеҙ, ағай, комбайныгыҙҙы мөмкин тиклем түбәндәнерәк алдырырға тырышығыҙ.

Комбайнер ярым етди, ярым шаярыу тауышы менән көлөп ҡуйҙы.

— Ярар, мырҙам.

— Ә һеҙ тырышҡандан һуң да, башаҡ ҡалһа, беҙ, пионерҙәр, уны йыйып алырбыҙ.

Комбайнер баҫыуҙы яңғыратып көлөп ебәрҙе лә малайға үҙенең мазутлы ҙур ҡулын һуҙҙы.

— Бир бише, мырҙам, булды.

## IV

Иртән-иртүк малайҙар, ҡыҙҙар югерешә-югерешә ҡуш тирәк янына йыйылыша башланылар. Бөтәһе утыҙ-ҡырҡлап бала йыйылды. Бында икенсе, өсөнсө, дүртенсе класты тамамлаған уҡыусыларҙың күбеһе тип әйтерлек бар ине. Ҡуш тирәк төбө ҡапыл йәнләнеп китте. Һәр бер баланың йөҙөндә ниндәйҙер серле ҡыҙыҡһыныу, тулҡынланыу күренеп тора. Һәр ҡайһыһы ғәҙәттәгенән тыш йәнлерәк, шау-шыулыраҡ күренә ине.

Балаларҙың бөтәһенең дә ҡулында тоҡ йәки муҡса бар. Пионер һәм пионеркалар барыһы ла ҡыҙыл галстук таҡҡан. Балаларҙың һәр ҡайһыһы күҙе менән кемделер эҙләй, кемдеңдер һүҙ башлауын көтә, үҙенең күңелендәге һорауына яуап таба алмай борсола, ләкин береһе лә һүҙ башламай ине әле.

Иң һуңғы булып, ауыр кәүҙәле, әкрен хәрәкәтле малай — Марат килде. Ул, үҙен ваҡытһыҙ борсоғанға кәйефе киткәнде белгертергә тырышып, сырайын һытып, кеҫәһенән ҡара ҡәләм менән асыҡ итеп яҙылған бер ҡағыҙ тартып сығарҙы.

— Кем яҙҙы быны?.. Йоҡонан уянып китһәм, танау осомда ғына мендәр өҫтөндә ята.

Балалар, ҡыҙыҡһынып, уны әйләндереп алдылар.

Нәҙек оҙон буйлы һылыу малай Фәрит, Мараттың яурыны аша ҡарап, записканы ҡысҡырып уҡып та ебәрҙе:

«Марат дуҫ!

Иртәнге сәғәт туғыҙҙа ҡуш тирәк янына килеп ет. Пионер галстугыңды тағырға, ҡулыңа тоҡ йәки муҡса алырға онотма.

Көтөп, «Б а ш а ҡ».

Ғаиләлә иң өлкән бала булғанға, үҙен ҙур кеше итеп тоторға, бөтә эшкә төшөнөргә, ҡатнашырға тырышып торған кескәй малай — Рауил дә кеҫәһенән шундай уҡ ҡағыҙ алып күрһәтте.

— Битемә һалҡын ғына бер нәмәкәй тейгәнгә, уянып киттем. Ҡараһам, битем өҫтөндә аҡ ҡағыҙ ята. Ә эргәмдә бер кем дә юҡ, — тине ул, көлөп.

— Бир әле.

Фәрит, уның ҡулынан ҡағыҙҙы тартып уҡ алып, уҡый башланы:

«Рауил мырҙа!

Иртүк тор ҙа, ҡулыңа муҡса алып, ҡуш тирәк янына кил. Мин көтәм.

Ағайың «Б а ш а ҡ».

Өсөнсө класты тик дүрткә, бишкә генә тамамлаған, шат, көләс ҡыҙ Рауза ла, бығаса усына йомарлап торған ҡағыҙҙы асып, көлә-көлә уҡый башланы:

«Рауза һылыу, ҡыр кәзәһе! Иртә торғас та, ҡуш тирәк янына кил. Үҙең ҙурлыҡ тоҡ ал.

Оло ағайың «Б а ш а ҡ».

Балалар бөтәһе бер юлы көлөшә-шаулаша башланылар.

— Мин дә шундай уҡ яҙыу алдым!

— Мин дә!

— Мин дә!

— Ха-ха-ха!..

Аҡ ҡағыҙ киҫәктәре, аҡ күбәләк кеүек, балалар төркөмө өҫтөндә осто.

— Бына ул!

— Бына!

— Быны кем яҙған һуң?

— Ҡыҙыҡ! Ни өсөн, кем беҙҙе бында йыйған?

Ҡуш тирәк төбө ҡапыл, бал ҡорто иләүе кеүек, шаулап, гөрләп китте.

— Тс-с-с! — тип балаларҙы ҡапыл тыйҙы Фәрит. Ҡапыл тирәк башында, бик юғарыла, кәкүк саҡырып ебәрҙе.

— Бәй, был ваҡытта ниндәй кәкүк тағы?

Бөтәһе лә, аңкайып, ҡояшҡа сағылған күҙҙәрен ҡыҫып, тирәк башына ҡаранылар.

Ҡәкүк тауышы ҡабатланды.

— Ҡәк-күк, кәк-күк! Һеҙ төптә, мин күктә!

Балалар тирәкте уратып югерешә башланылар.

— Хәбир бит был! Хәбир!

— Ҡайҙа һуң ул?

— Ана ул, тирәктең иң осонда, ботаҡтар араһында йәшенеп ултыра.

— Төш, Хәбир!

— Йәһәт бул! Бында бер ҡыҙыҡ бар!

Хәбир үҙен табыуҙары өсөн шатланып ҡыҫҡырып ебәрҙе.

— Хәҙер төшәм!

Ул тирәктең майшылдап, тирбәлеп торған иң нәҙек ботаҡтары буйлап баш әйләндергес бейеклектән тейен етеҙлеге менән түбәнгә табан атылды һәм, ботаҡтан-ботаҡҡа һикереп, күҙ асып йомғансы ергә төштө. Балалар, бөтәһе бергә шаулашып, көлөшөп, уны уратып алдылар. Уны төрлө яҡтан һорауҙар менән күмделәр.

— Хәбир, «Башаҡ» кем ул?

— Кем беҙгә был яҙыуҙы яҙған?

— Ни өсөн?

— Һин ҡайҙа йөрөнөң?

Хәбир әкрен генә артҡа сигенде һәм ҡуш тирәк төбөндәге ҙур таш өҫтөнә барып ултырҙы. Унан кеҫәһенән әкрен генә бер ус башаҡ тартып сығарҙы ла, шаян йылмайып:

— Бына кем һеҙҙе бында саҡырып килтерҙе. «Башаҡ» ағайығыҙ ошо була инде, — тине.

Балалар, көлөргә лә, асыуланырға ла белмәй, аптырап ҡалдылар. Хәбир шунда уҡ етди төҫ алды һәм һәр бер балаға бер башаҡ тотторҙо.

— Ҡарағыҙ. Ниндәй бойҙай өлгөрә беҙҙең колхоз баҫыуында.

Балалар өлкән игенселәрсә башаҡты устарына ыуып, һанап ҡарарға тотондолар. Ҡескәй генә устарында баҙырайып ятҡан эре бойҙай бөртөктәренә ҡарап һоҡландылар.

Хәбир Фәриткә һорау бирҙе:

— Һинең ҡәләм, ҡағыҙың бармы?

— Бар. Пионер ҡағыҙ-ҡәләмһеҙ йөрөймө ни?

Ул кеҫәһенән яңылыш көҙгө тартып сығарҙы. Балалар шаулашып көлөп алдылар.

— Ҡупшы егет көҙгөһөҙ йөрөймө ни, тиген!

Һәйбәт кейенеп, сөм-ҡара сәстәрен тарап әленән-әле көҙгөгә ҡарап, һыланып-һыйпанып ҡуйырға ярата торған Фәрит көҙгөнө асыу менән кеҫәһенә кире тығып ҡуйҙы ла икенсе кеҫәһенән блокнот менән ҡәләм алды. Хәбир ҡулын дуҫтарса Фәриттең яурынына һалды.

— Мин һиңә бер мәсьәлә әйтәм. Шуны сығар.

— Йә, әйтеп ҡара.

Хәбир үҙ ҡулындағы башаҡҡа күрһәтте.

— Ошо башаҡта 5 грамм бойҙай бар. Ә беҙҙең колхоздың комбайнере Шәрипов ағай хәҙер эшләгән түңгәкле участкала һәр бер квадрат метр ерҙә ошондай дүрт-биш башаҡ ятып ҡала. Шулай булғас, беҙҙең колхоз бер гектар ерҙән нисә килограмм ашлыҡ юғалтҡан була?

Класта арифметиканан бер кемде лә алдын сығармай торған теремек Юлай, Фәриттең сығарыуын да көтмәй, ҡысҡырып ебәрҙе:

— Әгәр уртаса биш башаҡтан иҫәпләһәк, ике йөҙ илле килограмм. Ике ярым центнер була.

— Дөрөҫ,— тине Хәбир, өлгөр яуапҡа шатланып, һәм мәсьәләһен дауам иттерҙе:

— Беҙҙең колхоздың бойҙай баҫыуы 250 гектар. Әгәр бөтә баҫыуҙа ошолай башаҡ ҡалһа, беҙ бөтәһе нисә килограмм тас бойҙай юғалтҡан булыр инек?

Фәрит инде ҡәләмгә тотонорға ла уйламаны. Сөнки Юлайҙан элек барыбер сығарып өлгөрә алмаяғын ул белә ине. Юлай әҙ генә уйлап торҙо ла ҡысҡырып та ебәрҙе:

— 67500 килограмм. 670 центнер юғалтҡан булыр инек.

— Бына, белдегеҙме, колхозға ни тиклем ҙур зарар килер ине,— тине Хәбир.— Эйе бит, малайҙар?

— Эйе.

— Быңдай юғалтыуға юл ҡуя алабыҙмы беҙ?

— Юҡ!

— Ярамай!

— Башаҡтарҙы йыйып алырға кәрәк!— тип шаулаштылар балалар.

Хәбиргә шул ғына кәрәк ине. Ул, дәртләнеп, таш өҫтөнән һикереп торҙо.

— Дөрөҫ! Башаҡтарҙың бер бөртөгөн дә ҡалдырмай йыйып алырға кәрәк.

Унан тынысыраҡ тауыш менән дауам итте:

— Үҙегеҙ беләһегеҙ, беҙҙең уҡытыусыбыҙ ауырып ята. Вожатый апай үҙе колхозда, ҡыр эшенән бушамай. Шулай булғас, башаҡ йыйыу эшен ойоштороуҙы вожатый апай миңә тапшырҙы. Һеҙ шуға ризамы?..

Балалар бер тауыштан ҡыҫҡырҙылар:

— Риза!

— Һәйбәт була!

— Бөгөнгө көндән алып, һеҙ бөтәгеҙ ҙә минең ҡарамаҡта булаһығыҙ. Һәр көн иртә менән башаҡ йыя китәбеҙ. Кисһеҙ, ҡуш тирәк янына килеп, уйнап йөрөүҙе тыям. Һәр бер балаға кәмендә бер гектар ерҙең башағын йыйыу бурысы йөкләтелә. Мин колхоз председателе Барый ағай менән һөйләштем. Ул беҙгә унда дөйөм ашау ойошторорға булды. Көндөҙ ҡайтып йөрөмәйәсәкбеҙ.

Төрлө яҡтан хуплау тауыштары яңғыраны:

— Бик һәйбәт.

— Яҡшы.

— Әйҙәгеҙ, киттек.

Хәбир, рухланып, алға сығып баҫты.

— Сафҡа теҙелегеҙ, иптәштәр!

Балалар ашығып теҙелделәр. Фәрит йыр башлап ебәрҙе:

Бәр барабанға, бәр барабанға —
Марш тауыштары алыҫ яңғыраһын!..

Балалар бөтәһе бер тауыштан күтәреп алдылар. Колонна, йыр ыңғайына бер тигеҙ баҫып, баҫыуға табан атланы.

## V

Улар бөгөнгө эште тамамлап ырҙынға ҡайтып ингәндә, ҡояш байып бара ине инде. Балаларҙың бөтәһе лә, ҡояшҡа бешеп, ҡына гөлө кеүек булып ҡыҙарғандар, арығандар, ләкин һәр ҡайһыһы ғәҙәттән тыш шат күңелле ине. Уларҙы Тыуған ил алдында үҙ бурысын намыҫ менән үтәгән кешеләрҙә генә була торған дәртләндергес шатлыҡ солғап алғайны. Бригадир Талип ағай улар алып килгән бойҙайҙарҙы шунда уҡ үлсәүгә һалды.

— Бойҙайы ла ниндәй бит, алтын бөртөктәре кеүек, — тине ул. — Рәхмәт, балалар.

— Бына, күрҙегеҙме, дуҫтар! — тип күтәреп алды Хәбир, ҡыуанып. — Әгәр беҙ көн һайын шулай йыйһаҡ, колхозға ни тиклем ярҙам иткән буласаҡбыҙ!— Унан ҡаты ғына итеп иҫкәртеп ҡуйҙы:— Иртәгә иртәнсәк, һөйләшкән ваҡытҡа, һәр ҡайһығыҙ урынында булһын. Ә хәҙер кем теләй шул минең арттан ҡуш тирәк янына һыу инергә югерә. Бер, ике, өс!..

Хәбир, уҡ кеүек атылып, ырҙындан югереп сығып китте. Башҡа балалар ҙа кемуҙарҙан уның артынан югерҙеләр. Ә ҡуш тирәк уларҙы, ҡеүәтле олондарын сайҡалдырып, тәңкә япраҡтарын елберҙәтеп, ҡыуанып ҡаршыланы.

*Март, 1947*

# Кояш нимә тине?

Морат йоҡоһонан уянды ла, һикереп тороп, ашыға-ашыға кейенә башланы. Ә үҙе ниңәлер көлә, шатлана, кейенеп торған еренән бейеп-бейеп ала. Хатта ауыҙ эсенән ниндәйҙер күңелле бер көйгә йырлап та ебәрә.

Бөгөн йоҡонан тороу менән, уның күңелен ғәҙәттән тыш шатлыҡ солғап алды. Өй эсендәге бөтә әйберҙәр ҙә бөгөн уға нисектер айырата шатыраҡ, күңеллерәк, яғымлыраҡ тойолдо.

— Әллә бөгөн берәй байраммы икән? — тип һораны ул үҙ-үҙенән.

— Юҡ, егерменсе мартта ниндәй байрам булһын? — тип яуап бирҙе уға күңеле төбөнән бер тауыш.

Морат йүгереп тәҙрәгә барҙы. Ә унан тауҙар артынан әле генә күтәрелеп килгән алтын ҡояш, уға туп-тура ҡарап, йылмайып сәләмләне:

— Байрам шул бөгөн! Яҙ байрамы! Белмәйһеңме ни, яҙ башы бит бөгөн. Быға тиклем мин ерҙең көньяҡ ярымшары яғында йөрөнөм. Ә бөгөн бына экваторҙы аша үттем дә, төньяҡ ярымшар яғына — һеҙҙең яҡҡа сыҡтым. Бөгөн ерҙең бөтә урынында ла төн менән көн бер тигеҙ оҙонлоҡта булды. Бөгөндән һуң инде һеҙҙең яҡта көндәр оҙая, төндәр ҡыҫҡара барасаҡ. Әйе, бынан һуң мин һеҙҙең яҡты көндән-көн оҙағыраҡ яҡтыртасаҡмын...

— Яҙ, — тине Морат, сикһеҙ шатланып. — Яҙ етте!.. Бына ни өсөн бөгөн байрам көнө һымаҡ икән!

— Яҙ шул, — тине уға зәңгәр күк тә, йылмайып.

Ул инде хәҙер, күҙ яуын алырлыҡ асыҡ зәңгәр түҫтәге көмбәҙ булып, бик-бик юғарынан ҡарап тора ине.

Ап-аҡ һыу парҙарын түбәгә бөркөп ултырған йыуан ҡорһаҡлы еҙ самауыр ҙа, комод өҫтөндәге түңәрәк битле көҙгө лә, хатта вазалағы яһалма роза сәскәһе лә, ҡояш нурҙарына ҡойоноп уйнай-уйнай, шул уҡ бер һүҙҙе һөйләне:

— Яҙ етте шул, Морат, яҙ етте. Ниндәй күңелле!.. Ә йәй еткәс, тағы ла күңеллерәк буласаҡ!..

Морат, осорға талпынған ҡош кеүек ярһып, ҡағынып ҡуйҙы.

— Их, яратам да һуң яҙ көнөн!

Ошо ваҡыт ҡапыл уның күҙ алдына үткән яҙғы бер иртә килеп баҫты.

Июнь айының аҙаҡҡы яртыһы ине. Морат Ҡариҙел йылғаһы буйындағы пионер лагерҙәренең береһендә ял итә ине. Яҡшы уҡығаны өсөн, пионер ойошмаһы уға тәүге путевкаларҙың береһен биргәйне. Ошо аркала Моратҡа яҙғы тәбиғәттең бөтә уянышын, беҙәнешен яҡшылап күҙәтергә мөмкинлек булғайны.

Бына бер көндө ул бик иртә торҙо ла, иптәштәрен уятмаҫ өсөн, аяҡ осо менән генә баҫып, тышҡа сыҡты. Уның таң алдындағы урман күренешен күҙәткеһе килә ине.

Тыш һалҡынса һәм еүеш. Ер өҫтө яңы ғына яҡтырып килә. Тирә-яҡ, иртәнге ҡоро томан эсенә сумып, тып-тын ята. Бер генә япраҡ та һелкенмәй, бер генә өн дә тәбиғәттең мөһабәт тыныслығын боҙмай. Юкә, сәтләүек ағастарының яңы ғына бөрөнән сыҡҡан йәм-йәшел йәш япраҡтарының өҫтөндә, ынйылар кеүек йымылдашып, ысыҡ бөртөктәре ята.

Бына ҡайҙалыр алыҫта, урман төпкөлөндә, бер ҡош ҡысҡырып ебәрҙе, уға икенсеһе ҡушылды. Шунда, алыҫ түгел бер урында, тумыртҡа туҡылданы. Иртәнге томан асыла, яҡтыра барған һайын, тауыштар ишәйҙе, көсәйҙе. Бар тәбиғәт уяна, хәрәкәткә килә башланы.

Ҡымырҫҡалар ҙа йоҡоларынан уянып сыҡтылар һәм бөтәһе берҙәм эшкә тотондолар. Бына улар кисә-

ге көслө ямғырҙа ер өҫтөнә сығарып ташланған селәүсенде табып алдылар. Уға төрлө яҡлап һөжүм итә башланылар. Бер артҡа, бер алға китеп, югереп йөрөп селәүсенде сағырға, тешләргә тотондолар. Селәүсен еңелде, сирҡандырғыс ҡыҙыл тәне бүртенеп, иҫһеҙләнеп, һуҙылып ятты. Ә һунарсы ҡымырҫҡаларға шул ғына кәрәк ине. Улар селәүсенде күмәкләшеп һөйрәп алып киттеләр.

Ҡара нөктә биҙәкле ҡыҙыл ҡанатлы ҡуңыҙ — көнйылытҡыс Мораттың алдында ғына торған оҙон үләндең иң нәҙек осона уҡ барып менде.

Морат уны тиҙ генә тотоп алды ла, баҫҡан урынында бейеп, таҡмаҡлай-таҡмаҡлай, әле бер ҡулының, әле икенсе ҡулының һуҡ бармағына күсерҙе.

**Көнйылытҡыс, көнйылытҡыс,**
Болот булһа, боҫ, боҫ!
Аяҙ булһа, ос, ос!..

Көнйылытҡыс бер бармаҡтан икенсе бармаҡҡа күсеп йөрөүҙән арыпмы, әллә Мораттың күңеле булһын типме, ике ҡатлы көмөрө ҡанаттарын ҡапыл йәйҙе лә осоп китте.

— Осто, осто!.. Көн аяҙ буласаҡ! — тине Морат, көлөп.

Ул арала ҡайҙандыр бик ҙур тиреҫ ҡуңыҙы килеп сыҡты. Тоҡом үгеҙенең мөгөҙөнә оҡшаған мөһабәт мөгөҙҙәрен берсә бер яҡҡа борғолап, үләндәр аҫтынан әкрен генә алға шыуышты... Морат иплəп кенә уның йылтыр көрән арҡаһынан һыйпаны. Ҡуңыҙ, шунда уҡ йөрөүҙән туҡтап, үлгәнгә һалышып ятты. Морат уны төрлөсә ҡуҙғатҡыланы. Салҡан әйләндереп һалып та ҡараны. Булманы. Ҡуңыҙ сер бирмәне. Бер ни toймағанға һалышып ята бирҙе. Тик Морат бик оҙаҡ теймәй торғас, ҡурҡыныс бөткәнлеккә тамам ышанғас ҡына, ул, ҡуҙғалып, үҙ юлына китте.

Инде бөтә ҡоштар ҙа уянып бөттөләр. Урман эсен яңғыратып, сыр-сыу күтәрҙеләр. Бер һандуғас Мораттың баш осондағы ботаҡҡа килеп ҡунды ла, әсе һыҙғырып, һайрап ебәрҙе. Уға башҡалары ҡушылды.

Ә яңғыҙ ҡәкүк, Ағиҙелгә ауып төшә яҙып ултырған бик йыуан, бик бейек тирәктең нәҙек, һығылма бер ботағына ултырып тирбәлә-тирбәлә, башын әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа һалып, саҡыра, маҡтана башланы.

— Ҡәк-күк, кәк-күк! Кем — күп? Беҙ — күп!

Мораттың ҡолаҡ төбөнән генә бал ҡорто бызылдап үтте. Шунда уҡ яңы ғына асылып килгән юкә сәскәһенә барып ҡунды.

Бөтә тәбиғәт уянды, эшкә тотондо. Сәтләүек ағасының ҡуйы япраҡтары араһынан Мораттарҙың аҡ дачаһына алтын уҡтар булып ҡояш нурҙары һуҙылды.

Бына, һауа яңғыратып, горнист сигнал уйнап ебәрҙе. Ҡояшҡа янған, шат, сәләмәт балалар, шаугөр килеп, уйнай-һикерә, дачаларҙан югерешеп сыҡтылар...

«Их, бына нисек күңелле ине беҙҙең лагерҙә!.. Быйыл да барһаң ине унда...»

Уйының ошо урынында Мораттың, ниңәлер ҡапыл ғына кәйефе боҙолоп, йөҙө һөрөмләнеп китте. Ул тәҙрәгә арты менән әйләнде.

«Эйе, барһаң ине лә бит, ә мин...»

Өҫтәл өҫтөндәге йыуан ҡорһаҡлы еҙ самауыр менән комод өҫтөндәге түңәрәк битле көҙгө һаман баяғыса ғәмһеҙ ялтырап, көлөп уға ҡаранылар.

«Эйе, уларға күңелле. Ауыҙҙарын йырып, ялтырап ултырыуҙарын ғына беләләр, — тип уйланы ул, ни өсөндөр бигерәк тә йыуан ҡорһаҡлы еҙ самауырға асыуланып, — уларға нимә!! Ә мин кисә...»

Морат, был уйынан ҡасып ҡотолорға теләгән һымаҡ, ашығып кухня яғына сығып китте.

Уға, йыуынып, сәй эсеп алырға ла тиҙерәк дәрес әҙерләргә ултырырға кәрәк ине. Ул төштән һуң уҡығанлыҡтан, мәктәпкә барғансы, уның бик күп ваҡыты бар ине әле. Был ваҡытты дөрөҫ бүлгәндә, уға дәрес әҙерләргә лә, тышта саф һауала уйнап инергә лә өлгөрөргә мөмкин ине. Ләкин Морат һуңғы көндәрҙә ошо ваҡытты һис тә дөрөҫ файҙалана алмай башланы. Дәрес әҙерләргә ултырыу менән, уның күңеле:

— Тышҡа, тышҡа сығырға! Конькиҙә йөрөргә, санала шыуырға кәрәк. Их, күңелле лә һуң тышта! — тип сабырһыҙланып тибә башлай. Морат дәресте арлы-бирле генә әҙерләй ҙә: «Туҡта, әҙ генә уйнап инәйем, ҡалғанын ингәс тә әҙерләп бөтөрөрмөн», — тип югереп сығып китә. Ә тышта бөтәһе лә онотола. Дәрес әҙерләргә кәрәклек иҫкә төшкәндә, инде мәктәпкә китергә ваҡыт килеп еткән була. Ошо арҡала бына ул кисә арифметиканан икеле билдәһе алды ла инде. Ҡалай ҡыйын булды уға! Тәүтапҡыр бит! Бығаса ул гел яҡшы уҡыны. Ә быйыл бына дүртенсе класта әллә ни эшләп насар уҡый башланы. Башта «биш»тән «дүрт»кә күсте.

«Дүрт» бер ҙә насар билдә түгел әле», тип уйланы ул. Унан уҡытыусы уға «өс»лөләр ҡуя башланы. Ул:

«Өс» инде ул өс, «ике» түгел, — тип үҙен тынысландырҙы.

Ә бына кисә таҡтаға сыҡҡас, ул бөтөнләй хур булды. Иң анһат ҡына бер мәсьәләне эшләй алманы ла ҡуйҙы. Шулай итеп, икеле билдәгә лә килеп етте. Бына шуның өсөн кисәнән бирле уның һис тә кәйефе юҡ. Әле бына хәҙер ҙә йоҡоһонан торған ыңғайы яҙ башының матурлығына ҡыуанайым ғына тигәйне лә, кисәге шул яуыз «ике» иҫенә килеп төштө лә бөтә шатлығын бөтөрҙө лә ҡуйҙы.

«Инде гел шулай булыр. Рәхәтләнеп уйнайым, көләйем генә тиһәң, күңел төбөнән әллә ниндәй бер тауыш:

— Морат, һин икеле билдә алдың! — тип үртәп кенә торор. Былай булһа, миңә яҙҙың йәме ни ҙә, йәйҙең йәме ни?»

Морат, ошо уйҙар менән баш вата-вата, йыуынып, һөртөнөп, өҫтәл янына күңелһеҙ генә килеп ултырҙы. Сынаяҡтағы сәйгә төшөп сағылған ҡояш нурҙары уны үртәгән кеүек берсә түбә таҡтаһында, берсә стена буйында һикергеләп, бейеп уйнай башланы. Етмәһә, әмәлгә ҡаршы, атаһы ла унан:

— Улым, дәрестәрең нисек бара? — тип һорап ҡуйҙы.

Бер айлыҡ отпускынан, көньяҡ куророттан кисә кис кенә ҡайтып төшкән атаһы уның хәҙер нисек уҡығанын белмәй ине әле.

Морат ҡыҙарынды, бүртенде, ләкин атаһына үҙенең нисек уҡыуын әйтеп бирә алманы.

Уны был ауыр хәлдән әсәһе ҡотҡарҙы.

— Морат ни хәҙер насар уҡый. Арифметиканан хатта кисә «ике» алып ҡайтты...— тип әйтте лә һалды.

— Шулаймы ни?— тип борсолоп китте атаһы.

— Шулай шул. Ул ни, уйнарға сығып китһә, ҡайтыуҙы белмәй хәҙер. Уйын менән эштең араһын айыра белмәгән малай ҡалай итеп яҡшы уҡыһын?

Атаһы, ныҡ күңелһеҙләнеп, Моратҡа ҡараны:

— Ә мин тағы, улым уҡыусылыҡ бурысын намыҫ менән үтәй, эштә лә һынатмаҫ, тип уйлап, тыныс йөрөгән булам.

Был һүҙҙәр Мораттың һиҙгер йөрәгенә уҡ булып барып ҡаҙалды. Ул, ғәйепле башын түбән эйеп, өнһөҙ-һүҙһеҙ ултырҙы. Сәй янында әллә ниндәй күңелһеҙлек, тынлыҡ урынлашты. Тик йыуан ҡорһаҡлы еҙ самауыр ғына һаман баяғыса ғәмһеҙ шыжылданы. Әсәһенең сәйенә төшөп сағылған ҡояш нурҙары ла, ҡарышҡан шикелле, һаман шулай түбә таҡтаһында бейеп йөрөнөләр, етмәһә, был саҡта инде ап-арыу юғары күтәрелергә өлгөргән бик дәү ҡояш үҙе лә тәҙрәнән Моратҡа туп-тура текләп ҡарап тора башланы. Әйтерһең дә, ул да:

«Ай-һай, үҙ өҫтөңә йөкләнгән эште һәйбәт башҡармаһаң, яҡындарыңдың ышанысын аҡламаһаң, бигерәк ҡыйын була икән шул!» тип Моратты үртәп тора ине.

Эйе, бик ҡыйын ине шул хәҙер Моратҡа, шуға ул әле ҡояшҡа ла күтәрелеп ҡарай алмай ине.

*Март, 1947*

# Ярҙамсы

Йәйге ҡыҙыу эш ваҡытында Йәмилдең атаһы ҡапыл ауырып китте. Колхоздың иң салт аты — көрән айғырҙы егеп, уны шунда уҡ район больницаһына илтеп һалдылар. Ҡырандасҡа сығып ултырыр алдынан, атаһы Йәмилде янына саҡырып алды ла хәлһеҙ генә тауыш менән:

— Улым, — тине. — Һин хәҙер ҙур кеше. Ҡустыңды ҡара, әсәйеңә ярҙамсы бул.

Атаһын йәлләп, Йәмилдең күҙҙәренә йәш тулды. Ләкин ул сер бирмәҫкә тырышты. Өлкәндәрсә түҙем тауыш менән яуап бирҙе:

— Ярар, атай, тыныс бул.

Сер бирергә мөмкинме һуң? Уға бит инде ун бер йәш тулды. Хәҙер ул өйҙә ир енесенән иң ҙур кеше булып ҡала.

Больницала Йәмилдең атаһына операция яһанылар. Үлемдән ҡотҡарып ҡалдылар. Ләкин ул өйгә тиҙ генә ҡайта алманы. Унда оҙаҡ дауаланып ятты. Ә больницанан сыҡҡас, уға колхоздан бер айлыҡ путевка биреп, алыҫҡа, Өфө янына, санаторийға ебәрҙеләр.

— Әйҙә, тамам һауыҡҡансы дауаланһын, — тиештеләр колхозсылар. — Ял итһен.

Йәмилдең атаһы бик тырыш, һәйбәт колхозсы ине шул. Уны бөтә колхозсылар ҙа яраталар ине.

— Колхоз эше өсөн йәнен-тәнен биреп эшләй ул. Арыу-талыуҙы белмәй, — тип маҡтайҙар ине.

Йәмилдең атаһы һарыҡсылыҡ фермаһында мөдир булып эшләй ине. Уның фермаһында тәрбиәлән-

гән нәҙек бөҙрә йөнлө һарыҡтар, дүртәр-бишәр килограмм йөн биреп, тирә-яҡта дан тоталар ине.

Һауығып ҡайтҡас, ул фермала тағы ла шәберәк итеп эшләр әле. Йәмил был көндө ышанып, ашҡынып көтә. Ул атаһын бер ҙә онотмай. Бигерәк тә уның больницаға китер алдынан әйткән һүҙҙәре Йәмилдең ҡолағында сыңлап ҡына тора:

«Улым, һин хәҙер ҙур кеше. Әсәйеңә ярҙамсы бул!..»

Был һүҙҙәр Йәмилде ҙур кеше булырға, өйҙә әсәһенә ярҙамсы булырға саҡырҙылар. Тик башта Йәмил был ҙурлыҡты, ярҙамсылыҡты нимә менән күрһәтергә белмәй генә йөҙәне.

«Нимәнән башларға һуң?»

Бер ваҡыт ул бик иртә, әсәһе эшкә китергә йыйынған саҡта, йоҡоһонан уянып, һикереп торҙо ла, күҙҙәрен тырнап асып, әсәһенә ҡараны.

— Әсәй, — тине ул, етди, ныҡ булырға тырышып. — Һинең урынға эшкә мин барайым, булмаһа. Һин өйҙә ҡал, йәме.

Был ваҡытта колхозда бик ҡыҙыу бесән эше бара ине. Йәмилдең әсәһе косилка артынан бесән йыйып күбәләү эшендә йөрөй ине. Әсәһе, күтәрһәң, бер һәнәк бесән ауырлығы булмаҫтай бәләкәс улына ҡарап, шаян ғына йылмайып ҡуйҙы. Ә Йәмил тағы ла уяуыраҡ итеп:

— Ысын, әсәй, мин барайым, — тип өҫтәне. Был ваҡытта ул, ысынлап та, йоҡоһонан тамам уянып бөткәйне инде.

— Юҡ, улым, — тине әсәһе, инде йылмайыуҙан туҡтап, — бәләкәсерәкһең әле. Һин ана ҡустыңды ҡара. Кис еткәс, көтөү ҡайтҡанда, малдарҙы ҡаршыла.

Шулай тине лә ул ашығып сығып та китте. Ҡыҙыу эш ваҡытында оҙаҡ һөйләнеп торорға уның ваҡыты юҡ ине.

Әсәһе әйткән был эштәрҙе Йәмил элек тә, атаһы иҫән саҡта ла, эшләй ине. Ә хәҙер уға, өйҙә атаһы урынына ғаилә башы булып ҡалған кешегә, ҙурыраҡ эштәр башҡарырға кәрәк ине бит инде. Нимә эшләргә һуң?!

Ошо уйҙар менән баш ватып торған саҡта, уның күҙҙәре усаҡ янындағы буш күнәктәргә төштө. Ул әсәһенең иртә менән һыу алып китергә өлгөрмәгәнен аңланы.

«Туҡта, һыу ташып ҡуяйым», тип уйланы ул. Көйәнтәгә ике бәләкәс күнәкте элде лә шишмәгә китте.

Күрше малай Хәлил, уның көйәнтәләп һыу алып ҡайтып килгәнен күргәс, ҡулдарын сәбәкәйләп көлә-көлә таҡмаҡлай башланы:

Йәмил ҡыҙ булған,
Ҡыҙ һыуға барған.
Һыу алайым тип,
Ҡом һоҫоп алған.

Йәмил бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Алып килгән һыуын ҙур күнәктәргә бушатты ла тағы шишмәгә йүгерҙе. Әсәһе һыу алып килә торған ҙур күнәктәрҙе тултырыу өсөн, уға тағы ике юл барырға кәрәк ине әле.

Хәлил һаман үсекләп ҡалды:

Йәмил булған Йәмилә,
Бөткән инде хәле лә!

Йәмил, бик ныҡ ғәрләнһә лә, һаман өндәшмәне, түҙҙе. Сөнки әсәһенә ярҙам иткәһе, уны ни менән булһа ла ҡыуандырғыһы килә ине уның.

Ул шишмәгә өсөнсө тапҡыр барғанда, әле генә үҙенән көлөп торған Хәлилдең дә һыңар күнәк тотоп йүгереп килгәнен күрҙе. Ул да хәҙер, Йәмилдән күрмәксе, һыу ташырға булғайны.

— Ә-ә-ә! «Хәлимә» лә һыуға китеп бара икән,— тип көлдө хәҙер Йәмил. — Ана шулай була ул. Кешенән көлһәң, үҙең көлкөгә ҡалырһың!..

— Һин асыуланма, йәме, Йәмил, — тине Хәлил ярашыу тауышы менән. — Минең дә, әсәйем эштән ҡайтыуға, һыу килтереп ҡуйғым килә.

Улар яраштылар.

Һыу ташып бөткәс, Йәмил утынлыҡтан тап-топтар йыйып индерҙе. Аш бешерер өсөн, картуф әрсеп ҡуйҙы.

Кис менән эштән арып ҡайтҡас, әсәһе Йәмилде был эше өсөн маҡтап бөтә алманы.

— Мин өйҙә япа-яңғыҙ ҡалдым тиһәм, ҙур улым, ярҙамсым бар икән дәбаһа минең, — тип ҡыуанды.

Иртәгеһен Йәмилдең әсәһе эшкә тағы бик иртә китте. Йәмил, ҡустыһы менән икәүләп, әсәһе әҙерләп киткән ҡаймаҡлы ҡатыҡты эскәндән һуң, ҡустыһын, көндәгесә, балалар баҡсаһына оҙатты. Унан ҡайтҡас, ҡатыҡ эскән туҫтаҡтарын йыуып ҡуйҙы. Ҡалған икмәктәрен ашъяулыҡҡа төрөп һалды. Өйҙө, урынерҙе йыйыштырҙы. Иҙәнде лә, һыу бөркөп, һәйбәтләп һепереп алды. Һыу ташыны. Унан, хужаларса киң атлап, ишек алдына сыҡты.

Уларҙың уҙған йыл ғына һалынған яңы өйҙәре урам яҡтан өр-яңы ағас ихата менән уратып алынған. Тик Хәлилдәр менән ике аралағы ихатаны ғына атаһы эшләп бөтөрә алмай ауырып киткәйне. Бына ихатаға ҡағыр өсөн, баштары ҡыйғаслап юнып шымартылған бер тигеҙ нәҙек таҡталар ҡағырға йәтешләп һалған көйө ятып ҡалғандар.

Йәмил ҡыйыуһыҙланыбыраҡ ҡына ихата янына барҙы. Таҡталар янында атаһының ағас һаплы сүкеше лә, ҡаҙауҙар һалынған бәләкәс йәшниге лә ята ине.

«Хужаһы булмағас, нисек меҫкен генә булып яталар», тип уйланы Йәмил һәм, бер таҡтаны алып, әйләндергеләп, оҙаҡ ҡына ниҙер уйлап торҙо. Атаһы, урам яҡтан кәртәгә хәтле бағаналар ултыртып, уларға аҫтан бер, өҫтән бер буй арата ҡағып сыҡҡан. Унан һуң ошо араталарға бынауы таҡталарҙың ҡыйғас башын юғары ҡуйып ҡаҙаҡлай башлаған...

Бер ҙә ҡыйын түгел. Хәҙер быны ошолай теҙеп ҡағып алып китергә генә кәрәк. Бына ошолай итеп...»

Йәмил сүкеш менән ҡаҙаҡ алды ла ҡулындағы таҡтаны атаһы ҡаҡҡан бүтән таҡталар янына бик иплән кенә ҡағып ҡуйҙы. Унан ситкәрәк китеп тә, яҡын килеп тә үҙ эшенең һөҙөмтәһен тикшерҙе.

«Һәйбәт сыҡты. Тап атайым ҡаҡҡан таҡта кеүек», тип уйланы. Унан эшен артабан ҡыйыурыраҡ

дауам итте. Ул арала өйҙәренән тағы баяғы Хәлил килеп сыҡты. Тупһаларынан төшөр-төшмәҫтән ҡысҡырып ебәрҙе.

— Йәмил, әйҙә, һыу инергә барайыҡ!

— Бармайым әле.

— Әйҙә инде. Балыҡ та ҡармаҡларбыҙ.

— Бармайым. Ҡил әле бында. Бынауы ихатаны икәүләп эшләп бөтөп ҡуйайыҡ. Ул һеҙҙең өсөн дә кәрәк бит...

Хәлил, югереп, иптәше янына килде.

— Нимә тиһең?

— Бынауы ихатаны эшләп бөтөрәйек, тим.

Хәлил дуҫының көндән-көн быға са эшләмәгән яңы эштәр табып тороуына тамам ғәжәпләнде.

— Беҙ уны эшләй беләбеҙҙер шул? — тип һораны.

— Белмәй ни, — тип ҡыҙҙы Йәмил, — бына атайым эшләй башлаған бит. Шуға ҡарайбыҙ ҙа эшләйбеҙ. Бында бит бөтәһе әҙер, беҙгә тик таҡталарҙы теҙеп, ҡағып сығырға ғына ҡалған. Бына күрәһеңме, тәүҙә таҡтаны ошолай алған да туралап ҡуйған. Унан ҡаҙау менән бынауы ике урындан аратаға ҡаҙаҡлаған да, эше бөткән. Унан йәнә шулай. Аңлаыңмы?

— Әйҙә һуң, эшләп ҡарайыҡ, — тине Хәлил, еңеләп. — Тик боҙһаҡ, ҡара, мин ғәйепле түгел. Һин үҙең...

— Ярар, ярар, мин үҙем, — тип уның һүҙен бүлдерҙе Йәмил. — Ҡурҡма.

Малайҙар ҡыҙыуланып эшкә тотондолар. Йәмил тигеҙләп, туралап ҡуйып биргән таҡтаны Хәлил нык итеп, шыуҙырмай тотоп торҙо. Йәмил уны ҡаҙау менән аратаға беркетте. Тырышып ярҙам иткән өсөн, Йәмил бер нисә тапҡыр Хәлилгә лә ҡаҙау ҡағырға рөхсәт итте.

Улар оҙаҡ эшләнеләр. Ҡояш юрый, ҡарышҡан кеүек, аяуһыҙ ҡыҙҙырҙы. Эштәрен ташлап, һыу инә китһендәр, тип уйланы шикелле ул. Ләкин малайҙар бирешмәнеләр. Ҡояш ҡыҙҙырыу ғына түгел, аяҡ, ҡулдарына таҡтанан шырау инеп, сыйғылап бөтһә лә, сүкеш менән бармаҡтарына ҡаты ғына һуҡҡылап

алһалар ҙа, башлаған эштәрен аҙағына еткермәйенсә туҡтаманылар.

Ҡискә табан ихата эшләнеп бөттө. Ул, Йәмилдең атаһы ҡаҡҡан урын хәтле үк тигеҙ булмаһа ла, һәйбәт кенә килеп сыҡты. Ярты юлда ятып ҡалған эш теүәлләнде. Йәмил, бының өсөн әсәһенең ни тиклем ҡыуанасағын уйлай-уйлай, урамға көтөү ҡаршыларға сығып китте.

*Декабрь, 1946*

# Өмөт бөрөләре

Иҙелғужаның атаһын ҡалаға эшкә күсерҙеләр. Иҙелғужа, өсөнсө кластан башлап, ҡала мәктәбендә уҡый башланы. Мәктәп бик ҙур, матур, янында емеш баҡсаһы ла бар. Уҡыусы балалар эш сәғәттәрендә ошо баҡсала эшләйҙәр. Иҙелғужа ла, әлбиттә, класс менән бергә була. Ләкин уға, Бөрйәндән — йөҙ йәшәр ҡарағайлы ҡара урмандарға бай райондан килгән малайға, был баҡса башта бер ҙә оҡшаманы. Уҡытыусылар, уҡыусыларҙың да һәр бер ағасты бала кеүек ҡәҙерләп, тәрбиәләп үҫтереүҙәре нисектер хатта көлкө һымаҡ та тойолдо.

— Беҙҙә, Бөрйәндә, ағастар үҙҙәренән-үҙҙәре болотҡа тейерҙәй булып үҫә лә ҡуя. Ә былар? Фу!.. — тип кенә ебәрҙе ул, кәкере-бөкөрө емеш ағастарына кәмһетеп ҡарап. — Беҙҙә шәм кеүек төп-төҙ, һылыу ҡарағайҙар үҫә...

Баҡсала бер генә ағас Иҙелғужаның иғтибарын үҙенә тарта алды. Был, бик бейектән булмаһа ла, яҡ-яҡҡа киң ботаҡтар ебәреп ҡапайып үҫкән ҡарт алмағас ине. Алмағастың көслө тамырҙары ергә тәрән үтеп ингән. Сатнап бөткән һоро ҡабыҡ менән ҡапланған йыуан, мыҡты олононан бик күп көслө ботаҡтар һуҙылған. Ботаҡтарҙан ваҡ тармаҡтар, тармаҡтарҙан йәш нәҙек тәлгәштәр сыҡҡан. Был тәлгәштәрҙә, күбәләк кеүек лепелдәп, йәшел япраҡтар елберҙәп тора. «Ныҡ ағас, — тип уйлай Иҙелғужа,— ергә ныҡ йәбешеп үҫкән».

Ләкин Иҙелғужа уны шәп ағас тимәй. Шәп, — уныңса, иң ҙур маҡтау һүҙе. Уралда үҫкән ҡарағас,

ҡарағайҙарҙы ғына шәп ағас тип әйтергә өйрәнгән бит ул. Ә был алмағасҡа шәплектә ҡайҙа улар менән ярышырға!..

Күҙ етеүгә, алмағастың япраҡтары һарғайҙы, ҡойолдо. Тәлгәштәрендә ҡаты һоро бөрөләр генә тороп ҡалды. Был саҡта инде ул Иҙелғужа үсән башҡа емеш ағастарынан бер ни менән дә айырылмаҫ булды.

Ҡыш буйы алмағас шулай шыр яланғас ултырҙы. Ләкин, яҙ етеп, ҡар иреү менән, уянып, тамырҙары менән ерҙән татлы һуттар имә башланы. Ул һуттар алмағастың олоно буйлап үргә, ботаҡтарына, тармаҡтарына, тәлгәштәренә үрмәләне. Ҡыш буйы ҡатып торған кескәй бөрөләренә инеп тулды. Бөрөләр бүртенде, йомшарҙы, бара-тора күрән ҡабыҡтары асылып китте. Ҡабыҡ аҫтынан япраҡтар, алһыу аҡ сәскәләр атып сыҡты.

Алмағас инде Иҙелғужаға нык ҡына оҡшай ҙа башланы.

— Һылыу ағас, — тип маҡтаны уны хәҙер Иҙелғужа. Олаталарына эйәреп, ағастарҙың буйына, һынына ҡарап ҡына баһаларға өйрәнгән Иҙелғужаға алмағас бында һаман берҙән-бер иғтибарға лайыҡ ағас булып ҡалды. Шуға күрә баҡсаға эшкә сыҡҡанда, ул һаман ошо ағас тирәһендә генә уралды. Уның төбөндәге ерҙе ҡаҙып йомшартты. Олонон да эзбиз менән үҙе буяны. Алмағас тирәһендәге ағас-таш, сүп-сарҙың береһен дә ҡалдырмай баҡсанан ситкә сығарып ташланы.

Алмағас айлап түгел, көнләп үҙгәрҙе. Бына бер саҡ сәскәләрен дә ҡойҙо. Тирә-яҡты аҡ күбәләк кеүек алһыу аҡ сәскәләр күмде. Ә тәлгәштәрҙә, сәскәләр урынында, кескәй генә йәшел алмалар ҡалды. Был алмалар көндән-көн үҫте, ҙурайҙы, тулышты. Ә инде йәй аҙағына ҡып-ҡыҙыл ҙур алмалар бешеп етте.

Иҙелғужа түҙмәне. Бер көндө был алмаларҙың береһен өҙөп алды. Тешләп ҡараны. Алма ауыҙҙа ireп тора ине. Иҙелғужа нык ләззәтләнеүҙән, хатта күҙҙәрен сырт йомоп, irендәрен сәпелдәтеп ҡуйҙы.

— Ух, ҡайһылай тәмлекәй!..

— Бешкән алма, — тине уҡытыусы. Бер алманы урталай ярып, Иҙелғужаға орлоҡтарын күрһәтте.

— Бына, күрәһеңме, орлоҡтары ла ҡап-ҡара. Тимәк, алма бешкән, өлгөргән.

— Шәп! — тине хәҙер Иҙелғужа. — Беҙҙең ҡарағайҙар тиклем үк ҙур булмаһа ла, барыбер шәп ағас икән был...

— Аҫыл һөйәк буйға ҙур булмай, тиҙәр бит, — тип көлөмһөрәп ҡуйҙы уҡытыусы. — Ҡайҙа үҫһә лә, ул хур булмай. Шулай бит, Иҙелғужа?

Иҙелғужа, был һүҙ менән ризалашҡанын белдереп, баш ҡына ҡаҡты. Сөнки һүҙ менән яуап бирергә уның ауыҙы буш түгел. Ул ҙур итеп алма ҡапҡайны.

Был көндөң иртәһенә уҡыусылар мәктәп баҡсаһының емешен йыйҙылар. Иҙелғужа яратҡан ҡарт алмағас иң күп алма бирҙе.

Тағы көҙ етте. Алмағастың япраҡтары тағы һарғайҙы. Тиҙҙән ҡыш етер. Алмағас тағы шыр яланғас тороп ҡалыр. Уның нәҙек тармаҡтарында, тәлгәштәрендә тағы шул ҡаты көрән бөрөләр генә күренеп торор. Киләһе йылдың бөтә өмөтө ошо кескәй бөрөләрҙә һаҡланыр. Ағас ғүмере шулай дауам итер...

— Өмөт бөрөләре, — тип атаны уларҙы хәҙер Иҙелғужа. — Алмағастың йәшәү өмөтө шул бөрөләрҙә икән дәбаһа!..

# „Йәшел югән“

Малайҙар элек-электән бәхәс яратҡан халыҡ инде ул. Бер көн шулай пионерҙәр сборы башланыр алдынан, малайҙар араһында ҡыҙыу бәхәс китте. «Ниндәй эштә һәләт кәрәк? Ә ниндәй эште һәләтһеҙ ҙә эшләп була?»

Кыласта һүрәт төшөрөү оҫтаһы булып танылған, арыҡ кәүҙәле, нәҙек кенә тауышлы Ғәлим тигән малай:

— Йырсы, бейеүсе, яҙыусы булыр өсөн генә талант кәрәк. Художник булыр өсөн дә унһыҙ булмай. Ә бөтә башҡа эште талантһыҙ ҙа эшләп була,— тип раҫланы.— Тик теләгең генә булһын,— тине. Уның был фекерен хуплаусылар ҙа, кире ҡағыусылар ҙа табылды. Әммә төп һүҙ кластағы малайҙарҙың ҡайһыһы нимәгә һәләтле булыуы хаҡында барҙы. Береһененең — йырға, икенсеһенең — моделдәр яһарға, өсөнсөһөнөң — шиғыр яҙырға, дүртенсеһенең шахмат уйнарға һәләте барлығы беленде. Хатта футбол уйнарға, бигерәк тә вратарь булырға яратыусы Шакир ҙа талантлы футболсы булып сыҡты. Үтә тыйнаҡ, йыуаш холоҡло Дәмин генә бәхәскә ҡатнашманы. Иптәштәре унан:

— Дәмин ул уҡыуҙан башҡаны белмәй. Ә уҡыу өсөн талант кәрәкмәй. Тырышлыҡ булһа етә, — тип көлдөләр.

— Дәмин ул хатта һөйләшергә лә иренә. Ялҡау ул! — тип раҫлаусылар ҙа булды. Ә Дәмин, ғәҙәтенсә, был һүҙҙәрҙе лә яуапһыҙ ғына уҙғарҙы. Бер кемгә бер ни тип тә һүҙ ҡушманы. Шунан иптәштәре уны тыныс ҡалдырҙылар. Яуаплашмаған кешене үртәүҙән ни ҡыҙыҡ бар?!

Бына сбор башланды. Отряд вожатыйы Самат:

— Был сбор колхоз ерендәге соҡорҙарға, йырғанаҡтарға ҡаршы көрәш асыуға арнала,— тип белдерҙе. — Был хаҡта һеҙгә хәҙер үҙебеҙҙең яратҡан ботаника уҡытыусыбыҙ Шаһи ағай бер нисә һүҙ әйтер.

— Былай ҡарағанда, улар зарарһыҙ һымаҡ. Соҡор — соҡор, йырын — йырын инде ул, балалар. Ә тикшереп ҡараһаң, улай түгел икән шул. Улар бит баҫыу ерҙәрен өңөп, соҡоп, йырып бөтәләр! Ямғыр, ҡар һыуҙары ошо йырындар буйлап күпме уңдырышлы ҡара тупраҡты йыуып, ағыҙып алып китә?!— тип, ашыҡмай ғына һөйләп, Шаһи ағай балаларға быуаса баштарына ла килмәгән яңылыҡтар хаҡында аңлатты.

Оҙаҡламай йәйге каникул башланды. Пионерҙәр, үҙ колхоздарының бөтә ерен ҡарап сығырға, унда күпме йырын, соҡор, йырғанаҡ барын иҫәпкә алырға теләп, походҡа сығып киттеләр. Иҫәпкә генә алып та ҡалманылар, хатта картаға ла төшөрөп йөрөнөләр.

Бер көн шул эш менән мауығып йөрөй торғас, улар ауылдан ете-һигеҙ километр алыҫлыҡта ятҡан Ҡаҡтау битләүендәге бик тәрән, ҙур йырынға барып сыҡтылар. Был йырын Ҡаҡтауҙың иң уяҙ битләүен тотош тигәндәй алып ята ине. Ҡаҡтау түбәһенән төшкән ямғыр һыуҙары ла, ҡар һыуҙары ла ошо йырын буйлап түбән ағып төшә. Пионерҙәр был йырынды картаға ҡалын ҡыҙыл һыҙыҡ менән билдәләп ҡуйҙылар. Тимәк, иң ҙур йырын, көрәште иң тәү башлай торған урын. Был эште эшләгәс, уларға инде ары китергә лә мөмкин ине. Ләкин улар йырын буйлап йөрөп үтергә лә теләнеләр. Бигерәк тә был фекерҙе Шакир ҡеүәтләне.

— Ҡояш үтә яман ҡыҙҙыра башланы. Йырын эсе ҡалай рәхәт, еләҫ кенәлер. Әйҙәгеҙ, шунда төшөп, һалҡын алып сығайыҡ,— тине.— Йырындың иң тәрән ерендә нимә бар икән? Унда һауа нисек икән? Төшөп beləйек! — тип тә ҡыҙыҡһындырып ебәрҙе. Вожатый Самат та быға ҡаршы килмәне. Уның үҙенең дә, күләгәгә төшөп, һалҡын алғыһы килә ине. Оҙаҡламай улар йырындың тәпәшерәк ярынан кемуҙарҙан түбән һикерҙеләр. Өҫтә бошмаҫ Дәмин генә тороп ҡалды.

— Мин һеҙҙе ошонда көтөрмөн, — тине ул. — Мин ҡояшта ҡыҙынырға яратам!

— Талантһыҙ Дәмин генә түгел, ялҡау Дәмин дә бит ул, — тип көлдө Шакир унан. — Йоҡлап алмаҡсы булалыр әле ул!

— Йоҡо ла бер эш! Шулай бит, Дәмин дуҫ! — тип мәрәкәләне Ғәлим. Ә Дәмин өндәшмәне. «Нимә бушҡа унда һөйрәлеп йөрөргә?» тип уйланы ла, аяҡтарын һалындырып, яр ситенә ултырҙы. Иптәштәре көлөшә-йүгерешә ары киттеләр.

Йырын эсе төпкәрәк ингән һайын ҡараңғыраҡ, еүешерәк була барҙы. Ярҙары текәләнгәндән-текәләнде. Һаман тигеҙһеҙерәк, уйылмалыраҡ була барҙы. Ҡайһы бер урындары, өҫкә емерелеп төшөрҙәй булып, күңелгә хәүеф һалып тора ине. Өҫкә ҡараһаң, бынан күк йөҙө кескәй генә, зәңгәр ашъяулыҡ һымаҡ ҡына булып күренә башланы. Ә был ят донъя менән мауыҡҡан балалар һаман алыҫыраҡ, төпкәрәк инә барҙылар. Ул арала Ҡаҡтау артынан ҡалын ҡара болот ҡалҡып сыҡты.

«Үтә ҡыҙҙырыуында бер хикмәт бар ине лә», тип уйлап алды Дәмин. Тынысһыҙланып тороп баҫты. Сабырһыҙ атлап, яр буйлап ары-бире йөрөй башланы. «Ямғыр яумаҫ элек әйләнеп сыҡһалар ярар ине. Юҡһа йырғанаҡты һыу баҫыр ҙабаһа!»

Ел-дауыл күтәрелде. Ҡара болот, тау башына һыйынғандай, һаман көслөрәк баҫып килә башланы. Ә йырындағылар быны күрмәй ҙә, белмәй ҙә йөрөй бирәләр ине. Сөнки унда ел дә, болот та юҡ ине. Әммә Дәминдең тыныслығы тамам юғалды. Ул, үҙенә хас булмаған сабырһыҙлыҡ менән ҡысҡыра-ҡысҡыра, яр буйлап йүгерә башланы.

— Сығығыҙ! Ямғыр килә! Көслө ямғыр килә! Йырынды һыу баҫыр! Һәләк булырһығыҙ!..

Ахыр уның тауышы йырындағыларға барып етте. Улар хәүефләнеп үргә ҡаранылар:

— Нимә булған быға?!

Шул саҡ улар баяғы асыҡ зәңгәр күк йөҙө урынына, өшө соҡор төбө шикелле, ҡырыҫ, ҡараңғы булып киткән күкте күрҙеләр. Вожатый Самат үҙенең артыҡ мауығып китеүен, балаларҙы алыҫ алып ине-

үен аңланы: «Ысынлап та, көслө ямғыр яуа башлау менән, йырынды һыу баҫып китәсәк тәбаһа! Тиҙерәк, йәһәтерәк артҡа, кирегә югерергә! Был хәтәр тоҙаҡтан балаларҙы сығарып өлгөрөргә!»

Ул үҙенең ҡурҡҡанын белдермәҫкә тырышып, шат тауыш менән балаларға өндәште.

— Малайҙар, йә кем шәп югерә? Ярышайыҡ! Дәмин янына кем иң тәүҙә барып етеп, яр башына иң тәүҙә сыға, шул бөгөнгө көндөң батыры була!

Малайҙар аяҡтары ергә теймәй югерешеп киттеләр. Вожатый уларҙы һәләтләп-күтәрмәләп арттан югерҙе. Ә үрҙә, тау өҫтөндә, күк йөҙө ҡоро мискә кеүек сатнап ярылды, йәшен телдәре бер өҙлөкһөҙ тирәяҡты ҡапшаны. Әйтерһең дә, ете башлы аждаһа, ҡоторонop, үҙенә яңы ҡорбандар эҙләне. Бына эре-эре ямғыр тамсылары инде йырын эсенә лә һибәләй башланы. Ул арала булмай, арттан ниндәйҙер шомло бер нәмәнең шыулап ҡыуып килгәне ишетелде.

«Ямғыр һыуы йырынға ағып төшә. Тиҙҙән беҙҙе лә ҡыуып етер», тип ҡурҡынып уйланды Самат. — Нисек бынан тиҙерәк сығып ҡотолорға?!» Тирә-яҡҡа ялт-йолт ҡаранып, өҫкә сығырҙай урын ҡараны. Әммә был текә, тайғаҡ йырын ярында ундай урын күренмәй ине.

— Тиҙерәк, йәһәтерәк югерегеҙ, малайҙар! Юҡһа үҙем иң алдан югереп барып етәм дә көндөң батыры булам! — тип һаман тыныс, шаян тауыш менән дәртләндерҙе ул балаларҙы. Ә ҡаршыла уларҙы ямғырға һыуланып еп-еүеш булған Дәмин ҡеүәтләп, йәһәтләп югереп йөрөй ине.

— Бына бында килегеҙ. Йәһәтерәк! Үҙем тартып алам!

Ул салбарын быуып ҡуйған ҡайышын сисеп алып түбән һуҙҙы:

— Ошоға йәбешеп сығығыҙ!

Ысынлап та, ямғыр һыуҙары шапырҙап ҡойолоп торған был тайғаҡ яр өҫтөнә, кемдер тартып алып тормаһа, менеү мөмкин дә булмаясаҡ ине. Дәмин өҫтән тартып, Самат арттан ярҙамлашып, бик тиҙ арала балаларҙы яр өҫтөнә сығарып бөттөләр. Тос кәүҙәле «талантлы футболсы» Шакирҙе тартып сығарыуы

айырата ауыр булды. Етмәһә, уның аяғындағы тапочкаһы ла артыҡ тая һымаҡ ине. Ә инде «талантлы художник», сибек Ғәлимдең бөтөнләй тип әйтерлек хәле бөткәйне. Уны Самат ҡултығына ҡыҫтырып тигәндәй үргә алып менде.

Ни булһа булды, бөтәһе лә яр өҫтөнә бик ваҡытлы сығып өлгөрҙө. Күп тә үтмәй, йырынды ҡыҙыл мәтеле болғансыҡ һыу тулҡыны айбарланып баҫып китте. Самат, ажғырып аҡҡан ямғыр һыуына ҡарап, тағы бер ҡурҡыу кисереп алды. «Йә, сығып өлгөрмәһәк, беҙҙең бөтәбеҙҙе лә күмеп китә ине ләбаһа был һыу! Ярай әле Дәмин ваҡытлы иҫкәртте...» Унан, ҡыуанып, Дәмингә ҡараны.

— Бөгөнгө көндөң батыры һин булдың, Дәмин. Рәхмәт! — тип уның ҡулын ҡыҫты. — Иптәштәреңде бәләнән ҡотҡарҙың.

Дәмин, был маҡтауҙан уңайһыҙланып, ҡолаҡтарына хәтле ҡыҙарынып китте лә бер ни ҙә өндәшмәне. Уның шулай күп һөйләшеүҙән дә, маҡталыуҙан да уңайһыҙлана торған ғәҙәте бар ине.

* * *

Элекке агроном, хәҙерге колхоз председателе Юлдыбай ағай уҡыусыларҙың һәм пионерҙәрҙең һәйбәтләп, яҡшылап эшләп алып килгән карталарын бик яҡшылап ҡарап сыҡты ла:

— Молодец! — тип ҡуйҙы. — Молодец. Шәп эш эшләгәнһегеҙ. Үҙебеҙҙең колхоз ерен йырғылаған бөтә соҡор-саҡырҙы планға төшөргәнһегеҙ. Инде беҙ уларға ҡаршы көрәш ойоштороrбыҙ. Улар артабан да күбәймәһен, киңәймәһен өсөн, уларға беҙ «йәшел югән» кейҙереп, ауыҙлыҡлап алырбыҙ,— тине. — «Йәшел югән» нимә була ул, тиһегеҙме? Ул — ағаслыҡ була. Ағас үҫтерһәң, йырындарҙың яры нығына, артабан емерелмәй, киңәймәй. Ағаслы урындан тупраҡты ямғыр, ҡар һыуҙары еңел генә йыуып алып китә алмай. Тимәк, йәшел югән менән сабып барған йырғанаҡты ауыҙлыҡлап, туҡтатып ҡалырбыҙ беҙ һеҙҙең менән! Әйе, йырғанаҡтарға, соҡорҙарға «йәшел югән» кейҙерергә! Уларға ерҙе ашай-ашай ары сабырға юл ҡуймаҫҡа!

Юлдыбай ағай, был һөйләшеүҙән һуң күп тә үтмәй, питомниктән төрлө ағас үҫентеләре килтертте. Ә уҡыусылар, пионерҙәр үҙҙәре картаға төшөрөп алған соҡорҙарға, йырғанаҡтарға уларҙы күпләп ултырттылар. Был эштә иң сыҙам, тырыш эшләүселәрҙең береһе Дәмин булды.

— Дәминдең ҡулында көрәк уйнап ҡына тора. Әйтерһең, гел генә ер ҡаҙыу эшендә эшләгән, — тип кинәнеп һөйләне вожатый. Ә Юлдыбай ағай:

— Эшсән ғаиләнән ул Дәмин. Һүҙҙе түгел, эште һөйөүсән тоҡомдан, — тип уның арҡаһынан ҡаҡҡылап та ҡуйҙы. «Талантлы футболсы» Шакир ҙа был юлы өндәшмәй ҡала алманы.

— Тегe ваҡытта мин һине һәләтһеҙ тип яңылыш әйткәнмен икән, Дәмин. — Көрәк тота белеү ҙә бер һөнәр икән ул! — тип ҡуйҙы. Сөнки Дәмин күп ваҡыт үҙ өлөшөн генә түгел, Шакирҙең өлөшөн дә эшләп ташлай. Ҡемдең эше артҡа ҡалһа, шуға барып булыша. Шуға күрә уны хәҙер Шакир ҙа маҡтамай ҡала алмай ине. Ләкин Дәмин дуҫының маҡтауын да, ғәҙәтенсә, тыныс, һүҙһеҙ генә ҡаршы алды. Бер ни тип тә өндәшмәне. Сөнки ул маҡталыу өсөн эшләмәй ине.

* *
*

Бер-ике йыл үтеүгә, пионерҙәр шул йылда ултыртҡан йөҙләгән, меңләгән төп ағас үҫентеләре йәшәреп үҫеп китте. Ҡаҡтау йырыны ғына түгел, Ҡаҡтау өҫтө тотош ағаслыҡҡа әйләнде. Иң мөһиме — уларҙың был һәйбәт эшен күрше колхоздарҙың пионерҙәре лә күтәреп алды. Улар ҙа ағас үҫтерергә яратыусан булып китте. Ә Дәмингә килгәндә, ул был эш менән бөтөнләй мауыҡты. Ағастар, баҡсалар, сәскәләр үҫтереүсе агроном булам, тип хыялланып йөрөй башланы. Булыр ҙа шул. Беҙҙең илдә бит кем тырыша — ул ирешә. Тик тырышыуың ғына ысын булһын.

*1962*

27423

БИ ЛИОТЕКА
дин. иного фкома
Учалинского ГОК

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

### ХИКӘЙӘТТӘР

ҺӨНӘРСЕ ҺӘМ ӨЙРӘНСЕК . . . . . . . . . . . . . . . 7
МӨХӘББӘТ ҺӘМ НӘФРӘТ . . . . . . . . . . . . . . 34

### ПОВЕСТӘР

ДУҪ БУЛАЙЫҠ . . . . . . . . . . . . . . . . . . 71
ПАРТИЗАН МАЛАЙ . . . . . . . . . . . . . . . . 295

### ХИКӘЙӘЛӘР

БАШАҠ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 353
ҠОЯШ НИМӘ ТИНЕ? . . . . . . . . . . . . . . . . 363
ЯРҘАМСЫ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 369
ӨМӨТ БӨРӨЛӘРЕ . . . . . . . . . . . . . . . . . 375
«ЙӘШЕЛ ЮҒӘН» . . . . . . . . . . . . . . . . . . 378

*Биишева Зайнаб Абдулловна*

**ИЗБРАННЫЕ ПРОИЗВЕДЕНИЯ**

Том II

**Повести и рассказы**

(*на башкирском языке*)

Редакторы *Ғ. А. Дәүләтов.* Художниге *А. А. Астраханцев.* Техник редакторы *А. Я. Горбачева.* Корректорҙары *Р. Л. Каһарманова, Ә. Ғ. Абдрахманова.*

Наборға бирелде 19/XII 1968 йыл. Баҫырға кул куйылды 7/VII 1969 йыл. Ҡағыҙ форматы $84\times108/_{32}$. Физ. баҫма таб. 12,0. Шартлы баҫма таб. 20,16. Учет.-изд. таб. 18,61. Тиражы 5000 экз. П 09463. Изд. № 83. Газета кағыҙы. Заказ № 555. Хакы 74 тин.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы эргәһендәге Матбуғат идаралығының Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө-25, Совет урамы, 18.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы эргәһендәге Матбуғат идаралығының Өфө полиграфия комбинаты. Өфө-1, Октябрь проспекте, 2.